ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-3 май - июнь (һабанай - һөтәй)

2016

№22 (700)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡаҙан ҡайнай - ярма юҡ



3

Мәктәптәрҙә...

һуңғы ҡыңғырау



4

Тәрбиә әкиәттән башлана...

Быны "Һаумы, һаумы, әкиәт!" бәйгеһе лә раҫлай



6

Рухландырҙы...

Сибай байрамдары





16

ТВ-программа 14

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!**
***Йортоғоҙҙа аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡуҙғыуы теләһәгеҙ, "Киске Өфө"лө булығыҙ. Ни өсөн "Киске Өфө" гәзитен уҡырға кәрәк? Өсөнсө сәбәп. Аҡыллы булыр өсөн. Был баҫмала - донъяуи аҡыл, ата-бабалар аҡылы. Дүртенсе сәбәп. Дәрәҫ һөйләшер өсөн. Баҫма туған телебеҙҙең һутын, матурлығын һүрәтләп кенә ҡалмай, ә күңелгә яҡынайта, уны баһаларға һәм һанларға өйрәтә. Гәзиттең индексы - 50665, 6 айға яҙылыу хаҡы - 574 һум 32 тин.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һуңғы ваҡытта башҡорт милли кейеменә ҡарата иғтибар артыуы һиҙелә. Фәнни-ғәмәли конференциялар ойоштоурола, бөгөн иһә Өфөлә Башҡорт милли кейеме көнө уҙҙарыла. Ғөмүмән, башҡорттар үҙ милли кейеме тураһында иң тәүге сиратта ниҙәр белергә тейеш?

***Зөһрә РӘХМӘТУЛЛИНА, философия фәндәре докторы, профессор, БР Халыҡтары ассамблеяһы рәйесе, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** "Ағас күрке - япраҡ, әҙәм күрке - сепрәк" тигән әйтем бар башҡорттарҙа. Әҙәм тәнендә барлыҡҡа килгән замандарҙан алып, кейем кешене һыуыҡ, эҫе, ел-ямғыр кеүек тәбиғәт стихияһынан һаҡлаусы ғына түгел, уның мәҙәни-социаль статусын, этник сығышын билдәләүсе лә, шул уҡ ваҡытта кешенең эске донъяһы - рухиәтен, эстетик-мәҙәни ҡараштарын, аң-белем һәм художестволы зауыҡ кимәлен күрһәтеп тороусы билдә лә ул. Башҡорттарҙың бөгөнгө көнгәсә килеп еткән боронғо милли кейеме башҡа бер халыҡта ла булмағанса үҙенсәлеге менән айырылып тора. Традицион башҡорт костюмдарында бер ваҡытта ла арзан яһалма биҙәүестәр, быяла мунсаҡтар булмаған. Алтынға ла ҡыҙыҡмаған башҡорт - көмөштө үҙ иткән, сөнки тап ошо металдың шифалы дауалау үҙенсәлектәрен белгән һәм уның яман көстәрҙән һаҡлағыс тылсымына ышанған.

Студент сағымда минә Мәскәүгә барып, диплом эше яҙырға тура килгәйне. 17 ҡатлы ҙур ятаҡта бөтөн донъянан йыйылған студенттар йәшәнек. Шулар араһында милли кейемдә йөрөгән төркмән ҡыҙы иғтибарымды йәлеп итте. Заман стиленә яраҡлаштырып тегелгән кейеменә зауыҡлы биҙәүестәре лә үҙенсәлекле милли колорит өҫтәй. Шул саҡтан алып миндә "Ә ниңә беҙ ҙә шулай кейенмәйбеҙ һуң?" тигән уй йәшәне. Университетта эстетиканан дәрестәр бирә башлағас, үҙем дә милли стилдә кейенеп, көмөш биҙәүестәр тағып йөрөй башланым.

Быйыл учалылар башҡорт милли кейеменә арналған фәнни-ғәмәли конференция ойоштороу тәҡдиме менән Ассамблеяға мөрәжәғәт иткәс, шатланып ҡабул иттек. Республика Башлығы ла был идеяны хупланы. Бындай конференциялар Баймаҡ районында, Сибай ҡалаһында ла үткәйне. Был бөтәбеҙгә лә, айырыуса йәштәр өсөн бик кәрәк эш. Әгәр ҙә халҡыбыҙ үҙ асылын (ә ул милли кейемдәрҙә бигерәк тә сағылыш таба) ҡәҙерләп һаҡлай икән, тимәк, бөгөнгөбөҙ ҙә, киләсәгебеҙ ҙә ышаныслы, оҙон ғүмерле булыр, тип уйлайым. Иғтибар итһәгеҙ, мин Башҡортостанда ғына түгел, ә Мәскәүҙә Дәүләт Думаһында ла Учалыла эшләнгән үҙебеҙҙең милли стилдәге биҙәүестәр тағып йөрөйөм. Халҡыбыҙ ҡомартҡыларының заманса был өлгөләренә һоҡланмаған кеше һирәк. Ҡыҙыҡһыналар, һорашалар, заказ биреүселәр ҙә бар хатта. Бының менән мин, беҙ ҙә башҡа милләттәр рәтендә үҙ йөҙөбөҙҙө, үҙ рухыбыҙҙы күрһәтә, раҫлай алабыҙ, тип әйтмәксемен. Милли колорит, ошо стилдәге кейем һәм биҙәүестәр кешенең рухи асылын ғына ла күрһәтеп ҡалмай, минеңсә, был һәр кемдең үҙ-үҙен раҫлау сараһы ла. Бик яҡшы башланғысҡа нигеҙ һалынды, халҡыбыҙ ҡомартҡыларын тергеҙеп, беҙ киләсәк быуындарыбыҙ рухын да һаҡлаясаҡбыҙ, тимәк.

***Асия ҒӘЙНУЛЛИНА, "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе үҙәге, Сибай "Аҡинәйҙәр ҡоро" етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Учалыларҙан алда 18 май көндө беҙ Сибай ҡалаһында башҡорттоң милли кейемдәре байрамын гөрләтеп үткәреп ебәргәйнек. 2 йәш ярымлыҡ баланан алып, 82 йәшкә тиклемге инәйгә тиклем меңәрләгән кеше башҡорт милли кейемдәрендә почетлы подиумдан үтте. Улар араһында ҡалабыҙҙың ябай кешеләре, юғары, урта һәм махсус урта белем биреүсе мәғариф учреждениелары коллективтары, балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәре, шулай уҡ уларҙың уҡытыусылары һәм тәрбиәселәре булды. Шуныһы ҡиммәт: был ысын мәғәнәһендәге халыҡ байрамына һәр кем үҙе тегеп кейгән милли кейемдәрҙә килгәйне. Сибайҙа ғына түгел, Көньяҡ Урал районларында ла хәҙер түшелдерек, селтәр, һаҡал, хәситә, ҡашмауҙы эшләргә өйрәнде халыҡ. Байрамдың төп программаларының береһе ана шундай оҫталарҙың ярышына арналды, аҙаҡ уның еңеүселәре билдәләнде. Кемделер айырып әйтеүе лә ҡыйын: һәр кемдең күҙ нурҙарын түгеп, тырышып әҙерләнгәне күренеп тора. Ҡатнашыусыларҙың ҡайһы берҙәренә милли кейем нескәлектәре буйынса белгес кәңәштәре кәрәклеге лә күренде, ләкин уларҙың изге ынтылыштарын ихтирам итеп, "йөҙ йыртмай" ғына хеҙмәттәре баһаланды. Әйтеүемсә, иң ҡиммәте - кешелә үҙ тарихына, тамырҙарына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм ошо йүнәлештә дөйөм хәрәкәттең башланып китеүе. Ошоноң шаһиты булып, ҙур ҡыуаныс кисерҙек.

Шулай ҙа ҡайһы бер деталдәргә туҡталғым килә. Кейем теккәндә һәр милләттең үҙ стиле булыуын онотмаҫҡа кәрәк, юғиһә, башҡа халыҡтарҙағы биҙәктәрҙе файҙаланыусылар бар. Үҙең матур тип иҫәпләгән, һәр бер ялтыраған нәмәне ҡулдаҡ, камзул йә селтәргә ҡаҙап ҡуйыу дөрөҫ түгел. Унан һуң элек кейелгән ҡайһы бер көндәлек, эш кейемдәрен дә туранан-тура бөгөнгөгә күсереп, үтә ябайлаштырып ебәрергә ярамай. Замананында ата-бабаларыбыҙ бер елән өсөн генә лә өйөр-өйөр малын түләп, иҫәпләшкән икән, ул кейемдәр бик ҡиммәт, зауыҡлы булған. Башҡорт милли кейемдәре Һиндостан, Италия кеүек сит илдәрҙән килтерелгән сифатлы тауарҙарҙан тегелгән булған. Әле беҙ боронғоға оҡшатып, камзул итәге ситтәренә 5 һыҫар тиреһе тегеп сыҡһаҡ, яурын баштарына 4 һыҫар ҡойроғо китә. Кеш (соболь) тиреһе лә ҡулланылған борон быныың өсөн. Ҡама тундар, ҡамсат бүректәр булған. Әйткәндәй, көҙ - көҙгө милли кейемдәр, ә ҡыш еткәс, Алла бирһә, халҡыбыҙҙың ҡышҡы кейемдәре байрамдарын да үткәрергә ниәтләп торабыҙ.

(Дауамы 2-се биттә).



Учалы ағинәйҙәре РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллина менән.

12+

✓ *Милли кейем "теле" һөйләү телмәре менән бер рәттән, йәмғиәттең аң-белем даирәһен киңәйткән һәм киләсәкке быуындар өсөн мәғлүмәт тапшырыу сараһы ла булып хеҙмәт иткән.*



## ТУҠТА, МӘЛ!









*Учалы ҡалаһында үткән башҡорт милли костюмына арналған сарала ҡатнашыусылар.*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Һуңғы ваҡытта башҡорт милли кейеменә ҡарата иғтибар артыуы һиҙелә. Фәнни-ғәмәли конференциялар ойошторола, бөгөн иһә Өфөлә Башҡорт милли кейеме көнө уҙғарыла. Ғөмүмән, башҡорттар үҙ милли кейеме тураһында иң тәүге сиратта нимәләр белергә тейеш?*

*(Башы 1-се биттә).*

***Гүзәл ҠАЗБУЛАТОВА, философия фәндәре кандидаты:*** Башҡорттоң милли кейеме уны "уҡый" белгәндәр өсөн үҙе бер бай тарихлы китап кеүек ул. Уның ысын өлгөләрен хәҙерге быуындарға фәҡәт музейҙарға барып ҡына тамаша ҡылырға тура килә. Башҡорттарҙың милли кейеме халыҡтың философик-этик ҡараштарына, тормош шарттарына, меңәр йыллыҡ тарихына, ырым-йола, традицияларына ныҡ бәйле. Кейеменә ҡарап, кешенең ниндәй социаль ҡатламға ҡарауы, ғаилә хәле тураһында (айырыуса ҡыҙҙарҙың, кейәүгә сыҡҡан килендәрҙең) мәғлүмәт "уҡырға" мөмкин булған. Мәғәнәүи йәһәттән баш кейемдәренең ҡәтғи үҙ дәрәжәһе, үҙ тәғәйенләнеше барлығы ла мәғлүм. Мәҫәлән, өлкәнерәк ҡатындар баштарына киндер йә ситсанан аҡ яулыҡ - таҫтар ябынған, дәрәжәле, бай ҡатындары яулыҡ өҫтөнән ҡама йәки ҡамсат бүрек кейгән. Ә бына ҡашмау - кейәүгә сыҡҡан ҡатындар өсөн генә тәғәйенләнгән баш кейеме. Йәш ҡыҙҙар ҡашмау киймәгән, сәстәренә тәңкәле сулпылар, үрместәр таҡҡан, елкә соҡоро тапҡырында ҡайын туҙынан өсмөйөшләп яһалған сәс ҡыҫтырғыс йөрөткән. Әйткәндәй, уның да ҡыҙ баланы күҙ тейеүҙән, сихырҙан һаҡлау функцияһына иғтибар биргәндәр.

Шул уҡ ваҡытта халыҡ кейеме йәмғиәт үҫешенең социаль, матди һәм техник кимәлен дә күрһәтеп торған һәм эстетик йәһәттән биҙәүестәрҙең геометрик концепцияһында сағылыш тапҡан. Милли кейем "теле" һөйләү телмәре менән бер рәттән, йәмғиәттең аң-белем даирәһен киңәйткән һәм киләсәкке быуындар өсөн мәғлүмәт тапшырыу сараһы ла булып хеҙмәт иткән. Унан һуң, кейемдәге деталдәр, биҙәктәр яман күҙҙән, яман күҙҙән һаҡланыу саралары булараҡ та билдәле. Ырыу, йорт ҡотон һаҡлаусы ҡатын-ҡыҙ кейемдәрендә был символдар айырыуса асыҡ сағылыш тапҡан, сөнки бала имеҙеүсе әсәләрҙе, йәш кенә килендәрҙе боҙомдан ҡурсығандар, сит-ят күҙҙән һаҡлағандар. Мәҫәлән, башҡорт ҡатын-ҡыҙының туй костюмы тулы комплектында 30 кг-ға тиклем ауырлыҡта булған. Үҙегеҙ белеүегеҙсә, ул күлдәктән генә тормаған, әлбиттә. Ҡашмау, һаҡал, түшелдерек, сәсүрместәр, камзулдар көмөш тәңкәләр, мәрйен, аҡыҡ, гәрәбә, фирүзә кеүек аҫыл таштарҙан эшләнгән төрлө биҙәүестәр менән биҙәлгән. Ғөмүмән, милли кейемдәргә баштан-аяҡ мәғәнә һалынып эшләнгән, тигәйнем, сөнки ысынбарлыҡ серҙәрен төшөнөүгә ынтылыш, кешелек донъяһының мәғәнәһен һәм ҡиммәттәрен эҙләүгә яуап рәүешендә Ислам дине барлыҡҡа килгәс, донъя моделенең символик һүрәтләнеше булараҡ, ул мәҙәниәттә, шул иҫәптән милли кейемдәрҙә лә сағылыш тапмайынса ҡалмаған. Боронғо кейемдәрҙә донъяуи ысынбарлыҡ өс ҡатлы булараҡ айырым-асыҡ сағылыш алған: йыһан, ер һәм ер аҫты донъяһы. Элгәре бик популярлыҡ менән файҙаланылған аяҡ кейеме - сарыҡҡа ана шул ер аҫты донъяһына инеү элементы булараҡ ҡараш йәшәгән һәм уның ҡуныстары ла милли орнамент символикаһы, төрлө сигеү өлгөләре менән биҙәлә торған булған.

Ғөмүмән, башҡорт милли кейемдәре хаҡында бик оҙаҡ һөйләргә булыр ине, сөнки хәҙер кеше сәхнәләрҙә сығыш яһау өсөн стилләштереп тегелгән концерт костюмдарынан ғына сығып фекер йөрөтә. Айырыуса йәштәр был хаҡта бер ни ҙә белмәй. Башҡорт милли кейемдәре, уларҙың тарихы, символикаһы ентекләп өйрәнелгән, ҡыҙыҡһыныусылар өсөн материалдар бик күп хәҙер, уларҙы табып, уҡып, танышып барырға кәңәш итәм: 2020 йылда Өфөлә үтәсәк Бөтөн донъя фольклориадаһында мәғлүмәтле кешеләр булып ҡатнашайыҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**19 майҙа Учалы ҡалаһында үткән "Милли кейем: үткәндән - киләсәккә" тигән фәнни-ғәмәли конференция БДУ-ның Учалы вәкиллеге һәм райондың "Ағинәйҙәр ҡоро" ағзалары тарафынан ойошторолдо. Сараны РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллина, ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Зөһрә Гордиенко сәләмләне. Артабан башҡорт милли кейеме буйынса эҙләнеүҙәр алып барған, хеҙмәттәр яҙған ғалимәләр, белгестәр Зилә Рәхмәтуллина, Айгөл Камалиева, Гүзәл Ҡазбулатова, Гүзәл Вилданова, Асия Ғәйнуллина, Сәлимә Усманова һүҙ алды.**

**Әле ҡасан ғына милли кейемдәр бары тик мәҙәниәт йорттарының ғына милке булып иҫәпләнә, һәр төрлө сараларҙа ошо кейемдәрҙе генә кейеп сығыш яһай ине халыҡ. Хәҙер иһә һәр ауылда тиерлек ағинәйҙәр үҙҙәре теккән күлдәктә йөрөй, төрлө сараларҙа сығыш яһай. Әлеге сарала ла сәхнәгә күтәрелгән ағинәйҙәрҙең милли костюмдары күҙҙең яуын алды, төрлөлөгө менән һоҡландырҙы. Милли кейем дә тыуған тел һымаҡ, уларҙың да үҙенә генә хас һыҙаттары, билдәләре бар. Фәнни-ғәмәли конференцияла сығыш яһаусылар тап ана шул турала - башҡорт милли кейеменә генә хас үҙенсәлектәр хаҡында һөйләне. Артабан байрам ҡала майҙанында дауам итте. Милли кейемдәгеләр, рәттәргә теҙелеп, Учалы филармонияһынан ял һәм мәҙәниәт паркына тиклем атлап уҙҙы һәм сара ҙур булмаған фольклор тамашаһы менән тамамланды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда Дәүләт Думаһына "Берҙәм Рәсәй" партияһынан артабан күрһәтеү өсөн кандидатуралар буйынса алдан тауыш биреүҙең яҡынса һөҙөмтәләре билдәле булды. Төбәктә һайлауға 364 606 кеше, йәғни халыҡтың 11,89 проценты килгән. Һайланыусыларҙың тулы исемлеге партияның сайтында бирелгән.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов III Граждандар форумының пленар ултырышында сығыш яһаны. Төбәк Башлығы әйтеүенсә, коммерцияға ҡарамаған ойошмалар хеҙмәт баҙарында тотороҡлокто һаҡлауҙа, хеҙмәт бәхәстәрен хәл итеүҙә әүҙем ҡатнаша, хәйриә һәм ирекмәнлек эшмәкәрлеге менән шөғөлләнә. Башҡортостандың III Граждандар форумы - төбәктә граждандар йәмғиәтен үҫтереү һәм коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙың муниципаль берәмектәрҙең социаль-иҡтисади үҫешендә ҡатнашыу мәсьәләләре буйынса фекерҙәр туплау өсөн майҙансыҡ.

✓Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле, республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Артур Шәйнуров етәкселегендәге рәсми делегация эш сәфәре менән Ҡытай Халыҡ Республикаһына китте. Сәфәр 31 майға тиклем дауам итә. Сәфәр программаһында Аньхой провинцияһының Хэфэй һәм Хуаншань ҡалаларына, шулай уҡ Шанхайға барыу, Аньхой провинцияһын үҫтереү һәм реформалаштырыу буйынса комитет, Ауыл хужалығы комитеты, Коммерция департаменты, Туризм эштәре буйынса идаралыҡ, Аньхой провинцияһының Сауҙа-сәнәғәт палатаһы етәкселәре менән бер нисә осрашыу ҡаралған.

✓Швецияла Башҡортостандың йәштәрҙе эшкә урынлаштырыу тәжрибәһе менән таныштырыу булды. Республиканың хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова йәштәрҙең мәшғүллегенә булышлыҡ итеү мәсьәләләре буйынса субтөбәк конференцияһында ҡатнашты. Конференция Швецияла һәм Норвегияла үтте. Сарала Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһының субтөбәк бюроһына ингән һигеҙ илдең вәкилдәре ҡатнашты. Улар иҫәбендә - Рәсәй, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Грузия, Әрмәнстан һәм Әзербайжан.

✔ *Ул көн һайын дәрес планы әҙерләргә, БДИ-ға әҙерләргә, ата-әсәләр менән эшләп өлгөрөргә һәм шул уҡ ваҡытта һанап бөткөһөҙ ҡағыҙ эше - программалар, отчеттар, һәр дәрескә технологик карта төҙөргә тейеш.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ҠАҘАН ҠАЙНАЙ - ЯРМА ЮҠ

**Һеҙ беләһегеҙме, йәмәғәт: Рәсәйҙә ярлы пенсионерҙар юҡ икән дә баһа! Ысын-ысын, был турала бына яңыраҡ ҡына РФ Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Топилин әфәнде прәме күҙгә бәреп әйтте.**



Уйламай һөйләгән - ауырымай үлгән. Дәлилдәрһеҙ популистик был һүҙҙәренән һуң Топилинды интернет донъяһы нәфрәт диңгеҙенә батыра яҙҙы. "Капиталист министр" тип әрләп тә бөттөләр. Ысынлап та, Топилиндың белдереүҙәре ҡараға аҡтан ямау һалырға маташыу һымағыраҡ булды шул. Хәлебеҙ хатта ошо мәсьәләләргә битараф кешенең дә күҙенә ап-асыҡ күренеп тора: торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн, бигерәк тә аҙыҡ-түлеккә хаҡтар икеләтә тип әйтерлек артты. Пенсия ла шул тиҙлектә арта торһа, ни әйтер инең дә...

Хәҙер Топилиндың аҡ ямауы аҫтында йәшеренгән һандарға күҙ һалайыҡ, булмаһа. Бөтә Рәсәй тормош кимәле үҙәгенең генераль директоры Вячеслав Бобков әйтеүенсә, "Росстат мәғлүмәттәре буйынса, былтыр килеме йәшәү минимумынан түбәнерәк булған халыҡ һаны унан алдағы йылға ҡарағанда 16,1 миллиондан 19,2 миллионғаса артты. Был илдәге дөйөм халыҡ һанының 13,4 процентын тәшкил итә..." Ә илдә эшһеҙлек артыуын хеҙмәт министры нисек аңлатыр ине икән? Эшһеҙлек, тигәндән, пенсионерҙар үлгәнсә (ғәфү итегеҙ) эшләргә мәжбүр ителһә, йәштәр ҡайҙан эш урыны табыр? Сөнки хөкүмәтебеҙ, В. Жириновский һүҙҙәре менән әйткәндә, "пенсияға сығыу йәшен өҫтәү юлы менән ҡаҙна килемен арттырырға" йыйына. Бер моңһоу күләмәстәгесә, кеше былай ҙа "10 йыл ғына" йәшәй: мәктәпкә барғанса - 7 йыл һәм пенсиянан һуң - 3 йыл. Һәм аяҡ һуҙғанса - эшлә! Эше булһа, бер яҡтан, бик эшләр ҙә инең, тик барыбер властар теләгәнсә, 65 йәшкә тиклем уҡ түгел. Уға тиклем барып етеп булырмы икән, тип борсола әле уҡ күптәр. Ысынлап та, бөгөн Рәсәйҙә уртаса ғүмер оҙайлығын (тик ниңәлер ул төрлө сығанаҡта төрләсә: 66-нан 71-гәсә күрһәтелә) 70 йыл тип алғанда ла, тап әлеге анекдоттағыса килеп сығасаҡ бит! Дәүләт Думаһы Рәсәй чиновниктарына пенсия йәшен кисектерҙе лә инде: ирҙәр - 65, ҡатындар - 63 йәштән китәсәк хаҡлы ялға.

Минфин концепцияһы буйынса, пенсия системаһын үҙгәртеп ҡороуҙың тағы бер "түкмағы"- ул ташлама менән файҙаланыусылар һанын бермә-бер кәметеү. Статистика буйынса әле Рәсәйҙә һәр өсөнсө кеше һөнәр үҙенсәлеге, зарарлы эш шарттары буйынса ваҡытынан алда (45, 50, 55 йәштә) пенсияға сыға. Хәҙер иһә чиновниктар, күп һөнәрҙәр зыянлы булыуҙан туҡтаны, шуға күрә улар өсөн дә яңы закон мотлаҡ, тиген фекерҙә. Пенсия реформаһының өсөнсө түкмағы эшләп йөрөүсе пенсионерҙар башына эләкмәксе: эшләй икән, тимәк, хәле, көсө бар, ә пенсия - ул ҡартлыҡ буйынса пособие, тип ҡарала юғарыла. Тимәк, аҡса еткерә алмай, аптыраған көндән эшләп йөрөүсенең пенсияһын тартып алырға ла мөмкиндәр. Ысын булһа, был йыллыҡ килеме бер миллион тәшкил иткән хәлләләргә генә ҡағыла, тип тә йыуаталар. Улай булғас, эшләп йөрөүселәр ҙә закон боҙорға мәжбүр булып, эш хаҡын конверттарҙа ала башламаҫ, тимә.

Йәштәргә лә буләк әҙерләмәй яңы реформа. 1967 йылдан һуң тыуғандарҙың эш хаҡынан 22 процент күләмендәге иғәнә Пенсия фондында махсус иҫәпкә туплана ине. Һуңғы ике йылда был иҫәп туҡтатылды. Әле Финанс министрлығы ошо 22 процентты тулайым бюджет иҫәбенә күсермәксе. Был юл менән 400 миллиард һум экономияланасаҡ. Уның ҡарауы, тупланма пенсия фондына граждандар күпмелер процент иғәнәне үҙҙәре күсереп барырға тейеш булып сыға. Тик бының да үҙ әтнәкәһе: баяғы процент өҫтөнә йән башынан һалым күләме лә артасаҡ бит, ә был эш хаҡында сағыласаҡ. Бөтөн был үҙгәрештәрҙең маҡсаты - бюджет аҡсаһын экономиялау, тип әйтелә. Шуға ла сығымдарҙы ҡыҫа барып, Минфин быйыл пенсияларҙы индексациялауҙы ла сикләне, ә эшләп йөрөүселәр өсөн ул бөтөнләй туҡтатылды. Шулай итеп, быйыл февралдә закон буйынса 13 процентҡа артырға тейешле ҡартлыҡ пособиелары ни бары 4 процентҡа ғына артты.

Ҡаҙна ҡаҙанын ҡотҡарыу, шулай итеп, тулыһынса халыҡ елкәһенә һалынмаҡсы. Юғиһә, мәҡәлдәгесә, ат бар - арба юҡ, ҡаҙан ҡайнай - ярма юҡ һымағыраҡ килеп сыға бит. Икенсе бер мәҡәлдәгесә, батып барыусыны ҡотҡарыу - батып барыусының үҙ эше, тип тә ҡарай торғандыр, күрәһең, ҡаҙна өсөн яуаплы түрәләребеҙ. Хөкүмәт ни әйтер - әлегә билдәһеҙ. Һәр хәлдә, итәк ҡырҡып, ең ямай торғас, итәкһеҙ тороп ҡалмайыҡ - оят булыр, тип кенә әйтке килә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыйған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АУЫЛ МӘКТӘБЕНӘ...

## йәш кадрҙар кәрәк

***Гөлфиә ДИНИСЛАМОВА, Ағиҙел ҡалаһы Башҡорт гимназияһы директоры:*** Бөгөн республика мәктәптәрендә йәш белгестәр етешмәй. Ә мәктәптәрҙәге уҡыу сифатына тап яҡшы кадрҙар булыуы йоғонто яһай. Ағиҙел ҡалаһының белем усаҡтарында ла йәш белгестәргә ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Бигерәк тә математика, физика, информатика уҡытыусылары әҙ. Коллективтарҙы йәшәртеү бик ауыр бара, уҡытыусыларҙың 60 процентынан күберәге пенсия йәшенә етеп килә йәки хаҡлы ялда уҡытып йөрөй. Ни өсөн яңы уҡыу йортон тамамлаған йәш белгестәр мәктәпкә эшкә килергә ашыҡмай һуң? Хөкүмәт тарафынан һуңғы йылдарҙа уҡытыусыларға иғтибар бүленә башланы, эш хаҡы ла бер ни тиклем күтәрелде бит.

Ләкин бөгөнгө заманда был эш хаҡы ҡәнәғәтләнерлек түгел. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, юғары уҡыу йортон яңы тамамлаған йәш белгестәргә 20 мең тирәһе эш хаҡы алыр өсөн 35 сәғәттән дә кәм булмаған уҡыу йөкләмәһе үтәргә кәрәк. Тимәк, ул көн һайын 5-6 сәғәткә дәрес планы әҙерләргә, бихисап дәфтәр тикшерергә, юғары синыф уҡыусыларын БДИ-ға әҙерләргә, ата-әсәләр менән эшләп өлгөрөргә һәм шул уҡ ваҡытта һанап бөткөһөҙ ҡағыҙ эше - программалар, отчеттар, һәр дәрескә технологик карта төҙөргә тейеш. Ул ғына ла түгел, бер-ике йылдан аттестация үтер өсөн балалар менән конкурс, олимпиадаларҙа ҡатнашып, яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшергә, партфолио тултырырға бурыслы. Ғөмүмән, бик көсөргәнешле эшмәкәрлек алып барыу талап ителә. Бик һирәктәр генә, ғаилә ҡорорға өлгөрмәгән булһа, был йөкләмәне атҡара ала.

Эштәр әлеге кеүек барһа, бер-нисә йылдан Ағиҙел ҡалаһы кеүек социаль-иҡтисади хәле ҡатмарлы булған ҡалаларға, ауыл мәктәптәренә педагогик кадрҙар етмәй башлаясаҡ. Ыға тиклем белем усаҡтары уҡыусылар һаны аҙ булыу сәбәпле ябылһа, киләсәктә уҡытыусыларға ҡытлыҡ кисереү һылтауы менән оптималләштереү үткәрелмәҫ, тип береһе лә ышандыра алмай. Сөнки әле эске тулайым продукт күрһәткесен арттырыу ниәтендә бюджет учреждениеларында эшләүселәрҙең эш хаҡын күтәрмәй тороу тураһында һөйләйҙәр. Кем белә, бәлки, был хәл бик оҙаҡҡа ла һуҙылмаҫ, ә беҙҙең белем биреү учреждениелары тағы ла ҡыҫҡартылып өлгөрөр. Әлеге көндә мине бына ошо мәсьәлә бик борсой. Хеҙмәт юлын башлауы нисек кенә ауыр булһа ла, йәштәр ауыл еренә, бәләкәй ҡалаларға эшкә ҡайтыуҙан баш тартмаһындар ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Башлығы 2016 йылда "Һабантуй" халыҡ байрамын үткәреү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Графикка ярашлы, 28 майҙа Әлшәй, Ейәнсура, Күгәрсен райондарында һәм Салауат ҡалаһында яҙғы баҫыу эштәренең тамамланыуы уңайынан тәүге тантаналар уҙғарыла. Өфөлә һабантуй 12 июндә үтә.

✔30 майҙа М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында "Талантттар йондоҙлоғо" сәләмәтлеге буйынса мөмкинлектәре сикләнгән балалар ижады VI асыҡ конкурсының гала-концерты була. Конкурстың ойоштороусылары - Өфөнөң һаулығы буйынса мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн реабилитация үҙәге һәм "Әсә йөрәге" әсәләр советы төбәк йәмәғәт ойошмаһы. Быйыл бәйгелә бөтә республиканан 60-ка яҡын бала һәм үҫмер ҡатнашты.

✔Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Нефтсе" стадионында "Өфө" футбол клубы уйынсылары һәм тренерҙар штабы менән осрашты. "Өфө" клубы 2015/2016 йылдар миҙгелендә команда турнир таблицаһында 12-се урынды биләне һәм Премьер-лигала сығыш яһау хоҡуғын һаҡлап ҡалды. Өфөләр 30 уйын үткәрҙе, алты еңеү яуланы, 15 тапҡыр еңелде һәм туғыҙ уйын тигеҙ иҫәп менән тамамланды.

✔Башҡортостан вәкилдәре Халыҡ-ара шашка буйынса донъя кубогының өсөнсө этабында яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтте. Ярыш Испанияның Салоу ҡалаһында тамамланды. "Салоу Опен" халыҡ-ара турнирына 138 ҡатнашыусы, шул иҫәптән "Башнефть" профессиональ шашка клубы спортсылары Александр Георгиев, Айнур Шәйбәков, Муродулло Амриллаев, Айгөл Иҙрисова килде. Егерме ике халыҡ-ара гроссмейстер ҡатнашлығындағы уйында ғәмәлдәге чемпион Александр Георгиев еңеү яуланы.

✔Һарытау өлкәһендә үткән "Туриада-2016" спорт-туристик лагерында был юлы Волга буйы федераль округының бөтә төбәктәренән 700-гә яҡын ҡатнашыусы йыйылды. Программа сиктәрендә спорт туризмы буйынса Волга буйы федераль округы беренселеге ойошторолдо. Башҡортостан вәкилдәре беренсе урын яуланы. Еңеүселәргә наградаһы Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич тапшырҙы.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТӨҘӨЛӨШТӘР... ҡолас йәйә

✓ **Быйыл тәүге дүрт айҙа Өфөлә 150 мең квадрат метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған, был уҙған йыл менән сағыштырғанда һигеҙ процентҡа күберәк.** Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Илдар Хәсәнов билдәләүенсә, инвестициялар үҫешенә тәү сиратта ҡала торлаҡ төҙөлөшөнөң йылдам үҫешеүе ҙур йоғонто яһаған. Быйыл ғинуар-апрель айҙарында Башҡортостан йорттарҙы сафҡа индереү буйынса Волга буйы федераль округында икенсе урын яуланы. Йән башына иҫәпләнгән торлаҡты сафҡа индереү буйынса республика округта бишенсе урында килә. 2016 йылдың тәүге дүрт айында төбәктә дөйөм майҙаны 632,2 мең квадрат метрлыҡ 7551 фатир сафҡа индерелгән. Был үткән йыл менән сағыштырғанда 6,5 процентҡа кәмерәк. Башҡортостан Татарстандан ғына ҡалышты, унда 799 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән. Ғинуар-апрель айҙарында һәр мең кешегә 155 квадрат метр яңы торлаҡ тура килгән.

✓ **Өфө - илдә 2008 йылдан алып халыҡтың тәбиғи үҫеше күҙәтелгән берҙән-бер миллионлы ҡала.** "Быйыл тәүге өс айҙа республиканың баш ҡалаһында дүрт меңдән ашыу сабый донъяға килгән, был уҙған йыл менән сағыштырғанда 6,5 процентҡа күберәк. Халыҡтың тәбиғи үҫеше 1232 кеше тәшкил иткән. Үлем осраҡтары 6,6 процентҡа кәмегән. Тыуымдың артыуы һәм үлем кимәленең кәмеүе - яҡшы күрһәткес", - тип билдәләне 2016 йылдың тәүге кварталында Өфөнөң социаль-иҡтисади үҫеше йомғаҡтарына арналған матбуғат конференцияһында ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Илдар Хәсәнов. Әлеге ваҡытта баш ҡалала рәсми теркәлгән 1,121 миллион кеше йәшәй. Уларҙың яртыһы тиерлек - хеҙмәткә һәләтле кешеләр. Икенсе яртыһы - балалар, йәштәр һәм пенсионерҙар. Шуның менән бергә өфөләрҙең уртаса йәше - 35.

✓ **Өфө ҡала хакимиәте башлығының муниципаль предприятиеларҙың һөҙөмтәлелеген һәм дәғүәселек һәләтен күтәреү тураһындағы күрһәтмәһен тормошҡа ашырып, Муниципаль электр транспорты идаралығы һуңғы ике йылда предприятиены финанс йәһәтенән һауыҡтырыу буйынса төрлө саралар үткәрҙе.** Мәҫәлән, быйыл предприятиене бүлеү юлы менән үҙгәртеп ҡороу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Уларҙың береһе пассажирҙар ташыуҙы ойоштороу буйынса махсуслашһа, икенсеһе ҡала йәмәғәт электр транспортының инфраструктураһын үҫтереү һәм уларҙы тотоу менән шөғөлләнәсәк.

АФАРИН!

# МӘКТӘПТӘРҘӘ...

## һуңғы вальс

**Бишенсе йыл инде баш ҡала хакимиәте менән "Уфанет" компанияһы берлектә сығарылыш уҡыусыларының мәктәпте тамамлап, оло тормош юлына баҫҡан тәүге аҙымдарын иҫтәлекле лә, тантаналы ла итеп хәтерҙәрендә һаҡлаһын өсөн "Яҙғы бал" ойоштора.**

Был үҙенә күрә мәктәп тамамлаусыларҙың үҙ аллы аҙымдарын яһағанда яңғыҙ түгеллеген, шундай уҡ меңдәрсә егет-ҡыҙҙар менән бер сафта булыуҙарын да дәлилләй. Быны быйыл ошо проекты Башҡортостандың Нефтекама, Ағиҙел, Октябрьский, Салауат, Стәрлетамаҡ, Ишембай һәм Ырымбур өлкәһенең Ырымбур һәм Орск ҡалалары күтәреп алыуы, шулай уҡ беренсе тапҡыр Үрге Пышма, Первоуральск ҡалаларының ҡушылыуы ла раҫлай.

Төрлө мәктәптәрҙән йыйылған биш мең егет һәм ҡыҙ был көндө баш ҡаланың Ленин урамы буйлап Совет майҙанына йүнәлгәндә ниндәй хистәр кисерҙе икән? "Сығарылыш уҡыусылары аллеяһы" уларҙың төплө һәм матур фекерҙәр йөрөтөүен асыҡ күрһәтә лә инде - 11-се синыфты тамамлаусыларҙың күпселеге инженер, табип, программист, йәғни илебеҙгә файҙалы кешеләр булырға теләй: был үҙенсәлекле аллеяла бары тик үҙҙәренең күңел түрендә йөрөткән изге хыялдары менән уртаҡлашыусыларҙың ғына яуаптары. Ә күпме буласаҡ йәш белгес был хыялын күңелендә һаҡлай!

Балаларҙы тәбрикләргә Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең балалар студияһы, БДУ-ның "Ирәндек", М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның "Кружева" халыҡ ансамблдәре килгәйне. Әйткәндәй, быйыл беренсе тапҡыр "Мәктәп" майҙансығы эшләне һәм унда егет-ҡыҙҙар фокстрот, румба, чарльстон һәм башҡа дәртле бейеүҙәр башҡарҙы. Шулай уҡ башҡа интерактив бейеү майҙансыҡтарында төрлө йүнәлештәге 15 бейеү мәктәбе үҙҙәренең һәләтен генә күрһәтеп ҡалманы, оҫталыҡ дәрестәре лә уҙғарҙы.

Уҡыусыларға ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, Башҡортостандың мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова изге теләктәрен еткереп, имтихандарын уңышлы тапшырыуҙарын теләне. Сөнки байрам - байрам менән, ә алда ҙур һынау: Берҙәм дәүләт имтихандары көтә.

## ...һуңғы ҡыңғырау

**Баш ҡаланың белем усаҡтарында "Һуңғы ҡыңғырау" байрамдары булып үтте. Майҙың егерме бишендә республика кимәлендәге гимназия, лицейҙарҙа ла ошо күркәм саралар ойошторолдо.**

Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыларын БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Илшат Тажетдинов, БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова һәм башҡа мәртәбәле ҡунаҡтар тәбрикләне. Ә Республика иҡтисад лицей-интернатының сығарылыш синыфтарына төрлө йылдарҙа бында директор вазифаһын башҡарыусы шәхестәр иң изге теләктәрен еткерҙе.

Үҙенең егерме йыллыҡ юбилейын билдәләгән Республика иҡтисад лицей-интернатының тантаналы линейкаһында быйыл бөтәһе 71 сығарылыш уҡыусыһы ҡатнашты. Сығарылыш уҡыусылары араһында иҡтисад өлкәһенә ҡағылышлы һөнәрҙәр һайларға, физика һәм математика буйынса белемдәрен камиллаштырырға теләүселәр күп. Лицей-интернаттың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Асия Әхмәтова шулай тип һөйләне: "Беҙҙең лицей уҡыусылары йыл да БДИ буйынса юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә, быйыл да һынатмаҫтар, тип ышанам. Сөнки улар был һынауға унынсы синыфтан алып ныҡлы әҙерләнә башлай. Билдәле булыуынса, Берҙәм дәүләт имтиханы балалар психикаһына бик ауыр тәьҫир итә. Шуға күрә, уларҙың һәр береһенә иғтибар бүлеп, психологик ярҙам күрһәтеп, ынғайға көйләп торабыҙ. Уҡыусыларҙың күбеһе физика, информатика, йәмғиәтте өйрәнеү, химия предметтары буйынса имтихан тапшырып, республиканың алдынғы техник вуздарына уҡырға инергә хыяллана..." Әйткәндәй, лицей-интернаттың һигеҙ сығарылыш уҡыусыһы яҡшы өлгәшкән өсөн иң юғары билдәгә - миҙалға лайыҡ булды.

Ә бына Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының быйылғы 72-се сығарылышында йәмғеһе 171 уҡыусы иҫәпләнә. Улар тыуғыҙ синыфҡа бүленеп уҡыған. Һәр синыф бер йүнәлеште тәрәндән өйрәнгәнлектән, балалар төрлөһө төрлө һөнәрҙәрҙе үҙләштерергә йыйына. Мәҫәлән, Ғәфүр Рәхмәтуллин заман талаптарына яраҡлы, программист һөнәрен үҙләштерергә теләй. Ул Берҙәм дәүләт имтиханын физика һәм информатика фәндәренән тапшырып, Өфө дәүләт авиация техник университетына уҡырға инергә хыяллана. "Техниканың йәшәй алмаған йәмғиәткә һәр ваҡыт компьютерҙы яҡшы белгән белгестәр кәрәк була, шуға эш табыуы ла ауырға төшмәҫ, тип уйлайым. Етмеш меңдән дә кәм булмаған эш хаҡы алырға хыялланам. Быны тормошҡа ашырыу өсөн әлеге көндә һәр имтихандан етмеш баллдан да кәм баһа алмаҫҡа, тигән маҡсат ҡуйҙым", - тине Ғәфүр уй-теләктәре менән уртаҡлашып.

Ғөмүмән, республиканың иң алдынғы белем усаҡтарын тамамлаусы балаларҙың һәр береһе Ғәфүр кеүек маҡсатлы, тырыш, аҡыллы булып сыҡты. Ысынлап та, Республика иҡтисад лицей-интернаты һәм Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты сығарылыш уҡыусыларының киләсәкте алдан хәстәрләп, белемдәрен камиллаштырырға ынтылып тороуын күреп һоҡланмайынса мөмкин түгел.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**





## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанға бөтә донъянан сәсәндәр йыйыла. 26 октябрҙә Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивале ойоштоendола. Сара башҡорт эпостарын һәм уларҙы башҡарыусыларҙы популярлаштырыуға йүнәлтелгән һәм донъя халыҡтары араһында үткәрелә. "Фестиваль халыҡ ижадын, башҡорт эпостарын Рәсәй халыҡтарының матди булмаған мәҙәни мираҫ өлгөһө булараҡ пропагандалау маҡсатында тәүге тапҡыр уҙғарыла", - тип аңлатма бирҙеләр Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтенән. Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивале "Бөтә донъя фольклориадаһын-2020" үткәреүгә әҙерлек булып тора. Проект Башҡортостан Башлығының 900 мең һумлыҡ грантына лайыҡ булған.

✓Башҡортостанда балаларҙың ялын ойоштороуға һәм уларҙы һауыҡтырыуға 1 миллиард 566,2 миллион һум аҡса бүлеү ҡаралған. Быйыл республикала 2680 балалар һауыҡтырыу ойошмаһы үҙ ишеген аса. Планлаштырылған был аҡсанан тыш, төбәктә һауыҡтырыу учреждениеларына һәм шифахана-курорт ойошмаларына юлламалар алыу өсөн аҡса ойошмалар, ата-әсәләр, профсоюздар иҫәбенә булдырыла. Быйыл ҡала сиктәндәге һауыҡтырыу лагерҙарына юлламаның уртаса хаҡы - 15 687, шифаханаларға 18 200 һум тәшкил итә.

✓Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы "Кроношпан Башҡортостан" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең санитар-һаҡлау зонаһы сигендә атмосфера һауаһы торошона экологик мониторинг үткәреүен дауам итә. Дәүләт аналитика контроле идаралығы атмосфералағы аммиак, формальдегид, көкөрт, азот диоксиды, углерод оксиды, туҙан миҡдарын тикшерҙе. Һөҙөмтәлә "Кроношпан Башҡортостан" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте ҡалдыҡтары өсөн хас матдәләрҙең артыҡ булмауы асыҡланды.

✓28 майҙан федераль юлдарҙа ауыр йөк транспорты хәрәкәте сикләнә. Бындай сикләүҙәр яҙ һәм йәй көндәрендә юл япмаһын һаҡлау өсөн индерелә. Сикләүҙәр федераль автомобиль юлдарының тейешле участкаларында, шул иҫәптән яҙғы осорҙа - 28 майҙан 25 июнгә, йәй көнө 28 майҙан 31 августҡа тиклем ғәмәлдә буласаҡ (һауа температураһы 32 градустан юғары булған осраҡта ғына).

*✓ Һәр кем йөрәген тикшертә алды, ҡан баҫымын, буйын, ауырлығын үлсәтте, ҡанда шәкәр күләмен, уның углекислый газ һәм кислород менән байыу күләмен, ВИЧ һәм башҡа күрһәткестәрҙе белеү өсөн экспресс-анализ тапшырҙы.*



*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

**Күптән түгел Башҡорт дәүләт университеты башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының бер төркөм студенттары Алтай республикаһында үткәрелгән Бөтә Рәсәй кимәлендәге олимпиадала еңеү яулап ҡайтты. Улар "Филология. Рәсәй халыҡтарының теле һәм әҙәбиәте (төрки төркөм)" тип аталған бәйгелә беренсе урынға сыҡты.**

# ҠАТНАШ ҺӘМ ЕҢ!



Таулы Алтай дәүләт университеты был олимпиаданы унынсы тапҡыр үткәрә. Быйыл унда Башҡортостан, Таулы Алтай, Саха, Тыва, Хакасия һәм Ҡаҙағстан республикаларынан йәмғеһе һигеҙ команда ҡатнашты. Башҡортостандан төрки телдәр буйынса ярышҡа Башҡорт дәүләт университеты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы студенттары барҙы. Олимпиада ике этаптан торҙо: беренсеһендә студенттар тел буйынса, икенсеһендә фольклор һәм әҙәбиәт өлкәһенә ҡағылышлы викторина һорауҙарына яуап бирҙе.

Башҡорт дәүләт университеты командаһы Алтай мәҙәниәте фестивалендә ҡатнашып, үҙ талантттарын да күрһәтте. Йәштәребеҙ "Урал батыр" эпосынан өҙөктәрҙе башҡорт, татар, төрөк, рус, инглиз һәм ғәрәп телендә яттан һөйләне, дәртле башҡорт бейеүҙәре менән сығыш яһаны.

Тағы бер бәйге - беҙҙең студенттарҙы ошо сараға әҙерләгән уҡытыусылар өсөн "Гуманитар йүнәлеш буйынса студенттарҙың фәнни-тикшереү эшен ойоштороу" тип аталған Бөтә Рәсәй ғилми-практик конференцияһы ине. Унда Башҡорт дәүләт университетынан филология фәндәре кандидаты Рәмилә Йәнмырҙина доклад уҡыны. Һөҙөмтәлә Башҡорт дәүләт университеты студенттары дөйөм команда менән олимпиадала беренсе урын яулауҙан тыш, төрлө номинацияларҙа билдәләнде, ҡатнашыусы сертификаттары алды.

Шулай уҡ олимпиадаға килгән йәштәргә иҫ киткес хозур тәбиғәтле Чемаль районына мауыҡтырғыс экскурсия ойошторолдо. Таулы Алтай дәүләт университеты музейы һәм А.В. Анохин исемендәге милли музейҙа ошо төбәктең тарихы менән танышырға мөмкинлек бирелде. Гүзәлиә Әлимғужина, Наҙгөл Билалова, Ғәлиә Ғиләзетдинова, Илиза Имашева, Айзилә Мусина һәм Ләйсән Шакирова Алтай республикаһындағы мәртәбәле сарала иң юғары күрһәткестәргә өлгәшеп, тиҫтерҙәре, туғандаш халыҡтарҙың мәҙәниәте, көнкүреше менән танышып ҡайтыуҙарына шатланып бөтә алмай.

**Ләйсән ШАКИРОВА, БДУ студенты.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ИҪКЕНӘН - ЯҢЫҒА

✓ **Баш ҡала иҫке һәм авария хәлендәге йорттарҙы һүтеү программаһын тормошҡа ашырыу буйынса Рәсәйҙә лидерҙар иҫәбендә.** Федераль Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығы был йүнәлешкә юғары баһа биреп кенә ҡалмай, алмашҡа бирелгән торлаҡтың сифатлы булыуын да билдәләй. Ошо көндәрҙә Рәсәй урамы, 36 адресы буйынса урынлашҡан барак һүтелгән. Уның урынына балалар, спорт майҙансыҡтары, ял зонаһы булған, төҙөкләндерелгән территориялы яңы йорт ҡалҡып сығасаҡ. Иҫке һәм авария хәлендәге йорттарҙан йәшәүселәрҙе күсереү 2013-2017 йылдарға иҫәпләнгән һәм ул биш этапта алып барыла. Һәр этап ике йылға һуҙыла. Әммә 2017 йыл өс айға ҡыҫҡараҡ буласаҡ. Программа тормошҡа ашырылыу барышында барлығы 330 авария хәл-торошондағы йорттан 12 381 кешене күсереү күҙаллана.

✓ **Баш ҡалала инфестициялар өлкәһендә ыңғай үҫеш күҙәтелә.** Мәҫәлән, былтыр Өфөлә төп капиталға инвестициялар күләме 112,1 миллиард һум тәшкил иткән. Йән башынан сығып ҡарағанда, бер кешегә 100, 2 мең һум тура килә, йәғни 2014 йыл менән сағыштырғанда 100,2 мең һум. Инвесторҙар өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыла, уларҙың һәр береһе менән айырым эш алып барыла, был йәһәттән Рәсәйҙәге иң алдынғы тәжрибәләр ҡулланыла. Йәғни Иң яҡшы муниципаль тәжрибәләр атласына ингән 23 тәжрибәнең 18-е Өфө территорияһында тормошҡа ашырыла, тағы дүртеһе йыл дауамында ғәмәлгә инәсәк, ә инде бары тик береһен генә баш ҡалала тормошҡа ашырыу мөмкин түгел. Йылдың беренсе кварталы йомғаҡтары буйынса Өфө территорияһында дөйөм суммаһы 218,5 миллиард һум тәшкил иткән 175 инвестпроект эшләнгән. Улар тормошҡа ашырылған осраҡта, 10 мең эш урыны барлыҡҡа киләсәк. Ҡала хакимиәте алдында торған иң мөһим бурыстарҙың береһе - Өфөнөң имиджын һәм брендын күтәреү. Был йәһәттән даими рәүештә ҡаланың ҡеүәте сағылдырылған "Газ. Нефть. Технологиялар"; "Ҙур химия"; "Ҡала. Архитектура. Төҙөлөш"; "УфаПромЭкспо"; "УрбанБайрам" һәм башҡа күргәҙмәләр эшләй.

✓ **Якутов исемендәге паркта "Халыҡ сәләмәтлеге көнө" ойошторолдо.** Акция йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иртә асыҡлау һәм уларҙы профилактикалау, халыҡтың үҙ сәләмәтлегенә иғтибарын арттырыуға йүнәлтелде. Кардиологтар һәм офтальмологтар, стоматологтар һәм гастроэнтерологтар, онкологтар һәм эндокринологтар, терапевтар, дауалау физкультураһы һәм сәләмәт туҡланыу инструкторҙары теләгән кешене ҡабул итте. Сараға килгән һәр кем йөрәген тикшертә алды, ҡан баҫымын, буйын, ауырлығын үлсәтте, мейенең ҡан йөрөшөн тикшертте, ҡанда шәкәр күләмен, уның углекислый газ һәм кислород менән байыу күләмен, ВИЧ һәм башҡа күрһәткестәрҙе белеү өсөн экспресс-анализ тапшырҙы. Тикшереү һөҙөмтәләре нигеҙендә теләүселәр шәхси күрһәтмәләр алды. Акция республика буйынса 23 майҙан 27-һенә тиклем дауам итте.

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# БАҠСАБЫҘ БУЛҺА...



**Бөгөн Өфө ҡалаһының 122-се башҡорт гимназияһы заман талаптарына яуап биргән алдынғы белем усаҡтарының береһе.**

2008-2009 уҡыу йылында гимназия "Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проектының махсус грантына лайыҡ булды. 2014 йылда "Рәсәйҙең иң яҡшы 100 мәктәбе" Бөтә Рәсәй һәм "Веб-лидер-2015" конкурстары лауреаты исемен алыуға өлгәштек. 2015 йылдың декабрендә "Матур мәктәп" халыҡ-ара конкурсында өсөнсө урын яуланыҡ.

Беҙҙең гимназия Шаҡша биҫтәһенең мәҙәни үҙәге тиһәк тә яңылышмам. Сөнки уҡыусылар рухи тәрбиә алһын, башҡортса һөйләшеп, үҙ мөхитебеҙҙә үҫһен өсөн бик күп саралар үткәрелә. Йыл һайын "Һылыуҡай" конкурсы, "Ҡарғатуй", "Һабантуй" һәм башҡа фольклор байрамдары уҙа. Әлбиттә, ҡала һәм республика кимәлендә ойошторолған конкурстарҙан, мәҙәни сараларҙан да ситтә ятып ҡалмайбыҙ. Уҡыусыларыбыҙ "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсында ҡатнашып, призлы урындар яулап тора. Бынан тыш, баш ҡаланың филармония һәм милли театр артистарын саҡырып, бик күркәм тамашалар ойошторабыҙ. Уларҙы уҡыусылар ғына түгел, хатта ата-әсәләр ҙә күтәреп ала. Гимназия ҡаланан ситтә урынлашыуға ҡарамаҫтан, яҙыусылар, гәзит-журнал мөхәррирҙәре, билдәле шәхестәр менән осрашыуҙар үткәрелә.

Өфө ҡалаһының 122-се башҡорт гимназияһы һәм уның педагогик коллективы уҡыусыларға сифатлы, заман талаптарына ярашлы белем биреү, үҫеп килгән быуынды милли рухта, илһөйәр, сәләмәт итеп үҫтереү өсөн эшләй. Был маҡсатты тормошҡа ашырыу балалар баҡсаһынан уҡ башланырға тейеш, әлбиттә. Шуға күрә, Шаҡша биҫтәһендә урынлашҡан балалар баҡсалары араһында башҡорт балалары өсөн айырым төркөмдәр булмауы бик борсой. Мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары менән бергә эшләһәк, тәрбиә йүнәлешендә тағы ла юғарыраҡ уңыштарға өлгәшер инек.

**Гүзәл ҒИНИӘТОВА, 122-се башҡорт гимназияһы директоры.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йоҡоһоҙлоҡ

❖ Иң ябай ысул булып аҡ сәскә (ромашка) төнәтмәһе тора. 1-2 балғалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәттән һөҙөргә һәм эсергә. 2-3 көн буйы дауам итегеҙ. Аҡ сәскә төнәтмәһе эсәк, бауыр, бөйөр, һейҙек ҡыуығы ауыртҡанда, шулай уҡ аппетит һәм матдәләр алышыныуҙы яҡшыртыу өсөн ҡулланыла.

❖ Оҙаҡ ваҡыт йоҡламау психик ауырыуға килтереүе лә бар. Шуға ла көн һайын бер үк ваҡытта йоҡларға ятырға, иртән бер үк мәлдә торорға кәрәк. Әгәр ҙә яҡкас та 15-20 минуттан һуң йоҡлап китә алмайһығыҙ икән, берәй күңелһеҙ генә китап уҡырға була. Йоҡларға ятыр алдынан 1-2 сәғәт алда көн дауамында булған ваҡиғаларҙы хәтерләгеҙ, иртәгәге көндө планлаштырығыҙ, был аңығыҙҙы проблемаларҙан таҙартыу өсөн кәрәк.

### Йөрәк сиренән

❖ Гипертония, стенокардия кеүек сирҙәрҙе дауалау өсөн 1 стакан араҡыға 1 ҡалаҡ энәлек емеше һалып, 7 көн төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр, эҫе сәйгә 1 ҡалаҡ һалып эсергә.

### Бәйғәмбәр тырнағы

❖ Бәйғәмбәр тырнағы төнәтмәһе менән ангина, проктит, парапроктитты дауалайҙар. 2 ҡалаҡ үләнгән 1 стакан ҡайнар һыу ҡоялар, 15 минут төнәтәләр, бүлмә температураһында 45 минут һыуыталар. Йылы көйөнә көнөнә 2-3 тапҡыр 1-2-шәр ҡалаҡ эсәләр. Һалҡын урында 2 тәүлектән артыҡ һаҡларға ярамай. Парапроктитта бәйғәмбәр тырнағы төнәтмәһенә шул уҡ күләмдә 3 процентлы бор кислотаһы өҫтәйҙәр һәм клизма итеп ҡулланалар.

❖ Тәбиғәттә үҫкән бөтөн һары үлән дә үт ҡыуыу сифатына эйә.

❖ Халыҡ медицинаһында бәйғәмбәр тырнағы һуты ла ҡулланыла. 1 стакан йылы һөткә 1 ҡалаҡ бал, 20-40 тамсы һут өҫтәп, стенокардия, гипертония, атеросклероз, невроз һәм климакс мәлендә хәл яҡшырғансы эсергә. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда ҡабул итергә.

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

## ҺАБАНТУРҒАЙ УЙНАҺА

Баҫыу өҫтөндә һабантурғай уйнаһа - муллыҡҡа: ашлыҡ уңа. Һабан һөргәндә, иген урып, ашлыҡ һуҡҡанда һабантурғай һайраһа, эш уңайға була.

## БАШҠА ҠОШТАРҒА БӘЙЛЕ ЫРЫМДАР

Фумфылдаҡты урыҫтар феп тиҙәр. Ул, күтергә башын тығып, иртәле-кисле генә ҡыҫҡыра. Фумфылдаҡ ашлыҡтың быуыны һайын бер ҡыҫҡыра. Дүрт ҡыҫҡырһа, ашлыҡ уңмай: һабағы дүрт кенә быуын була. Өҙөп-өҙөп күберәк ҡыҫҡырһа, килешә: ашлыҡ уңа - ул күп быуынлы, оҙон һабаҡлы була.

Фумфылдаҡтың ите хәрәм, уны ашамайҙар. Таҙ ҡашҡалаҡ, торна, аҡҡош, сарҙаҡ кеүек ҡоштарҙың да ите хәрәм.

Бүҙәнә ҡыҫҡырһа, тыңлай торғайнылар. Тыңлай-тыңлай ҙа:

- Биш ҡыҫҡырһа, әүендән - биш бот, алты ҡыҫҡырһа - әүендән алты бот, ете ҡыҫҡырһа, әүендән ете бот, - ти торғайнылар. Бүҙәнә әҙ ҡыҫҡырһа:

- Әҙ ҡыҫҡырҙы, әүендән ике боттан да үтмәҫ, - ти торғайнылар. Бүҙәнә әҙ ҡыҫҡырған йылды башаҡтың башы ҡыҫҡа, иген төшөмһөҙ була.

Һандуғастың ояһына теймәҫкә. Тейгән кешегә зыян булмай ҡуймай.

Аҡ сәпсек ҡойроғо менән боҙға һуҡһа, оҙаҡламай боҙ китә. Һаҙый тигән ҡарт: "Ана, аҡ сәпсек килгән. Туҡһан бот батманы менән боҙҙо һуғырға килгән. Боҙ тотмаҫ", - тип көлгән була торғайны.

## ҠАРҒА ҠАРҠЫЛДАҒАНДА

*Миңә - хәбәрең,*
*Муллаға - эскерең,*
*Үҙең ҡиблаға,*
*Ауыҙыңа бал да май,*
*Туйынмаһаң, һары май!*
*Аллаға шөкөр!*

## ҠОҘҒОН ҠОРҠОЛДАҒАНДА

Ҡоҙғон ҡыҫҡырһа, сәбәләнеп ҡыуырға, уға һалмауыр һелтәргә ярамай. Ул - изге ҡош. Үҙе үк: "Колоң! Ҡолоң!" - тип ҡыҫҡыра, ти. Кеше ҡоло була инде.

*Әй, собханалла, ҡошҡайым,*
*Изге ҡошҡайым,*
*Хәйерле хәбәргә,*
*Шатлыҡлы хәбәргә,*
*Үҙең - ҡиблаға,*
*Һүҙең - Хоҙайға,*
*Ауыҙыңа - һары май,*
*Изге ҡошҡайым! - тип әйтергә кәрәк.*

Ҡоҙғон ҡыҫҡырһа, өс тапҡыр шулай тиҙәр:

*- Ҡоҙғон, ҡоҙғон,*
*Тамағыңа таш торһон!*

## ҺАЙЫҪҠАН ШИҠЫРЫҠЛАҺА

Һайыҫҡан шиҡырыҡлаһа, ҡунаҡ килә, тиҙәр. Кәртә-ҡураға килеп шиҡырыҡлай башлаһа:

*- Изгелеккә шиҡырыҡла, изгелеккә!*
*Изгелеккә шиҡырыҡлаһаң, ауыҙыңа - һары май.*
*Яманлыҡҡа шиҡырыҡлаһаң,*
*Яурыныңа - уҡ,*
*Ауыҙыңа - б.ҡ, - тип һамаҡлайҙар.*

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

БАЛАЛАР ДОНЪЯҺЫ

# ТӘРБИӘ ӘКИӘТТӘН БАШЛАНА...

## Быны "Һаумы, һаумы, әкиәт!" бәйгеһе лә раҫлай

**Өфөлә етенсе тапҡыр үткәрелгән "Һаумы, һаумы, әкиәт!" донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә башҡарыусыларҙың ҡала конкурсына йомғаҡ яһалды. Иленең ырыҫы, халҡының киләсәге булған аҡыллы, һүҙгә оҫта балалар Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының тамаша залында күркәм байрам ойошторҙо. Ололар ҙа, кескәйҙәр ҙә конкурсанттар менән бергә серле, мажаралы һәм мауыҡтырғыс әкиәт иленә сәйәхәт итте.**

Быйыл "Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсында Франция бесәйе башҡорт бесәйенә ҡунаҡҡа килеп төштө. Бөтә балаларҙы аптыратып, был сит ил мыраубайы бик дорфа ғына русса һөйләшеп маташты. Бәктиһәң, ул үҙ илендә әкиәттәр бөтә башлағас, донъя гиҙеп, төрлө халыҡ әкиәттәрен өйрәнеп ҡайтырға, тип сығып киткән. Башҡорт бесәйе генә түгел, тамаша залына йыйылғандар ҙа был хәбәрҙе ишеткәс, сит бесәйҙе уғрылыҡта гәйепләй яҙҙы. Тик борсолоуҙар юҡҡа булған, ул ни бары үҙ илендә был әкиәттәрҙе һөйләп йөрөргә, башҡорт телен өйрәнергә теләгән икән. Шуға күрә, "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсы ҡатнашыусылары уға тиҙ арала ярҙамға килде...

Ике этапта үткән ярышта иң яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән әкиәтселәр үҙ оҫталыҡтарын күрһәтте. Ике йәш тә һигеҙ айлыҡ Лилиә Ғәбитова "Бүре һәм ете кәзә бәрәсе" әкиәтен һөйләгәндә, бөтәһе лә бәләкәс ҡыҙҙың тел байлығына, хәтеренә, халыҡсанлығына хайран ҡалып тыңланы. Бер аҙ тулҡынланып, кәзәнең һәр бәрәсен берәмләп һанап алып китһә лә, ҡыҙыҡай бер ҙә яңылышманы. 152-се башҡорт балалар баҡсаһына йөрөгән Лилиәгә "Әкиәт аша дуҫлыҡ тәрбиәләүсе" тигән маҡтаулы исем бирелде. Конкурста ҡатнашыусы балалар баҡсаларының фольклор коллективтары араһында Дим районының 75-се башҡорт балалар баҡсаһының тәрбиәләнеүселәре айырыуса матур сығыш яһаны. Улар "Шалҡан" урыҫ халыҡ әкиәтен сәхнәләштерҙе. Балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре араһында Гран-приға Совет районының 240-сы балалар баҡсаһынан Камила Бикбулатова лайыҡ булды. "Мин был конкурста тәүге тапҡыр ҡатнаштым, "Төлкө менән Айыу" әкиәтен һөйләнем. Байрам бик матур үтте. Бында ишеткән әкиәттәрҙән үҙемә аҡыл алдым, сөнки улар бөтәһе лә балаларҙы әсәйҙе тыңларға, маҡтанмаҫҡа, яҡшы булырға өйрәтә. Садикта урыҫса һөйләшһәм дә, өйҙә гел башҡортса аралашам, шуға әкиәтте матур итеп һөйләй алдым", - тине Камила тәьҫораттары менән бүлешеп.

Башланғыс синыф уҡыусылары араһында Гран-призы Өфө ҡалаһы 122-се башҡорт гимназияһынан Наҙгөл Ғарифуллина яуланы. Ул һөйләгән ҡырғыҙ халыҡ әкиәтен Сәғиҙә өләсәһе өйрәткән. Ә бына М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының 5-се синыф уҡыусыһы Гөлназ Әхмәтйәнова Ерәнсә сәсәндең ҡаҙҙы нисек бүлеүе тураһында фәһемле лә, көлкөлө лә әкиәт һөйләп, 5-7-се синыф уҡыусылары араһында иң юғары һөҙөмтәгә өлгәште. "Былтыр "Төлкө менән ҡырмыҫҡа" әкиәтен һөйләгәйнем. Был юлы уҡытыусым Айгөл Игелекова биргән әкиәттәр китабынан Ерәнсә сәсән тураһындағы тексты һайлап, өйрәндем. Мөмкин булһа, конкурста киләһе йыл да ҡатнашам", - тине ул. Әйткәндәй, М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының фольклор колективы ла Гран-приға лайыҡ булды. Улар бөгөнгө заманда ла актуаллеген юғалтмаған "Көслө ҡуян" әкиәтен сәхнәләштереп, кибет аҫҡан Ҡуян, алыпһатар Төлкө тураһында бәйән итте.

"Һаумы, һаумы, әкиәт!" донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә башҡарыусыларҙың ҡала конкурсы еңеүселәрен тәбрикләү тантанаһында Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов үҫеп килгән йәш быуын туған телен, башҡорт ғаиләһенә хас традицияларҙы белеп үҫергә тейеш булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шулай уҡ ул ошо матур байрамды үткәреү өсөн күп көс һалған, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ һаҡлап ҡалыу һәм уны пропагандалауға ҙур өлөш индергән район хакимиәте етәкселәренә, белем биреү учреждение етәкселәренә, уҡытыусыларға һәм тәрбиәселәргә оло рәхмәтен белдерҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсының район этабында бөтәһе 438 бала һәм әкиәттәрҙе сәхнәләштереүҙә 94 белем биреү учреждениеһы коллективы ҡатнашҡан. Шулар араһынан 18 фольклор коллективы, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларынан 21 тәрбиәләнеүсе, дөйөм белем биреү учреждениеларынан 38 уҡыусы ҡала этабына үткән. Улар башҡорт, рус, эскимос, һинд, үзбәк, ҡаҙаҡ, белорус, тажик, әрмән, ҡытай, поляк, фин, нанай халыҡтарының фәһемле әкиәттәрен һөйләгән. Йылдан-йыл ҡатнашыусылар һаны арта барыуы ҡыуандырҙы, унан да бигерәк талантлы балаларыбыҙҙың рухлы, илһөйәр, телһөйәр булып үҫеүен күҙәтеү күңелгә май булып яғылды.**



**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# СИЛӘБЕЛӘР БАТЫРҘАРЫН ИҪЛӘЙ

**Күптән түгел Силәбе ҡалаһында 112-се башҡорт атлылар дивизияһы яугирҙары хөрмәтенә "Урал батырҙары" тип аталған кисә уҙғарылды.**

Сараны 112-се башҡорт атлыларына арнап, Арғаяш ауылында ҡуйыласаҡ һәйкәл проекты авторы, тарихсы Йософ Ҡунаҡбаев асты: "Дон йылғаһынан алып Эльбаға тиклем 4 мең саҡрымды һыбай үтеп, 78 Советтар Союзы Геройы һәм 5 Дан ордены кавалеры исеменә лайыҡ булыусы милләттәштәребеҙ менән ғорурланырға кәрәк. Был тиклем геройҙар һәм 4 хәрби орденлы байраҡ Ҡыҙыл армия сафындағы башҡа бер генә дивизияла ла булмаған!"- тине Йософ Тимерхан улы.

Тарих фәндәре кандидаты Рәшит Хәкимов легендар дивизия командиры Минһәҙәле Шаймуратовтың һаман да герой тип танылмауы тураһында әсенеп һөйләне. "Үҙ батырҙарыбыҙҙы үҙебеҙ күтәрергә тейеш", - тип өндәште ул залда ултырыусы йәштәргә.

Залда йыйылыусылар ҙа үҙ хәтирәләре менән уртаҡлашты һәм Силәбе өлкәһе башҡорттарының да 112-се Башҡорт атлылар дивизияһында һуғышыуы тураһында һөйләне. Мәҫәлән, Сосновка районы Мамай ауылы егете Байғужа Сәйетғәлин 313-сө кавалерия полкын етәкләй. Уның ҡул аҫтындағы яугирҙар командиры исеме менән яуға ташлана. Силәбе батырының туғандары бөгөнгө көндә лә уның тыуған ауылында йәшәй. Улар Байғужаның кешелек сифаттарын, башҡаларҙы ҡайғыртыусы, милли рухлы егет булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Әйтеүҙәренсә, уның нәҫелендәге барлыҡ ир-егеттәр Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һирәктәре генә кире әйләнеп ҡайтҡан. Байғужа үҙе лә яу яланында ятып ҡалған.

Әлеге ваҡытта хәрби хеҙмәт бурысын үтәгән йәш милләттәшебеҙ Радмир Сәғитов кисәлә үҙенең яҡташы Таһир Күсемов тураһында бәйән итте һәм сығышын ҡурай моно менән тамамланы. Артабан сарала ҡатнашыусылар Силәбе әҙибе Ҡадир Даян ижад иткән "Шаймуратов генерал" йырын ҡушылып башҡарҙы.

**Нурия ИҠСАНОВА,**
**Силәбе өлкәһе "Уралым" гәзитенең баш мөхәррире.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Гәзит уҡыусылар иғтибарына Санкт-Петербург архивында һаҡланған "Национальный вопрос во внутренней политике царизма. Конец 19-го начало 20 вв" тип аталған материалдар йыйынтығындағы башҡорттарға ҡағылған мәғлүмәттәрҙе тәҡдим итәбеҙ.**

# БАШҠОРТТАРҘА ЕР БИЛӘҮСЕЛЕК



***

***23. 02. 1832. Комитет былай тип ҡарар итте: бөгөнгө көндә бәхәсһеҙ рәүештә башҡорттарҙыҡы тип иҫәпләнгән ерҙәрҙә башҡорттарҙың аҫабалығын танырға. Һатырға рөхсәт өсөн бөтөнөһөнөң дә ризалығын талап итмәҫкә, халыҡтың өстән ике өлөшө ризалыҡ бирһә, етә, сөнки "Ырымбур крайына урыҫтарҙы күсереп ултыртыу ниәтенә - хөкүмәттең төп маҡсатына тиҙерәк өлгәшергә кәрәк". Әммә ер һатырға рөхсәт биргәндә башҡорттарҙа ер йән башына 40-60 дисәтинәнән дә аҙыраҡ ҡалырға тейеш түгел. Тау заводы төҙөргә теләүселәргә башҡорттарға ҡуртымға ер биреүҙе рөхсәт итергә.***

Мишәрҙәр, татарҙар, ҡаҙна крәҫтиәндәре һәм удель крәҫтиәндәре башҡорт улыстарынан һәм ауылдарынан бүлеп алынған ерҙәргә тейелгеһеҙ хужа булып ҡала. Башҡорт ерҙәренә законһыҙ килеп ултырыусыларҙан: мишәрҙәргә, типтәрҙәргә һәм малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе йәки ҡаҙна хеҙмәте алып барыусы ерһеҙҙәргә йән башына 30 дисәтинә (VII), ә татарҙарға һәм крәҫтиәндәргә - йән башына 15 дисәтинә ер бүлергә. Әммә шундай шарт менән: башҡорттарҙың үҙҙәренә йән башына кәмендә 40 дисәтинә ер ҡалырға тейеш. Улай килеп сыҡмаһа, күсеп килеүселәргә ерҙе аҙыраҡ бүлергә кәрәк. Был ҡағыҙәләр юғарынан 10. 4. 1832 көнө раҫланды.

***Башҡорттарҙы спекулянттарҙан ҡурсалау өсөн уларҙың ер һатыу эшмәкәрлеген хөкүмәт тарафынан ҡәтғи контролгә алыу ҡаралған - аҫаба ерҙәрҙе һатыу йәки ҡуртымға биреү тураһында (19. 7. 1833) һәм Башҡорттар тураһында (14. 5. 1863) раҫланған ҡағиҙә.***

Бынан һуң 1863 йылғы положениеға ярашлы рәүештә, башҡорттар үҙҙәренең хоҡуҡтары менән ауыл обывателдәренә тиңләштерелә, улыстарға бүленә, ауыл сходтары һәм һайлап ҡуйыла торған йәмәғәт вазифалары, улыс судтары булдырыла.

Хөкүмәт, шулай итеп, башҡорт ерҙәрен урыҫтар тарафынан колонизациялауҙы тормошҡа ашыра башлай. 4. 6. 1871 йылғы ҡарар менән башҡорт йәйләүҙәрендәге запас биләмәләрҙе ташламалы шарттар менән төрлө кешеләргә һатыу рөхсәт ителә.

Урындағы властар был ҡарарҙы үҙ файҙаһына бороп ебәрә һәм бик аҙ ғына ваҡытта байтаҡ ер һатыла. 19-сы быуаттың 70-се йылдарында тиҙ арала байырға теләүселәр башҡорт урмандарын ҡулға төшөрә башлай. Урман дөрөҫ хужалыҡ итеүҙән туҡтай, йылдам рәүештә ҡырыла башлай. Ырымбур генерал-губернаторы Крыжановский урманды ҡаҙнаға һатып алырға тәҡдим итә. Әммә был тәҡдим ҡабул ителмәй, сөнки башҡорт урмандары юҡҡа сығарыла, өҫтәүенә, урман башҡорттары фәҡәт урман иҫәбенә көн күрә. Шулай булғас, урман һатыу мәсьәләһен ҡәтғи контролгә алырға кәрәк, тигән фекерҙә булалар.

***Урманды тотош ҡырып бөтөрөүҙән һаҡлау маҡсаты менән Дәүләт советы 1. 5. 1884 йылғы ҡарары менән Өфө һәм Ырымбур губерналарынан 157 мең дисәтинә урман һатып ала.*** Бер үк ваҡытта хөкүмәт башҡорт ерҙәре мәсьәләһе менән дә шөғөлләнә. Дәүләт советы ерҙәрҙе фәҡәт хөкүмәткә йәки крәҫтиәндәрҙең ауыл йәмғиәттәренә генә һатырға хоҡуҡ бирә. Әммә былдай хоҡуҡ арҡаһында күсеп килеүселәргә ер һатып алыуҙа ауырлыҡтар тыуа башлай. Бынан тыш, ҡайһы бер башҡорттар үҙҙәре лә ауыл йәмғиәтенән ер һатып алып, урыҫтарға һата башлай.

***

Башҡорттарҙың ере әле лә күп, тик улар вайымһыҙлығы һәм ер файҙалана белмәүе арҡаһында үҙҙәрен-үҙҙәре ярлылыҡҡа дусар итә. Шул арҡала ерҙәрен йә һаталар, йә ҡуртымға бирәләр.

Башҡорт ерҙәренән алынған килемде файҙаланып, уларҙың белемен һәм әхлаҡ кимәлен күтәрергә мөмкин.

Улыс сходтары йыйыуҙа аңлашылмаусанлыҡтар булыуы ихтимал. Ҡатнаш милләтле улыстар һаман арта бара, әммә башҡорттар һаны урыҫтарҙыҡынан һаман күберәк. Шуға ла сходтарҙа башҡорттарҙың өҫтөнлөк алыуы ихтимал, быға юл ҡуйырға ярамай. Әлегә улар араһындағы мөнәсәбәт һәүетемсә, әммә тәбиғи айырмалыҡтар бар. Башҡорттарҙың ерҙәре кәмегән һайын, ризаһыҙлыҡ арта барасаҡ һәм урыҫтар менән тыныс мөнәсәбәттең дә үҙгәреүе ихтимал. Улыс сходтарында ҡатнашыу өсөн башҡорттар менән урыҫтарға тигеҙ нисбәт эшләргә кәрәк.

Артабан Эске эштәр министрлығында, Юстиция министрлығында һәм дәүләт секретарына яҙған хаттарҙа башҡорт ерҙәрен бүлеү, башҡорт хәле, ултыраҡ тормошҡа күскәс, уларҙың йәшәйешенең үҙгәреүе һәм ер эшкәртергә өйрәтеү мохтажлығы тураһында бәхәстәр бара һәм 1904 йылдың 13 ноябрендә сығарылған законда бындай фекер әйтелә: **башҡорттарҙы законға буйһондорорға (әммә Эске эштәр министрлығы ул закондарҙың камил түгеллеген үҙе лә таный), башҡорттарҙың борондан ҡалыплашҡан йәшәү рәүештәрен ҡаҡшатырлыҡ үҙгәрештәр индерергә. Әммә шул уҡ ваҡытта, тышҡы сәйәсәттә хәлдәрҙең киҫкенлеген, Рәсәйҙең тышҡы дошман менән мөнәсәбәттә ауыр мәл кисереүен иҫәпкә алып, халыҡта ризаһыҙлыҡ тыуҙырмау яғын ҡарарға кәрәк, тигән һығымта яһала.**

**(Аҙағы. Башы 21-се һанда).**

| | Аҫаба башҡорттар | Ерһеҙ әтәмбайҙар | Ер майҙаны (урман) |
|---|---|---|---|
| Өфө губернаһында | 104 373 | 226 592 | 6 959 525 |
| Ырымбур губернаһы | 86 866 | 20 636 | 4 955 411 |
| Пермь губернаһы | 5 651 | - | 1 479 287 |
| Һамар губернаһы | 5 120 | 21 617 | 432 733 |
| Вятка губернаһы | 1 650 | - | 30 910 |
| **Барлығы** | **203 659** | **268 785** | **13 837 866** |

**20. 4. 1898 йылда яңы ҡағиҙә сығарыла һәм башҡорт ерҙәрендә йәшәүселәр һаны билдәләнә. Әммә теүәл генә иҫәп аҫаба башҡорттар тураһында ғына булып сыға. Әтәмбайҙар иҫәбенә башҡорттарҙан тыш, татарҙар ҙа, урыҫтар ҙа индерелгән.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Ҡалым тураһында һөйләшеп килешелгәс, кәләштең атаһы, эште артыҡ оҙаҡҡа һуҙмайынса, доға уҡып алғас, кәләш менән кейәүҙе махсус шаршау артына индерә (күрәһең, бында һүҙ сымылдыҡ хаҡында бара. - **Ред. иҫк.)**; шунан һуң кейәү, татарҙарҙағы кейек, ҡалымды тулыһынса түләп бөткәнсе кәләше янына килеп йөрөү хоҡуғына эйә булып, унын ҡуйынына инә ала. Башҡорттар кәләш ҡуйынына инеү өсөн тәғәйенләнгән махсус тирмә ҡора, ә кейәүенең килеүе хаҡында хәбәр алған кәләш үҙенең дуҫ ҡыҙҙары һәм иң яҡын туғандары менән шунда бара...

Ҡалым түләп бөткәс, ҡабул ителгән тәртип буйынса, кейәү кәләшенә ҡарата ир хоҡуғын тулыһынса ала. Ғәҙәттә, ҡыҙ атаһы йортонда булған һуңғы көндә башҡорттар мәжлес уҙғара, был ваҡытта кәләш йәйләүҙәге барлыҡ тирмәләрҙе йөрөп сығып, ҡыҙ-ҡатындар менән хушлаша. Был саҡта унын йөҙө яулыҡ йәиһә сигелгән селтәр менән ҡапланған була, уны уратып алған бер төркөм дуҫ ҡыҙҙары бер туҡтауһыҙ иламһырап ҡысҡырышҡан тауыштар сығара (бында автор сеңләү йолаһын шулай тасуирлай. - **Ред. иҫк.**). Мулла тарафынан законлы йола талаптары үтәлгәс, кейәү үҙенең туған-тыумасаһы менән үҙ олоҫона йәиһә тирмәһенә ҡайтып китә. Кәләште бар булған бирнәһе менән юлға әҙерләйҙәр һәм кейәү йортона тиклем һыбай алып баралар. Дуҫ ҡыҙҙары уны йәйләүҙән бер аҙ оҙата барып, үҙ тирмәләренә ҡайтып китә; кәләш янында иң яҡын туғандары һәм ҡоҙағый ғына ҡала, унһы кейәү йортона яҡынлаша башлағас, кәләш менгән аттың теҙгенән тотоп барып, йыраҡтан уҡ бар тауышына ниндәй тауар менән килеүе һәм унын ни хаҡ булыуы хаҡында ҡысҡыра килә. Шул саҡта кейәүҙең атаһы йәиһә туғандары ҡоҙағый менән һатыулашырға мәжбүр булып, килендe унын ҡулынан ниндәй ҙә булһа бүләк, мәҫәлән, ат биреп, һатып ала. Бүләк хаҡында килешелгәс, ҡоҙағый, беҙҙә ат һатҡандағы кейек, ҡайны тарафынан ебәрелгән ҡатындарға теҙгенде кафтан итәге менән тотоп бирә, алыусылар ҙа теҙгенде итәктәре менән тотоп ала. Ишек алдында кәләш аттан төшә; шул саҡта кейәүҙең ике яҡын ҡыҙ туғаны уны ҡулдарынан алып, өйгә индерә. Ҡайныһын йәки ҡәйнәһен, йә улар урынына иренең яҡын туғандарын күреү менән, килен тантаналы ҡиәфәттә уң аяғына тубыҡланып, һул тубығы өҫтөнә ҡулын ҡулға һала. Ошо рәүештә баш эйгәндән һуң, янындағы ҡыҙҙар ҡулдарынан тотоп торғоҙоп, өс аҙым алға атлатҡас, ул тағы ла ошолай уҡ баш эйеп сәләмләй, был өс тапҡыр ҡабатлана. Шунан аҙаҡ уны шаршау артына индерәләр, һәм мәжлес башланып китә, әммә унда килен ҡатнашмай, был ваҡытта ул йәш-елкенсәк менән күңел асып, үҙенең иркенлектә уҙған йәш сағы менән хушлашҡан кейек була; кейәү үҙенең йәш ҡатыны янына төнөн, ҡасып-боҫоп ҡына килә. Уларҙа туй мәжлесендә ҡунаҡ булышыу өс көн һәм унан да оҙағыраҡ бара: шул саҡта һәр кем, үҙ мөмкинлегенә ҡарап, яңы өйләнешкән йәштәргә бүләк тапшыра.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Бөгөн һатыуға сыҡҡан милли тауар ҡиммәт хаҡҡа ҡуйыла. Мәҫәлән, биҙәүестәр, түшелдеректәр, ҡурай кеүектәрҙең хаҡтары бик ҡиммәт. Үҙебеҙҙекеләрҙеке булһын, үҙебеҙҙекеләр белһен тигәнгә лә таянайыҡ әле.***

# ҮҘЕБЕҘ ЭШЛӘГӘН ҺЫНДАРҘЫҢ...

## булмышында йәшәйбеҙ кеүек

**Ғәҙәттә, ижади һәләтте тик матур әҙәбиәткә һәм сәнғәт өлкәһенә генә ҡағылған төшөнсә булараҡ аңлайҙар: шиғыр яҙа белеү, йыр ижад итеү, матур һүрәт төшөрөү һ.б. Ә ысынында иһә был төшөнсә "ижад" һәм "ижади эшмәкәрлек" менән ныҡ бәйләнгән. Кешенең төрлө өлкәләге эш-хәрәкәтен, үҙ-үҙен тотошон күҙәтеп, эшмәкәрлектең ике төрөн айырып күрһәтәбеҙ. Береһе - репродуктив эшмәкәрлек (ул беҙҙең хәтеребеҙ менән бәйле), йәғни кешенең элек барлыҡҡа килгәнде ҡабатлауы. Бынан тыш, кешенең ижади эшмәкәрлеген билдәләп китергә кәрәк. Ул үткәндәрҙе ҡабатлау ғына түгел, ә яңы образдар, яңы моделдәр тыуҙырыуҙы күҙ уңында тота. Бының нигеҙендә ижади һәләт ята. Редакциябыҙҙың сираттағы ҡунаҡтары - Ләлә Камалитдинова һәм Әлфир Дәүләткирәевтың башҡарғанын мин репродуктив ижад тип атар инем. Сөнки улар тыуҙырған өлгөләр ысынлап та беҙҙең хәтерҙе терелтә, хатта ҡайҙалыр күмелеп йоҡлап ятҡан төпкө аң тулҡындарын тирбәтеп ебәргәндәй. Улар икеһе лә башҡорт сувенирҙары яһаусы оҫталар.**

**‣ Ә ни өсөн һеҙҙең эшмәкәрлек тап башҡорт сувенирҙары? Был ниндәйҙер заман һулышын тойоуҙанмы, әллә модаға эйәреүме?**

**Л. Камалитдинова:** Минең өсөн был заман һулышы ла, мода ла түгел, ә күптәнге хыялым. Бәләкәйҙән балсыҡтан, пластилиндан әүәләп һындар эшләргә яраттым. Беҙ бөгөн балаларға һатып алған ҡурсаҡтарҙы, уларҙың йорт йыһаздарын заманында әсәйем беҙгә балсыҡтан яһап бирә ине. Унан Себерҙә йәшәгәндә лә балалар баҡсаһында башҡорт төркөмө астырыу, шунда йәшәгән башҡорттарҙың балаларын бергә туплау ниәте менән янып йөрөнөм, тик, үкенескә ҡаршы, төрлө сәбәптәр арҡаһында был уйымды тормошҡа ашыра алманым. Башҡортостанға ҡайтҡас та башҡорт теле уҡытыусыһы булыу теләге менән яндым, тик бында ла хыялым тормошҡа ашманы - эш юҡ. Шулай аптырап йөрөгәндә, бер көндө күрше ҡыҙ танышы алып килгән бүләген күрһәтеп, күңелемде ҡуҙғытып ебәрҙе. Матур ғына япон ҡыҙының һыны - статуэтка формаһындағы ҡурсаҡ ине был. Шунда башыма "Ә ниңә был башҡорт ҡурсағы түгел?" тигән сәмсел уй килде һәм... мин балсыҡтан башҡорт ҡыҙын әүәләргә ултырҙым.



**Ә. Дәүләткирәев:** Был сәнғәткә мин бәләкәйҙән ғашиҡ. Дүртенсе класта уҡығанымда мәктәптә ағас эше түңәрәгенә йөрөй башлағайным, шунан айырылғаным юҡ. Мин, әлбиттә, сувенир продукцияһының төрлөһөнә тотоноп ҡарайым, әммә милли һыҙаттар менән булғанына өҫтөнлөк бирәм. Йәғни, ат эшләйһең икән, уның тап Аҡбуҙат йәки башҡорт аты икәнлеге беленеп торһон. Һауыт-һаба икән, биҙәктәрендә башҡорт орнаменттары булһын. Башҡа төр сувенирҙарҙа ла уның тап беҙҙең халыҡтыҡы икәнен айырып күрһәтер һыҙаттарҙы бирергә тырышам. Тырышам ғына ла түгел, был - эшемдең төп маҡсаты ла инде.

**‣ Һеҙ етештергән сувенирҙарҙы ниндәй мәнфәғәттән һатып алырға тейештәр, тип уйлайһығыҙ?**

**Ә. Дәүләткирәев:** Мин, мәҫәлән, үҙем һырлап эшләгән сувенирҙарҙың Башҡортостаныбыҙҙа булып киткән кешеләргә бүләккә, иҫтәлеккә бирелеүен теләр инем. Улар беҙҙең рухтың, менталитеттың бер өлөшө булып һаҡланһын ине сит ерҙәрҙә. Шулай уҡ был әйберҙәр һәр беребеҙҙең интерьер биҙәге лә була ала. Был үҙенә күрә милли колоритлы зауыҡ, минеңсә.

**Л. Камалитдинова:** Бер-беребеҙгә иҫтәлек өсөн рухи ҡиммәте булған бүләктәр бирешергә тейешбеҙҙер ул. Был мәҙәниәт беҙҙә үҫешергә тейеш. Аңлайышһыҙ картина, спиртлы эсемлек йәки кәрәкһеҙ һауыт-һаба бүләк иткәнсе, ниңә бейеп йөрөгән башҡорт ҡыҙы, ҡурайсы егет сувенирын тапшырмаҫҡа яҡындарыңа ла, дуҫтарыңа ла. Балалар өсөн иһә, милли кейемдәге балалар, башҡорт аттары һындары бар. Был бүләк алыусыла үҙенең тарихына, мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу уятасаҡ.

**‣ Башҡорт сувенирҙарын яһау өсөн ниндәй белемгә, оҫталыҡҡа өлгәшергә кәрәк булды һеҙгә?**

**Ә. Дәүләткирәев:** Әлбиттә, иң беренсе сиратта, тарихты өйрәнергә кәрәк ине. Унан археологик ҡаҙылмаларҙа табылған һындарға, һауыт-һабаға иғтибар итәм. Ана шул һындарҙағы боронғолоҡто, серлелекте сағылдырырға тырышам үҙемдең сувенирҙарымда. Тағы ла орнаментарҙың дөрөҫлөгөнә етди ҡарайым. Ҡаҙаҡтарҙың, рустарҙың биҙәктәре лә беҙҙекенә яҡын, уларҙы бутамаҫ өсөн ҡат-ҡат тикшерәм, сағыштырып ҡарайым. Милли һыҙаттарҙы бутамау бик мөһим. Мәҫәлән, Аҡбуҙатты Конек-горбунок итеп ҡабул итмәһендәр, йәки башҡорт батырын монгол егете икән тимәһендәр...

**Л. Камалитдинова:** Ситтә ғүмер итеп, быға кейемдәрҙең, биҙәүестәрҙең атамаларын да белмәгәнмен икән. Үҙемә бер мәктәп булды был. Мәҫәлән, ҡыҙҙар, килендәр йәки олораҡ ҡатындар ниндәй елән, ниндәй баш кейеме кейергә тейеш, шулай уҡ толом осонда, ҡолаҡтарҙа ниндәй алҡасулпылар булырға тейешлеген һ.б. айырмалыҡтарҙы, кемдең кем булыуын аңлатҡан билдәләрҙе өйрәндем. Итектәрҙәге, ситектәрҙәге биҙәктәр, еләндәрҙәге орнаменттар ҙа, Әлфир ҡусты әйтмешләй, дөрөҫ сағылдырылһын. Шулай уҡ йөҙһыҙаттарҙың беҙҙеңсә асыҡ, алсаҡ һәм бер үк ваҡытта ғорур ҙа булыуы зарур.

**‣ Ярай, эшләү процесын үҙләштерҙегеҙ ҙә, ти. Ә әҙер продукцияны һатыу мәсьәләһе нисек ҡаралған?**

**Л. Камалитдинова:** Башта минең сауҙа итеү нөктәләрем дә бар ине баш ҡалала, хәҙер улар ике-өскә генә ҡалды. Урын алыу, һалымдар һәм башҡа ҡағыҙ эштәре быуа быуырлыҡ, тип әйтһәм дә шаштырыу булмаҫ. Ғөмүмән, һатыу эше еңелдән түгел. Күпме кеше үҙе етештергәнде алыпһатарҙар ҡулына тапшырырға мәжбүр. Ә бит иҡтисади белемдәре булһа, улар үҙе етештергәнде үҙе һатыр ине. Шулай итһәләр, тауар ҙа осһоҙораҡ булыр ине, оҫтаға ла йүнлерәк килем килер ине.

**Ә. Дәүләткирәев:** Минең дә эштәрем әлегә өйҙә башҡарыла, оҫтаханам төҙөлөү өҫтөндә. Әлегә бер үҙеммен, әммә яҡын киләсәктә бергәләшә торған оҫта дуҫтарым бар. Улар менән берлектәге пландар төҙөйбөҙ.

Материалды Дәүләкән районынан килтерәм. Йүкәне туғандарым, таныштарым бирә. Хатта бура бураһалар ҙа төптәрен, кәрәкмәгән өлөштәрен миңә ҡалдыралар. Күргәҙмәләргә күберәк милли колоритлы әйберҙәрҙе алып сығам. Ә былай төрлө стилдәге эштәрем бар. Заказдар ҙа ҡабул итәм, ирекле формала ла яһайым. Теләгем: ҡала һәм республикала уҙғарылған күргәҙмәләргә саҡырырға онотмаһындар ине, бындай саралар эштәрҙе киңерәк даирәгә күрһәтергә, ҡыҙыҡһыныусыларҙы табырға ярҙам итә. Икенсенән, тамаша ҡылыусылар ошондай ҙа сәнғәт оҫталығы бар икәнлекте күрә, белә. Тағы ла, Ләлә апайға ҡушылам, ситтән килгән ҡунаҡтарға ошондай рухлы, милли колоритлы бүләктәрҙе тәҡдим итһен ине барыһы ла.

**‣ Уйлап ҡараһаң, һәр оҫта тота килеп милли юҫыҡтағы эшкә тотонмай. Күптәр үтемлерәк, барыһына ла аңлайышлы булғанырaҡ йәки универсаль стилдәгене һайлай. Ә һеҙҙең сувенирҙарға айырым ҡараш, айырым зауыҡ, айырым һатып алыусы кәрәк...**

**Ә. Дәүләткирәев:** Ошо юлды һайлағанмын инде... Башҡортлоғомдоң сағылышы ла тап ошондалыр, бәлки. Мин бит ҡалала йәшәһәм дә, ауыл ерлеге тәрбиәһендә үҫкән кеше. Өйҙә башҡортса һөйләшәбеҙ һәм киләсәктә үҙ балаларымдың да туған телде белеүен теләйем. Халҡымдың тарихы, ҡомартҡылары һәм бөгөнгөһө лә ныҡ ҡыҙыҡһындыра мине. Бөтөн ошо дөйөм булмыш күңелемдә ниндәйҙер ҡомар уята һәм мин ана шул һынланасаҡ батырҙар, аттар, ҡоралайҙар, һауыттар һ.б. хаҡында уйлап йөрөй башлайым. Әле "Урал батыр" эпосы буйынса бер серия һындар һырлап ҡарау хаҡында хыял итәм. Ошондай хыялдар менән йәшәгәндә, әлбиттә,



сувенирҙарымды һатыу, һатып алыусы табыу хаҡында уйлап ултыра алмайым бит инде. Иң мөһиме, ижад итеү процесы, ҡалғаны - аҙаҡ...

**Л. Камалитдинова:** Минең сувенирҙарҙы күреүселәр аҙ, әммә бар. Мин тап ана шул зауыҡлылар өсөн ижад итәм дә инде. Ҡайһы саҡ "Ярай, мәшәҡәтләнмәйем, бер килемһеҙ эш менән" тип ҡул һелтәп ҡуям да, тағы тотонам. Баш ҡалала тик милли тауарҙарҙан ғына торған махсус сауҙа үҙәктәре булһын ине ул. Кеше эҙләнеп йөрөмәһен, кәрәген килһен дә һайлап алһын. Сауҙа үҙәгендә тирмәнән башлап, кейемдәр, биҙәүестәр, сувенирҙар, башҡорт әҙәбиәте, аш-һыу һ.б. барыһы ла һатылһын ине. Был ваҡытта ошо зауыҡты аңлаусылар ҙа күбәйәсәк, минеңсә.

Минең башҡорт теле уҡытыусыһы булыу хыялым тормошҡа ашманы, шунлыҡтан, халҡыма булған һөйөүемде ошолай милли сувенирҙар яһау аша таратамдыр, тим. Тағы ла шул: бөгөн һатыуға сыҡҡан милли тауар ниңәлер үтә ҡиммәт хаҡҡа ҡуйыла. Мәҫәлән, биҙәүестәр, түшелдеректәр, ҡурай кеүектәрҙең хаҡтары бик ҡиммәт. Ябай ауыл кешеһе ун биш меңлек селтәрҙе нисек итеп һатып алһын? Йәки ҡумыҙҙы - дүрт меңгә? Нәфсе тигән нәмәне бер аҙ тыяйыҡ һәм "үҙебеҙҙекеләрҙеке булһын, үҙебеҙҙекеләр белһен" тигәнгә лә таянайыҡ әле.

**‣ Һеҙ ысын мәғәнәһендә илһөйәр һәм телһөйәр кешеләрһегеҙ, шулай бит?**

**Ә. Дәүләткирәев:** Әлбиттә. Мин бер ваҡытта ла үҙемдең кем балаһы, ниндәй милләт вәкиле икәнде онотмайым. Тәүлектәр буйына ағас һын юнып ултырғанда ла мин шул аттың йәки батырҙың көсөн, энергетикаһын тоям, уның тере килеш нисек булғанлығын күңелемдә йөрөтәм, хатта уның булмышында йәшәп алам кеүек. Шунлыҡтан, милли рухымды кәмһеткәндәй фекерҙәр ишетеү ҙә миңә ауыр, шундуҡ яҡлау, һаҡлау инстинкты уяна.

**Л. Камалитдинова:** Мин дә урамда туған телдә һөйләшкәндәрҙе ишетһәм дә, боролоп ҡарамай, йылмаймай түҙә алмайым. Ситтә йөрөгәндә лә үҙ төҫөбөҙҙәге йөҙҙәрҙе эҙләйем. "Милләтсе" тигән төшөнсәне, ниңәлер, тик кире мәғәнәлә генә ҡабул итәләр, улай дөрөҫ түгел, минеңсә. Милләтсе - ул милләтен яратыусы, уның өсөн хәленән килгәнсә рухи йәки матди файҙа килтереүсе кеше. Был һүҙҙән ҡурҡырға ярамай. Аңлы һәр йән башҡаларҙы кәмһетмәҫкә, әммә үҙендә милләткә һөйөү йөрөтөргә тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт сувенирҙары яһау оҫталары Ләлә Камалитдинова менән Әлфир Дәүләткирәевтың ижади эштәре иң яҡшылар рәтендә булып, республикабыҙҙың күргәҙмә китабына ингән. Быға аптырарлыҡ та түгел. Сөнки ул эштәрҙе бына шундай илһамлы, рухлы, төплө кешеләр яһай бит.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

✓ *Бабай, был теге икенсегә әүрәп, этен туҡмаған кеше бит? Үҙен күргәс тә, был кеше миңә ҡайҙан таныш, тип уйлап ултыра торғас, танының, нәк үҙе... - тип әйтеп һалмаһынмы.*



ҠУШАМАТ

# ҠУШЫЛҒАН ҒЫНА ТҮГЕЛ,

## тағылған исем дә һине яҡлаулы итә

**Айгөл Айытҡолованың гәзиттең 16-сы һанындағы "Ә мин үҙем Әпитүк булдым..." тигән мәҡәләһе мине лә бала саҡ хәтирәләренә алып китте лә, ундағы ҡушаматтарға бәйле ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы иҫләй торғас, ғөмүмән, кешегә ҡушамат тағыуға бәйле көтөлмәгән һығымталарға ла алып килде. Һуңыраҡ ҡушаматтың кешегә исем бирелгән кеүек мотлаҡ бирелергә тейешле атама булғанлығын да аңланым.**

### "Икенсегә әүрәп, этен туҡмаусы"

Бынан бер ун биш йыл элек Баймаҡ районының "Талҡаҫ" шифаханаһына ял итергә барған артист Әхтәм Абушахмановты тыуған ауылыма ҡунаҡҡа алып ҡайттым. Атайым һарыҡ һуйҙы, кискеһен барлыҡ туғандарыбыҙ ҡунаҡ күрергә йыйылды. Әхтәм ағай үҙенә генә хас манерала атайым менән һөйләшеп ултыра. Тураһын һөйләргә яратҡан әсәйем, унан күҙен дә алмайынса:

- Бабай, был теге икенсегә әүрәп, этен туҡмаған кеше бит? Үҙен күргәс тә, был кеше миңә ҡайҙан таныш, тип уйлап ултыра торғас, танының, нәк үҙе... - тип әйтеп һалмаһынмы.

Барлыҡ туғандарыбыҙ менән бергә гөрләтеп көлөп ебәрҙек. Бик оҙаҡ тынманыҡ. Әхтәм ағайға ла был билдәләмә оҡшаны - "икенсегә әүрәп, этен туҡмаусы". Һуңынан да (хатта бер туған ҡустымдың исеме Әхтәм булыуға ҡарамаҫтан) әсәйем Әхтәм Абушахмановтың исемен дә, фамилияһын да иҫләй алманы. Башҡаларға ла унның хаҡында: "Ана шул, “икенсегә әүрәп, этен туҡмаусы"ны Әхмәр ҡунаҡҡа апҡайтты", - тип һөйләр булды.

Әлбиттә, бында һүҙ Әхтәм Абушахмановтың киң билдәле "Һарығолаҡ" фильмындағы Һиммәт образы хаҡында бара. Төптән уйлап ҡараһаң, әсәйемдең фильмда төп ролде башҡарыусыға шундай билдәләмә биреүе, дөрөҫөрәге, ҡушамат тағыуы, беренсенән, әҫәрҙең авторы яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаевтың, фильм режиссеры Әнүәр Нурмөхәмәтовтың һәм артист Әхтәм Абушахмановтың ижади хеҙмәтенә баһа булып торһа, икенсенән, ҡушамат тағыуҙың халҡыбыҙ тормошонон баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә бер йола-тәжрибәһе икәнлеген дә аңлата. Әһәмиәте хаҡында алдараҡ әйтелер.

"Рәсәй киноһы йылы"нда художестволы образдың әһәмиәтенә килгәндә, Бөйөк Ватан һуғышы алдынан төшөрөлгән "Чапаев", "Салауат Юлаев" фильмдарын ғына миҫал итеп килтерәйек. Тап шул йылдарҙа ҙур илебеҙҙең миллионлаған балалары һәм үҫмерҙәре тал сыбыҡҡа атланып, ағас ҡылыс тотоп, "Чапай" һәм "Салауат" уйнаған. Художестволы образдың уйын, йола образы булараҡ тормошҡа күсеп йәшәй алыуы ҡушамат тағыуҙың да халыҡ ижадының мөһим бер өлөшө булып тороуы хаҡында һөйләмәйме ни?

### "Муллалар" ауылында

Һәр ауылдағы кеүек, беҙҙең Буранбайҙа ла нәҫел-заттар айырым араларға ҡарай. Шуларҙың бер нисәүһе: Буранбаевтар - "айыуҙар", Ғәйетбаевтар - "ҡыйрауҙар", Ҡотоевтар - "ҡыуыҡтар", Ғөбәйҙуллиндар - "байҙар" һ.б. Беҙҙе, Үтәбаевтарҙы, "ҡуяндар" тиҙәр. Элек-электән беҙҙең нәҫел малыбыҙ ҡуян булған. Ололар әйтеүенсә, йот йылдарында беҙҙең нәҫел малына башҡалар һунар итә алмаған. Тимәк, бында һунар йәнлектәрен аңлатҡан ара атамаларының ошо сәбәпкә бәйле барлыҡҡа килеүе хаҡында һүҙ алып барырға була. Хәҙер "Баймаҡ тәжрибә хужалығы" урынлашҡан Ҡуянтау ауылы янындағы ҙур тауҙа беҙҙең ата-олатайҙар ҡуянға һунар иткән. Тимәк, Ҡуянтау - Үтәбайҙарҙың "баш ҡалаһы".

Әгәр ҙә беҙҙең аралағы берәр еңгә бәпәйләһә йә берәй егет өйләнһә: "Ҡуяндар 99 ине, 100-гә тулды", - тиҙәр. Лаҡабы ла бар. Ауылыбыҙҙың муллаһы, ҡартатайымдың ҡустыһы Мөхлис олатай Үтәбаев йәшерәк сағында ҡырпаҡ ҡар төшкәс яланда бихисап ҡуяндар ултырыуын күреп ҡайтып: "Әйҙәгеҙ, һунарға, ҡырҙа 100 ҡуян ултыра", - тип ауылыбыҙҙың барса мылтыҡлы ир-атын алып киткән. Улар барып, бер үҙәккә боҫоп ятып, яланда үрә ҡатып баҫҡан ҡуяндарға терәп тиерлек атып ебәргән. Күмәкләп бирелгән залптан ҡылғандарға ҡунған ҡырпаҡ ҡар ғына борҡоған. "100 ҡуян" лаҡабы шулай башланған.

Элек ауылыбыҙ Һаҡмарҙың уң яҡ ярында ултырып, йылға бер яҡҡа шыуышып, һул ярға күсеп, хәҙер инде киреһенсә уң яҡҡа күсенә. Унда яңы барлыҡҡа килгән урамдарҙың халыҡ телендәге атамалары бик ҡыҙыҡлы. "Михайловка" урамы Мәүлитбай Ғәйетбаев тәүләп барып ултырған өсөн шулай йөрөтөлә. Ғүмере буйына механизатор булып эшләүсе Мәүлитбай ағайҙы белештәре "Михаил" тип йөрөтөп, "Михайловка" шунан килә. Өйләнешкән йәштәрҙең тиҙ арала башҡа сығып барлыҡҡа килтергән урамы "Ҡасаҡтар" тип йөрөтөлһә, оҙаҡ ваҡыт ҡайны-ҡәйнәләре менән бергә йәшәгәндән һуң, йорт һалып башҡа сығыусыларҙың урамы "Ҡотолдоҡ" тип атала.

Ауылыбыҙҙа, ғөмүмән, ҡушаматһыҙ кеше юҡтыр ул. Ҡайһы берҙәренең ике-өс ҡушаматы ла бар. Мине "Әхмүш" йә "Ҡуян" тиҙәр. Класташтарым "Һәлп-һөлп" (бында ҡуяндың ҡолағын күҙ уңында тотҡандарҙыр инде) тип үсекләне. Әммә мин үсекмәнем. Студент саҡта төндә ятаҡҡа ҡайтып, балкондар аша 9-сы ҡатҡа тиклем менгәс, Учалынан Рөстәм Хафизов миңә "Макака" тигән ҡушаматты йәбештерҙе, уға ла үсекмәнем. Әйткәндәй, студент саҡта аралашҡан егеттәрҙең барыһының да ҡушаматы булды: Радик - "Һуҡыр сысҡан", Рәмил - "Дөйә", Әмир - "Водянка", Наил - "Маһмай", Дамир - "Пеликан", Нәркиз - "Тараҡан", Иршат - "Торнапис" һ.б.

Бер туған апайҙарымдың ҡушаматтары: Мәҙинә апай - "Мапай", Гөлнур апай - "Гапай", Бибинур апай - "Бапай", ике туған Зифа апайым - "Запай". Уларҙың телефон номерҙарын кеҫә телефонымда шундай шартлы билдәләр менән йөрөтәм. Зөфәр ағайға "Зәрғай" тип өндәшәбеҙ. Мәрхүм ҡустыларым Әхтәмде "Кәтүк", Хәбирҙе "Әпәвә", Әмирҙе "Кофе" (ул тәмле нәмә ашаһа йә матур нәмә күрһә, һәр ваҡыт "Кофе" тип әйтә ине) тип атаныҡ. Әмирҙе класташтары "Рекорд" тип тә атап йөрөгән икән, һуңынан белдем. Бала саҡта уйнап үҫкән тиҫтерҙәремдең ҡушаматтары: Хәйҙәр - "Тәкә", Әхиәт - "Әкиәт", Имамитдин - "Мамыҡ", Хәбир - "Әбей", Фәтих - "Дәүләтбаев", Ғәзиз - "Айыу", Әбделбаҡый - "Баҡа", Әсҡәт - "Ҡатыҡ", Рәйес Түләк - "Керис", Сәмиғулла - "Микломан", Мозафар - "Мозой", Рамаҙан - "Ырмый", Шәрифулла - "Шапуй", Шәфҡәт - "Шәпәләй", Йосоп - "Посой", Ғаяз - "Ағазай", Нәҙир - "Нәҙек", Әҙеһәм - "Әрмән", Әнеүәр - "Әнеүәй", Мөҙәрис - "Мудырый", Рауил - "Ҡырау", Йомағужа - "Йомаҡай", Сәйфулла - "Машай", Ғәйфулла - "Ҡәйпүш", Ғәйнулла - "Ғәйнуш", Нурғәли - "Корчагин", Фирғәт - "Сиҙәт", Рәфҡәт - "Ҡара тауыҡ" ("Ҡара тауыҡ"ты шәп бейегән өсөн) һ.б. Беҙҙең ғаилә өсөн игеҙәктәр Ирғәле менән Нурғәле Байрамғоловтар бер үк ҡушамат менән йөрөнө - "Ататай". Улар бәләкәй саҡтарында ҡарталарын "Ататай" тип атайҙар ине, ҡушаматтары шунан килә. Беҙҙең ауылда ике Сәхей булды. Усманов Сәхейҙе - "Йылҡы", Байрамғолов Сәхейҙе - "Зәшим", Мөхитдин ағайҙы - "Муха", Туйсин Ғибаҙулланы - "Ҡыйғаҡ", Нурмөхәмәт олатайҙы -"Бәшмәк", Фәйзрахман ағайҙы "Ершов" тип атанылар. Ауылдашыбыҙ - Баймаҡ баҙары директоры Әҙеһәм Ҡотоевтың ҡушаматы - Будулай. Элек күрше-тирә ауылдар беҙҙе, буранбайҙарҙы, - "муллалар", ауылыбыҙҙы "муллалар ауылы" тип йөрөттөләр.

### "Баштиреләр" әтрәтендә

Айгөл кеүек, минең дә сабый-бала-үҫмер сағым шундайын кинәйәләр менән уратып алынған әкиәт донъяһында үтте. Сабый сағымда йыл һайын йәй әсәйемдең тыуған ауылы Таулыҡайҙағы өләсәйемдәргә ҡунаҡҡа барҙым. Төпөш тигән урында үтә ине беҙҙең колхоз һабантуйы. Шунда барған ерҙән өләсәйем мине үҙҙәренә алып ҡайтып китә. Ҡайһы ваҡыт йәй буйына уларҙа булам. Үрге Таулыҡайҙың өләсәйемдәр йәшәгән төбәген "Баштиреләр" тип атай инеләр. Баҡтиһәң, шундай ара бар икән. Һөйләүҙәренсә, ысынмылыр-юҡмылыр, был араға ҡараусыларҙың береһе ҡышҡы селләлә һунарға барғанда башына яңы һуйылған малдың тиреһен ураған да, тире шыҡырайып туңып, оҙаҡ ваҡыт "кәпәсен" сисә алмай йөрөгән, имеш.

Ана шул араға ҡараған малайҙарҙың әтрәтенә ҡушылып, "Ҡаратуҡайҙар" менән "Ыштанаҡҡандар"ға, "Ҡаҙаҡтар"ға ҡаршы һуғыштыҡ. Беҙҙең әтрәттең төп яугирҙары: Ҡасим (ҡушаматы - Сиҡаҡа), Ҡәһәрмән (Һонтор), Дидар (Титаҡ) һ.б. Әгәр ҙә уйындарыбыҙ уҫмаҡлашыуға барып етһә, беҙҙе ишетеп ҡалып йүгереп сыҡҡан колхоз агрономы Әнүәр олатай Имелбаев (Кутузов) тыйырға керешә. Унның бер күҙе һуҡырайып, һуҡыр күҙен сепрәк менән ҡаплап йөрөгәне өсөн шулай атайҙар ине. Уны бер үк ваҡытта "Багратион" тип тә йөрөттәләр.

Әсәйемдең бер туған һеңлеһе - Зөләйха апайым мәрхүмә бигерәк йор һәм төртмә телле булды. Күп кенә таулыҡайҙарға һәм туғандарыбыҙға ул ҡушамат бирҙе. Мәҫәлән, иренә, үҙенсәлекле Ҡыҙыл һөйләшендә хәбәр атҡарыусы Үрге Нуғай ауылынан Ғөзәйер еҙнәйебеҙҙе яратып "Ҡуҙыйкүрпәс" тип атай башлағайны, үҙенә "Маянһылыу"ҙы йәбештереп тә ҡуйҙыҡ. Апайым еҙнәләре, Темәс ауылына тамыры тоташҡан Шаһимырҙан олатайҙы "Темәсүңәс", атайымды "Ғүмәр-түмәр" тип йөрөттө. Зөләйха апайымдың Таулыҡайҙа ҡушамат таҡмаған кешеһе ҡалмағандыр, ул ауылдаштарының дөйөм күҙгә салынмаған яҡтарын эләктереп алыу һәләтенә эйә ине. Ул өйләнмәй йә кейәүгә сыҡмай ҡартайыусыларҙы "үтмәҫ барлау" тип йөрөттө, ғүмере буйына гел кинәйә менән хәбәр атҡарҙы. Туғандарыбыҙ араһында Зәйнулла, Зәбир ҡустыларыбыҙ уға оҡшаған.

### Йүргәк исеме кеүек

Яңыраҡ яҡташым, шағир Фәнис Сирбаев телефон аша бик ҡыҙыҡ ҡына фекер әйтеп һалды. Баҡтиһәң, кешеләргә ҡушамат тағылыуы йәһәтенән беҙҙең Буранбай ауылы күрше-тирә ауылдарҙан ныҡ айырылып тора. Фәнис әйтеүенсә, ижади ҡомар йәшәгән ауылда ғына кешеләр ҡушаматлы икән. Бәлки, был дөрөҫтөр ҙә: нимә генә тимә, ҡушамат - кешегә халыҡ ҡушҡан "исем" дә булып тора бит. Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә. Шулай ҙа кешегә ҡушамат тағыуҙың исем атаған кеүек мотлаҡ үтәлергә тейешле йола булыуын түбәндәге шарттарға ярашлы ҡарарға кәрәктер, тип уйланыла:

- Ҡушамат кешенең ситтән ҡарағанда күренмәгән сифатына, характерына, ҡылығына, серенә һ.б. ҡарата бирелә икән, унның йөкмәткеһендә кешенең асылы ныҡыраҡ сағылыш таба;

- Ҡушамат - исем түгел, ул шартлы билдә, асылдың образлы, символик йөкмәткеһен тәшкил итеүсе атама;

- Ҡушамат элек сабыйға мотлаҡ рәүештә бирелә торған йүргәк исеме кеүек тә. Йүргәк исеме сабыйға мулла исем ҡушҡанса бирелгән. Унның менән сабыйҙы ен алыштырыуҙан, нәмә ҡағылыуҙан, күҙ тейеүҙән һаҡларға тырышҡандар. Был осраҡта сабыйға ҡарай йүнәлтелгән яуыз көстәрҙе яҙлыҡтырыу, аҙаштырыу маҡсаты ҡуйылған. Йүргәк исемен сабыйҙың кендек инәһе һәм әсәһе генә белгән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мулла ҡушҡан исем кешенең асылына тап килергә тейешме? Әйтеүе ҡыйын. Был бик бәхәсле мәсьәлә. Шул уҡ ваҡытта беҙ ҡушаматтарҙа кешенең асылына яҡынлыҡты тоябыҙ икән, уға ҡарай йүнәлтелгән насар энергетиканың, негатив мәғлүмәттең, боҙомдоң, сихырҙың, ҡарғыштың ҡушаматына түгел, ә рәсми исеменә барып тейгәнен дә аңлайбыҙ. Тимәк, ҡушаматтар, йүргәк исеме кеүек үк, кешене кире йоғонтоларҙан, тәьҫирҙәрҙән һаҡлаусы һәм яҡлаусы сара ла булып тора.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# СӨСӨ КҮМӘС...

## яланда

**Аш көҫәү** - төрлө ризыҡ ашағы килеү, аш һайлау
**Дупыян иткән** - ватҡан, емергән, туҙҙырған
**Мандауышҡа** - үтә йыуан кеше
**Будаука** - саҡ һелкенеп йөрөй, һимеҙ кеше
**Шойҡоно теймәһен** - бәләһе, зыяны теймәһен
**Ауыҙы һалбыр икән** - уйламағанда ҡунаҡ булған кеше, аш мәленә тура килеүсе
**Күҙгә күгәүен** - әрһеҙ, теңкәгә тейә, бәлә һала
**Табаҡҡа төшөп бара** - туя алмай, күп ашай
**Сөсө күмәс яланда, әсе ҡатыҡ аранда** - иген ик, мал көт - бөтәһе лә булыр мәғәнәһендә
**Ҡыя һуҡты** - алдына килгән ризыҡтарҙы ашап бөттө
**Ойҡотҡан** - юҡ икән, кәрәген биргән
**Яңшау** - мыжыу, туҡтауһыҙ һөйләнеү

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

***✓ Бар ауыл шаҡ ҡатты. Зыяратта уйламай әйткәне шул уҡ көндө Ғайсарҙың алдына килде. Камил менән Илнур аталарының һүҙ зәхмәте тураһындағы әйткәндәрен уйлап, уның күҙ менән ҡаш араһында раҫланыуына ғәжәпләнде.***

– Йырсы Райман Ишбевтың көтөлмәгән фажиғәһе лә өн, моң тылсымына, һүҙ зәхмәтенә бәйле тойола, атай?

- Быға инеш өсөн тәүҙә лирик сигенеү яһайыҡ, "Ай менән Зөһрә" риүәйәтен хәтерләйек. Үгәй инә Зөһрәне ҡаҡҡан-һуҡҡан, туҡмаған, ҡыҙға һис көн күрһәтмәгән. Бер кис үгәй инә үҙе алдан төбөн тишеп ҡуйған сапсаҡты иртәнгә саҡлы тултырып ҡуйырға бойора, тултырмаһа, башын өҙөү менән янай. Ҡыҙ төнө буйы һыу ташый. Сапсаҡта һыу бер ҙә артмай. Ауыр көйәнтәнән балаҡайҙың ҡулбаштары уйыла, биле бөгөлә, тамам хәле бөтә. Төн тыныс, күк йөҙөндә Ай йөҙә, шылт иткән тауыш та ишетелмәй. Өмөтһеҙлеккә төшкән ҡыҙ шул саҡ Айға бағып ялбара:

- Әй, Айғынам, исмаһам, һин белер инең хәлемде, ҡотолдорор инең йәнемде?

Тик Ай әүәлгесә тыныс ҡына йөҙә бирә. Зөһрә һығылып илай-илай тағы ялбара:

- Зинһар, ал инде мине үҙеңә, ал!..

Шул саҡ Ай яҡтырып китә лә, нурын һуҙып, ҡыҙҙы үҙенә тартып ала.

Фольклорсылар ҡарашынса, риүәйәт боронғо ырымышаныуҙар нигеҙендә тыуған. Ата- бабаларыбыҙ Күк есеме Айҙы изгеләштергән, яңы Ай күргәндә теләктәр теләгән, Айға мөрәжәғәт итеп, ырым һүҙҙәре әйткән. Һәм тиктәҫкә генә түгелдер... Ә етеш тормошондо мөрхәтһенмәй төбәп Күккә өндәшеү ниндәй хәлгә төшөрә?.. Уйландыра, тулғандыра... Раймандың яҙмышы ла уйсан ирҙәрҙе уйҙарға, уттарға һала.

Райман ырым-ышаныуҙар, ғәҙәти булмаған күренештәр тураһында иғтибарҙы ылыҡтырып һөйләй, башҡорт халыҡ йырҙарын иһә тын ҡалып тыңларлыҡ итеп башҡара торғайны. Йәнтөйәге Бөрйәндә, Шүлгәнташ өҫтөндә арбарлыҡ ауаз менән йырлағаны гелән күҙ алдымда. Ҡыуаныска, әйткәнебеҙсә, халҡыбыҙҙың классик йырҙары әжәл көҫәүҙән алыҫ. Мәгәр Раймандың эфир тулҡындарында Мостай Кәрим һүҙҙәренә "Мин ҡабаттан тыуыр булһам" тигән йыры яңғырағас, йөрәгем жыу итеп ҡалды. Йыр, айырыуса ошо куплеты тетрәткес:

*Ал мине, Күк, Ай янында*
*Йондоҙ булып янайымсы?*
*Осҡан саҡта, ҡапыл һүнеп,*
*Ап-аҡ көлгә ҡалайымсы...*

Ошо һүҙҙәр артында ни тора? Был бит - үлем теләп, туранан-тура Күккә, илаһи көстәргә мөрәжәғәт итеү! Улай ғына түгел, ә ап-аҡ көлгә ҡалғансы яныуҙы һорау, үтенеү! Һис шикһеҙ, шиғыр кимәл йәһәтенән һүҙ тейҙергеһеҙ камил, һүрәтләнеше - йәнле, көслө! Ябай ғына кеүек күренгән һүҙҙәр эсенә тәрән мәғәнә йәшерелгән. Көйләп әйтелгән аят һымаҡ моңо, билдәле ритмда яңғырашы уны тағы ла ҡөҙрәтләндерә. Боронғо ырымдар ҙа шиғыр һымаҡ ритмлы бит. Йәненә уйып, Райман уны бөтә ҡөҙрәтен туплап, онотолоп, хәтәр кисерештәр менән үлтереп йырлай. Һәм юлда ла, күрәһең, ҡысҡырып йырлап, машинаһында елеп, осоп килгәндә, түңкәрелеп, шиғырҙағыса ҡапыл һүнә, яна... Шағир Әхмәр Үтәбай һөйләүенсә, ошо йырҙы өҙөлөп, өҙлөкһөҙ йырлаған тағы бер йәш ир балаһы менән өйөндә янып үлә.

- Отҡор кеше: "Ә ниңә һуң ошо йырҙың һүҙҙәрен ижад итеүсе, йәиһә уны башҡа башҡарыусы бәләгә тарымаған?" - тиер.

- Быға яуап әллә ни ҡатмарлы түгел, - тине Камил. - Һүҙҙәр тирбәлеш тыуҙырып, мәғлүмәт биреп, беҙҙе урап алған мөхиткә төрлө рәүештә йоғонто яһай. Уларҙың тәьҫире тәү сиратта хиссән, кисерешле сағылышҡа бәйле. Һүҙ менән ни теләйһең, шуны ҡылырға мөмкин: яңы, бәхетле ғүмер бүләк итергә, йәки рәнйетергә, аяҡтан йығырға, йән йәрәхәте һалырға, үлтерергә... Белгестәр асыҡлауынса, кешеләрҙең ритмы төрлөсә, һәр кем үҙ ритмында йәшәй. Шуға ла бер үк өндөң, шиғри һүҙҙең, мондоң йоғонтоһо, сағылышы ла төрлөсә. Шиғри ырым, үтенес бәғзе берәүҙең тормош ритмын бер илаһи мәлдә донъя, Йыһан тормошо ритмы менән тап килтереп, көслө тирбәлеш, яңғыраш, ҡайтарылыш тыуҙыра. Һүҙ магияһы Ғаләм менән тығыҙ бәйләнеш булдыра. Тәбиғәт көстәре, Хоҙай беҙ нимә теләйбеҙ, шуны биреүе лә, ҡарамағыбыҙҙа булғанын тартып алыуы ла ихтимал. Үкенес, күрәһең, Райман менән шундай хәл була, "Ал мине, Күк!" тигән ораны үҙенсәлекле рәүештә йыш, үтә лә хисле, йоғонтоло ҡабатланып, ғәмәлләшә.

- Ышандырҙың, ағай. - Илнур үҙе лә ҡомарланып китеп, белгәндәрен теҙҙе. - Магия күп нәмәгә һәләтле: тәбиғәт күренештәренә тәьҫир итергә, елгә, һыуға йоғонто яһарға, ямғыр яуҙырырға, ғәрәсәт, бәлә-ҡаза тыуҙырырға, малтыуарҙы ишәйтергә, ҙур уңыш алырға, кешегә бәхет, байман килтерергә, йөрәктәрҙә һөйөү уты ҡабыҙырға, шәфҡәтлелек уятырға, яуыз көстәрҙе, сирҙе ҡыуырға, яһиллыҡты, ҡан ағыуын туҡтатырға, аламалыҡты кирегә борорға... Борон бер ҙә юҡҡа ғына алғыш әйтмәгәндәр бит. Магик көс һүҙ ҡөҙрәте менән генә түгел, ә өн, моң тәьҫире менән дә үҙгәрә, ҡеүәтләнә. Көй, ырым, һүҙ ярҙамында йәнле һәм йәнһеҙ донъя менән идара итергә мөмкин. Ырым, өн-тауыш йәшерен көстәрҙе уятырға һәләтле. Уның ҡеүәте сикһеҙ. Тылсымлы ҡурай моңобоҙ хисләндерә лә, илаһамландыра ла, һауыҡтыра ла... "Ҡурай моңо" әкиәтендә атаһынан мираҫ ҡалған ҡурай менән Кинйә хикмәтле хәлдәр ҡыла. Егет ҡурайын алып тыжлатып өрөп ебәреүе була, ендәр терт итеп ҡала, көй сыға башлауға уларҙың эҙҙәре лә, еҫтәре лә ҡалмай. Шунан Кинйә хан һарайына барып, ауырыу ҡыҙының бүлмәһенә инеп, ҡуйынынан ҡурайын алып, моңло бер көй уйнап ебәрһә, ҡыҙ күҙҙәрен аса, икенсе көйҙө уйнауға тороп ултыра, өсөнсөһөнә иҙәнгә төшөп, кәүешен кейә һалып, көй ыңғайына бейегәндәй итеп йөрөй башлай. Ҡыҙҙы һауыҡтырған имдарыу ҡурай моңо була.




Ырым, һүҙ, моң магияһы - ул сәнғәт, остазлыҡ! Уның һөҙөмтәһе сихырсының, күрәҙәсенең, йырсының, ижадсының һәләтенә, ҡөҙрәтенә бәйле. Ырымлау, арбау, ялбарыу һүҙҙәре өс, ете, туғыҙ тапҡыр ҡабатланып, ҡеүәтлерәк тирбәлеш, тулҡын, яңрау тыуҙыра һәм торош, йәшәйеш туҡымаһын үҙгәртә. Күрәһегеҙ, мөғжизәләр бар икән шул донъяла.

## "Нурым төшөр"

Әңер ҙә төштө. Ырыҫйән уҙаман, баҙнат ҡылып, хушлашыу һүҙҙәрен әйтергә йөрьәт итте: "Еребеҙ, халҡыбыҙ яҙмышын уйлап, ифрат та ныҡ борсолдом. Янмаҫ саҡта ла яндым, көймәҫ саҡта ла көйҙөм, йөрәгемде ҡаҡшаттым. Бәғзеләр быны бар тип тә белмәне, шуның өсөн хатта үҙемде битәрләне. Шул тиклем яныуҙар, көл-күмергә ҡалыуҙар кәрәкмәйҙер ҙә. Иң тәүҙә балаларыңды, ҡатыныңды, йәғни ғаиләңде бәхетле итеү фарыздыр. Нисек кенә булмаһын, һис үкенесем юҡ, ғүмеремде мәғәнәле, фәһемле итеп үткәрҙем, кешеләргә тик яҡшылыҡ ҡына эшләнем. Һеҙ ҙә тик яҡшылыҡ ҡына ҡылығыҙ! Ҡәҙерлеләрем, ғүмер мәңгегә бирелмәй. Төшөмдә Өҫтән: "Һиңә ожмахта йәшәргә ваҡыт етте", - тигән хәбәр ҙә алдым. Күктән нурым да төшөр. Инде рухым менән йәннәткә әҙерләнәм. Йыназа уҡырға Аҡкүл муллаһын саҡырырһығыҙ"...

Был һөйләшеүгә ете көн үткәс, киске шәфәҡ алдынан Ырыҫйән уҙаман йәнә улдарын саҡырып алды һәм ҡурайҙа уйнауҙарын үтенде. Тирә-йүнде солғап, йәндәрҙе әүрәтеп, сихри моң эркелде. Тәбиғәт тауыштары, ел иҫеүе, ямғыр яуыуы, үләндәр һәм япраҡтар һелкенеүе, шишмәләр сылтырауы, ҡоштар һайрауы - һәммәһе лә Ырыҫйәндең рухы менән аһәңләшеп, күккә ашты...

Йылдың етенсе айы башланған ғына саҡ. Бөтә донъя йәм-йәшел, сәскәләр хуш еҫ бөркә, бал ҡорттары безелдәшә, ҡоштар сутылдаша. Кәкүк ҡысҡыра... Ырыҫйәнде әхирәткә оҙатырға тирә-яҡ ауылдарҙан да ырыуҙаштар килде, күптәр, хатта ир егеттәр ҙә, йәшерен генә күҙ йәштәрен һөрттө. Зыяратҡа инер алдынан дини йола атҡарып, Аҡкүл муллаһы:

- Ырыҫйән ағабыҙ ниндәй кеше ине? - тип һораны.

Яҡшы кеше, бик тә яҡшы кеше ине! - тигән һүҙҙәр яңғыраны.

- Эйе, Ырыҫйәнебеҙ, изге күңелле ырыуҙашыбыҙ, ғәжәп хозур мәлдә арабыҙҙан китте. Уның исеме оҙаҡ йылдар йөрәк түребеҙҙә һаҡланыр. Ҡөрьәндең йөрәге иһә - Йасин! Уны ҡәҙерлебеҙҙән ҡәҙерлебеҙгә бөтә нурым, йәмем, булмышым менән ихлас бағышлайым.

Башҡорт халыҡ йырҙарын иҫ китмәле оҫта башҡарыусы Аҡкүл муллаһы сүрәне ғәжәп яғымлы, наҙлы тауыш, хайран итмәле аһәң менән көйләп, бар ғәләмде арбаны, әсир итте. Йәндәргә үтеп ингән, әллә ҡайҙарға, алыҫ-алыҫтарға, күккә олғашҡан тетрәндергес моң тирбәлде лә тирбәлде.

Нишләйһең, айы еткән - айында, көнө еткән көнөндә үлә. Моңһоу, бик моңһоу ине Ырыҫйән уҙаман менән хушлашыу. Телдәрҙән алғыштар ағылды:

*Ауыр тупрағың еңел булһын!*
*Тар урының киң булһын!*
*Ҡара гүрең яҡты булһын!*
*Урының йәннәттә булһын!*
*Тыныс йоҡла, бәхил бул!..*

Уҙамандың аманаты буйынса ҡәберҙе тимер кәртә менән түгел, ә Урал таштары менән ураттылар. Дүрт мөйөшкә дүрт кеше ултыртып, Аҡкүл муллаһы тағы ла йыназа уҡыны, тәкбир әйтте, тағы ла күҙҙәрҙе йәшләндерҙе. Ә тирә-йүн, бер ни булмағандай, һаман да хозур, һаман да һоҡланғыс, арбағыс! Шул саҡ утыҙ биш йәштәр тирәһендәге Ғайсар иләҫләнеп, елкенеп китеп, әйтте лә һалды:

*Ниндәй йәмле,*
*ниндәй йәннәт,*
*Ятыуҙары булыр рәхәт.*
*Туғандарым, үлдениһәм,*
*Ҡуйырһығыҙ шунда фәҡәт.*

- Ауыҙыңдан ел алһын, улым! Һүҙ менән шаярмайҙар... Үлем менән шаярмайҙар... Йәп-йәш көйөңә зыяратта көфөр һүҙ һөйләп тораһың да баһа! Әжәл - аяҡ аҫтында. Фәрештәләрҙең "Әмин!" тигән сағына ғына тура килмәһен инде, - тип, бик ныҡ көйәләнде мулла.

Мәрхүм исеменә өйөндә йәнә аят уҡыттылар, хәйер өләштеләр, ҡәрҙәштәрҙе итле аш, төрлө тәм-том менән һыйланылар. Ололар: "Ырыҫйән - изге йән, артынан башҡаны саҡырмаҫ та ул, Ғайсар ғына хилаф һөйләп, Хоҙай алдында гонаһҡа батмаһа ярар ине", - тип, бошона-бошона таралыштылар.

Аҡкүл муллаһы ҡайтып барышлай күктән оҙоноҙон булып, берәүҙең өйөнә нур һуҙылғанын күрҙе һәм йөрәге өҙөлөп: "Аһ, теге ирҙең япрағы төштө", - тип әсенде. Шул мәлдә Ғайсарҙың ҡатыны ниҙер һиҙенеп, иренә ҡараны ла: "Йөҙөң һурылып киткәнсе, әйҙә, күл буйына барып, балаҫ йыуып киләйек", - тине.

Хәтфә кеүек сирәмгә һалып, биҙрәләп һыу ташып, балаҫты тап-таҙа итеп йыуҙылар. Кипкәнсе, үҙҙәре лә әллә нисә мәртәбә күлгә сумып, сафланып сыҡтылар. Ғайсар, йомшаҡ үләнгә һуҙылып, күккә ҡарап, болоттарҙы күҙәтеп, байтаҡ ятты, шунан ҡалҡып, һуңғы тапҡыр күргәндәй, тау-урмандарға бағып торҙо. Шул арала уны ҡалала эшләгән, ялға ҡайтҡан йәштәштәре урап алды.

- Арығанһың, ныҡ талсыҡҡанһың, буғай, төҫөң ҡасҡан, ҡобараң осҡан да баһа, - тип, ай-вайына ҡуймай, хәмер ҡойҙолар.

Ҡапыл әллә ҡайҙан күкһел ҡара болот килеп сыҡты. Көтмәгәндә, уйламағанда кинәт кенә тирә-яҡ ялт итеп ҡалды һәм... Ғайсар иптәштәренең күҙ алдында ергә ауҙы. "Ху-у-шығыҙ" тип шым ғына әйткәне һуңғы һүҙе булды. Ҡатыны әрнеп, әсенеп үкенде лә үкһене: "Ниңә генә күлгә төштөк?.. Ниңә генә?.. Ике балаң атаһыҙ ҡалды бит... Ике балаң..."

Бар ауыл шаҡ ҡатты. Зыяратта уйламай әйткәне шул уҡ көндө Ғайсарҙың алдына килде. Камил менән Илнур аталарының һүҙ зәхмәте тураһындағы әйткәндәрен уйлап, уның күҙ менән ҡаш араһында раҫланыуына ғәжәпләнде. Ниңә ғәжәпләнергә?.. Бәғзе ырымдар, ғәмәлдәр, һүҙҙәр йәһәт, бик йәһәт бойомға ашҡанын беләләр ҙә инде, беләләр. Аҡкүл муллаһының әйткәне иһә Ғаләмдән ҡайтауаз булып, ергә, кешеләргә фәһемле иҫкәрмә булып, йондоҙҙай атыла кеүек: һүҙ менән шаярмайҙар... Үлем менән шаярмайҙар...

**(Аҙағы. Башы 20-21-се һандарҙа).**

***✓ Бейек ҡалпаҡтарҙан башҡа, кейеҙҙән баҫылған тәпәшерәк ҡалпаҡтарҙы халыҡ бик яратып кейгән. Был баш кейемдәрен башҡорттар үҙҙәре туланан йәки кейеҙҙән баҫҡан, улар ҡара һәм аҡ төҫтә булған.***

*ӘЙҘӘГЕҘ, ФЕКЕР ҠОРАЙЫҠ!*

**Башҡорт халыҡ кейеменә ҡарата һуңғы ваҡытта күҙәтелгән ҡыҙыҡһыныу тураһында яҙғайныҡ инде. Район һәм республика күләмендә үткән саралар был фекерҙе ныҡлап раҫлай. Байрамдарҙа төрлө райондар һәм ауылдар ҡорған тирмә ихаталарында ниндәй генә кейем өлгөләре күрһәтелмәй. Тимәк, һаҡлана һәм үҫеш таба халҡыбыҙҙың кейем тегеү традициялары! Яҡын киләсәктә сәхнә өсөн кейем тегеүселәр ҙә халҡыбыҙҙың онотолоп барған милли кейем өлгөләрен файҙаланыр, ә байрамдарға ябай тамашасылар ҙа халыҡ кейеме кейеп йөрөй башлар, тигән ышаныс бар.**

# МИЛЛИ КЕЙЕМДӘ - МИЛЛИ ХОЛОҠ



## Ҡалпаҡ та ғына тигән баш кейеме...

Ҡасандыр бер райондың бейеү ансамбле өсөн костюм ижад иткәйнем. Заказ биргән етәксе эскиздарҙы оҡшатты, әммә егеттәр өсөн һайланған боронғо баш кейеме - ҡалпаҡты тектереүҙән ҡырҡа баш тартты. "Башҡорттар ундай баш кейеме киймәгән", тип аңлатты ул үҙенең ҡарарын. Уның урынына ул төлкө ҡойроҡло, һуңғы ваҡытта сәхнә кейеме булараҡ киң таралған, әммә башҡорттар бер ҡасан да киймәгән бүрек тектертте.

Үкенескә ҡаршы, бындай мәғлүмәтһеҙлек мәҙәниәт өлкәһендә эшләүселәрҙә лә осрап ҡуя. Шуға ла, бындай хәлдәр ҡабатланмаһын өсөн, был мәҡәләлә тап ҡалпаҡ тураһында һөйләмәксебеҙ.

Был баш кейеме Башҡортостанда кантонлыҡ системаһы ваҡытында башҡорт казактарының обмундированиеһына ингән. "Башҡорттарҙың хәрби кейеме күк йәки аҡ төҫтәге тула бишмәттән, шул уҡ төҫтәге, яҫы ҡыҙыл лампаслы киң салбар, тирәстәре ике яҡтан, ҡолаҡ тапҡырынан айырып күтәреп бөкләп ҡуйылған бейек аҡ ҡалпаҡ, ҡайыш, йылҡы тиреһенән тегелгән күркәмһеҙ, әммә бик уңайлы, бер пары бер йылға етерлек итектән торған", - тип яҙа В.М. Черемшанский. Бындай ҡалпаҡтарҙы туланан йәки кейеҙҙән теккәндәр һәм уларҙы күбеһенсә хәрбиҙәр, дәүләт хеҙмәте башҡарыусылар һәм почта ташыусылар кейгән. Уларҙың формалары төрлө булған. Айыра тирәсле бейек ҡалпаҡтарҙан башҡа, кейеҙҙән баҫылған, тирәсе тоташ, тәпәшерәк ҡалпаҡтарҙы халыҡ бик яратып кейгән. Был баш кейемдәрен башҡорттар үҙҙәре туланан йәки кейеҙҙән баҫҡан, улар ҡара һәм аҡ төҫтә булған, һәм формаһы менән заманса эшләпәне хәтерләтә. Тимәк, кейеҙ эшләпә - күрше халыҡтарҙан үҙләштерелгән баш кейеме түгел, ә боронғо милли кейем, тик исеме юғалып, урыҫтарҙан "эшләпә" тигән атама күскән.

Ҡалпаҡтар араһында иң ҡупшылары төҫлө бәрхәттән йәки туланан тегелгән, йәиһә туланан тегелеп, өҫтөнән затлы туҡыма менән көпләнгән. Ҡалпаҡтың башы дүрт ҡыйыҡтан ҡоршап тегелгән, уҡа менән биҙәлгән. Бындай ҡалпаҡтар тағы ла матурыраҡ күренһен, бейегерәк ҡалҡып торһон өсөн уның аҫтынан түбәтәй йәки кәпәс тә кейер булғандар. Уларҙы абруйлы, күренекле кешеләр: кантон башлыҡтары, старшиналар кейгән, ҡиммәтле туҡыманан тегелгән был ҡалпаҡтар дәрәжә билгеһе булып торған.

Формаһы менән башҡорт ҡалпағына оҡшашыраҡ баш кейемдәре башҡа халыҡтарҙа, мәҫәлән, ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙҙарҙа осрай, әммә уларҙың, был халыҡтарҙың йәшәү шарттарына ярашлы, мөһим айырмалары бар. Ҡалпаҡты ҡаҙаҡтар ҙа кейә, ә беҙҙең халыҡта ул онотолған, тимәк, ул ҡаҙаҡ баш кейеме, тигәнерәк фекер - төптө яңылыш. Мәҫәлән, башҡорттарҙа ла, татарҙарҙа ла киң таралған түбәтәй, татар сәхнә кейемендә йыш ҡулланылғанлыҡтан, бер заман ул татар милли кейеме булып ҡына ҡабул ителә башланы, башҡорт сәхнәһенән бөтөнләй тиерлек юғалды. Шул рәүешле халҡыбыҙҙың бик күп ҡомартҡыларының юғалып бөтөүе лә ихтимал.

Халыҡ кейеме көндәлек кейеү өсөн бик ҡулай. Шул уҡ ҡалпаҡ - йәй көндәрендә ҡояштан, елдән һаҡлай, ни өсөн уны тегеп киймәҫкә?

**Таңсулпан БУРАҠАЕВА.**





*ӘҘИП ҺҮҘЕ*

# МӨХӘББӘТЛЕ, МӘРХӘМӘТЛЕ ЙЫЛДАР

**Мөхәббәт, ғаилә ныҡлығы, тоғролоҡ тураһындағы уйҙар кешене ғүмере буйына әйҙәп, йәиһә эҙәрлекләп баралыр ул ... Әйҙәп бара, әгәр ғаилә ныҡлы һәм тоғролоҡло булһа. Эҙәрлекләй, әгәр ғаилә ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында тарҡалһа (хыянат, бер - береңде хөрмәт итмәү һ.б.). Минеңсә, ғаилә ныҡлығы бала саҡтан уҡ, ата-әсә ояһында тамырлана, бәлки ул әсә ҡарынында һинең намыҫыңа һалыналыр...**

Мәктәптә уҡыған йылдарҙан бәләкәй генә бер ваҡиға. Күҙем төшкән ҡыҙ менән бер партала ултырып белем алабыҙ. Ғашиҡ булыуымды әйтергә оялып, уға мөхәббәткә арналған шиғырҙар яҙып, дуҫ ҡыҙы аша тапшырам. Ул да миңә яуап хаты ебәрә... Һәм беҙ киске уйындарҙа осраша башлайбыҙ. Шундай саҡтарҙа ла мин уны ҡултыҡларға йәиһә ҡулынан тоторға ояла инем, ҡурҡытырмын кеүек тойола ине... Тәүге мөхәббәтем шулай саф көйөнсә ҡалды һәм, ологайғас, шиғырға әйләнде:

*Мәрхәмәтле йылдар*
*Иреп китәм, иҫтәремә төшһә,*
*Мөхәббәттең ипле ҡыҙ сағы...*
*Яңғыҙ ҡалам кеше араһында*
*Һүнеп ҡуйһа хәтер усағы.*
*Бер синыфта бергә белем алып,*
*Ҡурҡытыуҙан уны тыйылып,*
*Хаттар яҙҙым уға зәңгәр күккә,*
*Аҡ болотҡа ғына һыйынып...*
*Ниндәй матур булған беҙҙең йәшлек,*
*Ниндәй изге булған мөхәббәт!*
*Ул йылытҡан, ул балҡытҡан беҙҙе -*
*Күңелдәрҙә булған мәрхәмәт.*
*Мин шуларҙы уйлап иҫкә алам*
*Бала саҡты, йәшлек йылдарын...*
*Мөхәббәтле, мәрхәмәтле йылдар*
*Биҙәп тора ғүмерем юлдарын.*

Оло тормош юлына аяҡ баҫҡас та, уға саҡлы ла, ыңғай һәм кире күренештәргә шаһит булынды. Кемдәрҙер яратышып ғаилә ҡоралар ҙа, һуңыраҡ икеһенең береһе хыянат итеү арҡаһында айырылышалар. Әлбиттә, бында эскелек, берен-бере хөрмәт итмәү кеүек сәбәптәр ҙә булырға мөмкин.

Мин үҙем ҡатыныма үлеп ғашиҡ булып өйләндем, бергә йәшәгән саҡта уға бер ваҡытта ла хыянат итмәнем. Ҡайһы берәүҙәрҙең ҡатындарына даими рәүештә хыянат итеүенә иҫ-аҡылым китә ине. "Әллә бер мин генә шундай "ауырыу" кешеменме?" тигән уйҙарым да була торғайны, һуңыраҡ үҙем кеүектәрҙең күп булыуын да аңланым... Ҡатынымды үлеп ратһам да, ғаиләмде тотороҡло итә алманым... Айырылыштыҡ, ул икенсегә тормошҡа сыҡты, мин яңғыҙ ҡалдым, ләкин беҙ бөгөнгө көндә лә дуҫ йәшәйбеҙ, сөнки беҙҙе берләштереүсе улыбыҙҙың бынамын тигән ғаиләһе, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ бар... Ҡатыным менән бер-беребеҙҙе ологайғас ҡына аңланыҡ, тик... Беҙҙең поезд киткәйне инде.

Йәштәргә әйтер һүҙем шул: ғаилә ҡорғанһығыҙ икән, уны нисек кенә булһа ла һаҡларға һәм яҡларға кәрәк. Ғаилә ҡорғансы, ратыу беренсе планда булһа, ғаилә ҡороп, бала тыуғас, бер-береңде хөрмәт итеү алғы планға сығырға тейеш! Был - бәхетегеҙҙең нигеҙе!

*Бәхетле лә, ҡайғылы ла саҡтар булды,*
*Тик уларҙы хәтеремдә һаҡламайым.*
*Яңылары килә тора, китә тора,*
*Уларҙың да елкәһенә атланмайым.*
*Бәхетте лә, ҡайғыны ла үҙем табам,*
*Ауыҙ бешһә, икенсегә өрөп ҡабам.*
*Аҡыллыға ишаралы урындарға,*
*Бәхет тапҡан диуаналай, тороп сабам...*
*Шулай үтте бик күп йылдар, үкенмәйем,*
*Ҡайтарығыҙ йәшлекте тип үтенмәйем,*
*Бөтөнөһө күрәсәккә бирелгәндер,*
*Ҡайғыларым, шатлыҡтарым, бәхетем дә*
*Аллаһының рәхмәтенә төрөнгәндер,*
*Шуға донъя матур булып күренәлер...*

**Зөфәр ВӘЛИТ,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

✔ *Һаулыҡ булһа, эш тә, аш та була. Сәләмәтлекте һаҡлау өсөн аҡса эшләргә тип түгел, аҡса эшләү өсөн сәләмәтлекте һаҡларға кәрәк, тигән ҡараштан сығып эш итергә кәрәк.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛАЛАРҒА...

## бәләкәй һауыт

■ Рәсәйҙә һимеҙлек менән яфаланыусы балалар проблемаһы, мәсәлән, Америка Ҡушма Штаттары менән сағыштырғанда, ул тиклем киҫкен тормай. АҠШ-та балаларҙың 20 процентына, ә өлкән йәштәге кешеләрҙең өстән бер өлөшөнә ҡуйыла быңдай диагноз. Балаларҙың һимеҙлеге - йөрәк, яман шеш һәм башҡа сирҙәр һөҙөмтәһендә тыуа, социаль һәм эмоциональ сәбәптәр тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Белгестәр әйтеүенсә, бөгөн заман йәштәре ата-әсәләренән алда үлгән тәүге быуын булыуға дәғүә итә. Күптән түгел "Педиатрия" журналында яңы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе баҫылды. Белгестәр балаларға ризыкты бәләкәй тәрилкәләргә һалып бирергә тәҡдим итә. Филадельфия мәктәбенең беренсе класс уҡыусыларына ҙур һәм бәләкәй тәрелкалар тәҡдим иткәндәр, улар унда аҙыкты үҙҙәре һалып алған. Ҙурыраҡ тәрилкәне һайлаусылар күберәк ашауы асыкланған. Бының менән һимеҙлекте дауалап булмаясаҡ, шулай ҙа тәҡдим ителгән ысул был йүнәлештә тәүге аҙым буласаҡ, ти ғалимдар.

■ Рио-де-Жанейро дәүләт университеты тикшеренеүселәре кунжутка бай ризыктарҙы күберәк ашарға тәҡдим итә. Улар организмдың әселәнеүенә юл ҡуймай. Ғалимдар, гипертония, 2 типлы диабет сирләләрҙең әселәнеү маркеры кимәленә кунжут ҡулланыуҙың тәьсирен тикшергән. Асыҡланыуынса, кунжут ашағандан һуң организмда антиоксидантар кимәле күтәрелгән, әселәнеү кимәле түбәнәйгән.

■ Экзема - тиренең хроник инфекцион булмаған ауырыуы. Сирҙең барлыҡҡа килеүенә тышҡы факторҙар ҙа тәьсир итә ала, ти белгестәр. Лондон колледжы университеты ғалимдары Бөйөк Британияла йәшәгән 1300 өс айлыҡ сабыйҙы тикшергән. Белгестәр һыуҙың ҡатылығы, ундағы хлорҙың концентрацияһы, тиренең һаҡланыу үҙенсәлектәре, экзема араһында бәйләнеште ҡараған. Һыуҙың ҡатылығы экзема хәүефен 87 процентҡа арттырған. Хлорҙың кимәле һөҙөмтәгә йоғонто яһамаған.

■ Джорджтаун университеты хеҙмәткәрҙәре иҫәпләүенсә, ҡайһы параметрҙар буйынса бала тыуыуы өсөн буласаҡ атайҙың биологик йәше әсәйҙекенә ҡарағанда ла мөһимерәк. Шуға ла билдәле бер йәшкә тиклем атай булып өлгөрөргә кәрәк, ти улар. Атай кеше 40 йәште үтһә, баланың ауэтизм менән тыуыу ихтималлығы арта икән. Шуға ла 40 йәшкә тиклемге арауыҡ иң яҡшыһы һанала. Шулай уҡ тыумыштан килгән нәҫел дефекттары, шизофренияның юғары кимәле лә буласаҡ атайҙың йәше менән бәйле. Әгәр ҙә ул алкоголле эсемлектәр ярата икән, яңы тыуған баланың ауырлығы нормаға тулмауы ихтимал. Ҡатын-ҡыҙҙарға бала табыу өсөн иң оптималь йәш - 25-тән 35 йәшкә тиклем, ти Цюрих университеты ғалимдары.

■ Белгестәр сәләмәтлек өсөн зыянлы булған бер нисә тәр кейем-һалым һәм аксессуар билдәләй. Уларҙың береһе - тар джинсылар. Ул ҡан әйләнешен боҙа, һейҙек-ҡыуыҡ системаһы сирҙәренә алып килә. Боттоң эске яғынан үткән нервыларҙы ҡыҫа, һөҙөмтәлә аяҡтар һыҙлай башлауы бар. Шулай уҡ сифатһыҙ бижутерия ла аллергияға алып килеүе ихтимал. Кедылар ҙа һаулыҡҡа насар йоғонто яһай, ти улар. Даими кеды кейеп йөрөүселәрҙә айыу табан сире барлыҡҡа килә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ЭШ ТӘ, АШ ТА БУЛА...

## һаулыҡ булһа

**5-се ҡала клиник дауаханаһы быltыр үҙенең 55 йыллығын билдәләне. Ул үҙәктә - Совет районы территорияһында - урынлашҡанлыҡтан, ҡала халҡында ҙур һорау менән файҙалана һәм 46 мең кешегә медицина ярҙамы күрһәтә. Шулай уҡ дауахана ҡарамағында травмпункт, ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы бар. Улар ҡаланың көньяҡ өлөшө халҡын, дөйөм алғанда йылына 300 меңдән ашыу кешене хеҙмәтләндерә. Быйылдан башлап дауалау учреждениеһына тағы бер структураны - 40-сы поликлиниканы ҡушалар. Дауахана эшмәкәрлегенең төп йүнәләштәре һәм башҡа мәсьәләләр буйынса һөйләүен һорап, уның баш табибы Андрей ПАЛТУСОВҡа мөрәжәғәт иттек.**



➔ **Структура үҙгәрештәренән тыш, тағы ниндәй үҙгәрештәр кисерҙегеҙ?**

- Тәү сиратта, беҙ дауахананы реабилитация йыһаздары менән тулыландырабыҙ. Травмпунктта рентген ҡорамалдарын ремонтланыҡ һәм шунда уҡ йәрәхәт алған ауырыуҙарҙы реабилитациялауҙы ойоштороrға ниәтләйбеҙ. Сөнки бөгөн тотош республикала, шул иҫәптән Өфөлә травматология профилендәге ауырыуҙарға реабилитация үткәреү мөһим мәсьәлә. Был сара теге йәки был ағзаһын һындырғандан, быуын эндопротезлауҙарынан һуң дауаланыуҙы дауам итеүҙе үҙ эсенә ала. Был курсҡа массаж, ҡулдарҙы, аяҡтарҙы аппараттар менән дауалау ҙа инә. Шулай уҡ парафин, батҡаҡ менән дауалауҙы ла ғәмәлгә индерергә уйлайбыҙ.

➔ **Һеҙ етәкләгән дауахана мейеләге ҡан әйләнешенең киҫкен боҙолоуын кисереүсе ауырыуҙар өсөн дә реабилитация үҙәге булып тора. Ошо бөгөн киң таралған инсульт мәсьәләһенә лә бер аҙ туҡталып, аңлатып китмәҫһегеҙме?**

- Инсульт - күпселек осраҡта кешене инвалидлыҡҡа килтергән, ҡайһы берҙә шунда уҡ үлтергән бик ауыр сир. Мейелә ҡан тамырҙары тығылыуы мейе туҡымаһы инфарктына килтерә. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда бындай сирлеләргә өс кимәлле медицина ярҙамы күрһәтеү системаһы булдырылған. Уларҙың тәүгеһе - коронар синдром, мейелә ҡан тамырҙары әйләнешенең киҫкен боҙолоуы осрағында ярҙам күрһәтеүсе ҡан тамырҙары үҙәктәре. Республика буйынса улар бихисап, аныҡлап әйткәндә, неврология бүлектәре ошо эште башҡара ла инде. Ошо беренсе звенола 20-30 көн дауаланыу үтеүселәр тура реабилитация үҙәктәренә килтерелә. Бында улар һөйләшергә, атларға, үҙен хеҙмәтләндерергә өйрәнә. Ҡайһы берҙә бик ауыр хәлле, түшәктә ятыусыларҙы ҡабул итәбеҙ. Беҙҙең үҙәк уларҙы социаль тормошҡа яраҡлашырға ярҙам итә. Был бик оҙайлы, мөһим, кәрәкле процесс. Логопедтар, неврологтар, реабилитологтар, дауалау физкультураһы белгестәре командаһының комплекслы фиҙакәр эшмәкәрлеге арҡаһында пациенттар аяҡҡа баҫа, дөрөҫөн әйткәндә, яңынан йәшәргә өйрәнә. Йылына 400-600 шундай ауырыуҙы ҡабул итәбеҙ. Кемгәлер ҡабаттан реабилитация талап ителһә, улар ҡабаттан беҙгә килә.

➔ **Һуңғы йылдарҙа төрлө ауырыу осраҡтары күбәйә. Был яңы сирҙәр барлыҡҡа килеүҙәнме, әллә икенсе сәбәптәр бармы?**

- Тәбиғәттә булған һәм быға тиклем асыҡланған сирҙәрҙән башҡа яңы ауырыуҙар юҡ. Бары тик яңы технологиялар нигеҙендә яңы диагностика ҡорамалдары эшләнә һәм улар ярҙамында ентекле тикшереү үткәреп, сирҙәр иртә стадияһында асыҡлана. Был ниндәйҙер ауырыуҙың киҫкенләшеүҙәр ихтималлығын иҫкәртеү мөмкинлеген бирә. Бөгөн медицина фәне генә түгел, медицина техникаһы ла бик ныҡ үҫешкән.

Икенсе яҡтан, халыҡ та үҙенең сәләмәтлегенә иғтибарлы була башланы. Күптән түгел генә тергеҙелгән диспансерлаштырыу һөҙөмтәһендә ул үҙе ошо процедураны үтеп, нимә борсоғанын табипҡа әйтеп, тулы тикшереү үтә ала. Ә кем һаулығына битараф түгел, ул балаларының да, туғандарының да, тоҡомоноң да һаулығын хәстәрләй. Шуға күрә мин халыҡты сәләмәтлеге өсөн яуаплылыҡты табиптарға ғына йөкмәтергә түгел, ә үҙ ҡулына алырға, сәләмәт тормош алып барырға, табиптарға сир киҫкенләшкәс түгел, уны асыҡлағанға тиклем мөрәжәғәт итергә саҡырам. Юҡһа, ҡолағансы йөрөйбеҙ ҙә, һуңынан бөтөн бәләне табиптарға япһарырға тырышабыҙ. Табиптар - дошман түгел, улар һеҙҙең дуҫығыҙ. Шуға ла сирҙе барлыҡҡа килгәндән күпкә алда, бергәләп профилактика үткәргәндә, киҫкенләшеүҙәргә юл ҡуймағанда ғына ниндәйҙер һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин.

➔ **Әйткәндәй, профилактика эше һеҙҙә нисек ҡуйылған, нисек ойошторолған?**

- Айырым бүлек бар, унда медицина һәм социаль профилактика эштәре алып барыла. Медицина профилактикаһы йүнәлешендә ойошмалар, предприятиелар, йәғни коллективтар менән эшләйбеҙ. Уларға күсмә медосмотрҙар үткәрәбеҙ, анализдар алабыҙ, айырым сирҙәр буйынса анкета һорауҙарына яуаптар нигеҙендә табип ниндәй тикшереүҙәр үтергә кәрәклеген билдәләй, онкомаркерға, холестеринға, шәкәргә ҡан тапшырыу ойоштораbыҙ. Ҡайһы бер предприятиеларҙа зыянлылыҡ ҙур, улар менән мотлаҡ профилактика эштәре алып барырға кәрәк. Бигерәк тә хәҙер, бөтөн нәмә компьютерлаштырылған заманда, хәрәкәт аҙ, шуға ла йөрәк-ҡан тамырҙары, быуындар ауыртыуы менән сирләүселәр күп. Быға юл ҡуймаҫ өсөн ваҡытында профилактика үткәреп, хеҙмәт барышында нимәнелер үҙгәртергә мөмкин.

Социаль профилактикаға килгәндә, ул - хеҙмәт урынындағы шарттар, эш һәм ял нисбәте, сәләмәт тормош алып барыу, спорт менән шөғөлләнеү, тәмәкенән, спиртлы эсемлектәр ҡулланыуҙан, асоциаль тормоштан баш тартыу.

➔ **Әлеге ваҡытта йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан вафат булыусылар һаны хатта яман шештән үлеүселәр статистикаһын да уҙып китә...**

- Бында бик күп сәбәптәр йоғонто яһай. Тормош рәүеше лә, стрестар ҙа, хәрәкәттең кәмеүе, спортҡа иғтибар бирмәү, насар йоғонтоларға бирелеү, инфарктар, инсульттар - һанай китһәң, бик күп. Шуға ла Республика Башлығы ла, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ла бындай хәл-торошҡа борсолоу белдерә һәм уны булдырмау буйынса әүҙем эш алып бара, ә беҙ, табиптар, үҙ сиратыбыҙҙа профилактик эшмәкәрлекте киң йәйелдерәбеҙ. Шулай ҙа иң мөһиме - пациенттарҙың битарафлығы, тиер инем. Улар оҙаҡ йылдар дауамында иғтибар итмәйенсә, унан сәнсте, бынан ҡыҫты, тегенән ауыртты, ярай, иртәгә ҡаралырға барырмын әле, тип ваҡытты һуҙып йөрөй бирә. Мөрәжәғәт иткәндә инде табиптар патология менән күҙгә-күҙ осраша. Шуға күрә, хатта артыҡ иғтибар талап итмәгән уңайһыҙлыҡ та - хәл юҡлығы, нимәлер ауыртыуы - шунда уҡ табипҡа мөрәжәғәт итергә сәбәп булырға тейеш. Әйе, бөгөнгө көрсөк осоронда һәр кем эш урынында һуң булмаһын, ғаиләмде ҡарайым, аҡса эшләйем, тип тырыша. Әммә һәр кем иң мөһиме - һаулыҡ, һаулыҡ булһа, эш тә, аш та була икәнен аңларға тейеш. Сәләмәтлекте һаҡлау өсөн аҡса эшләргә тип түгел, аҡса эшләү өсөн сәләмәтлекте һаҡларға кәрәк, тигән ҡараштан сығып эш итергә кәрәк. Бындай ҡараш булғанда, табиптар, ысынлап та ярҙам итә аласаҡ, ә инде кеше табиптар ярҙам итә алмаҫтай һуңғы стадияла мөрәжәғәт иткәндә, әлбиттә, үлем осраҡтары күп буласаҡ.

➔ **Халыҡ медицинаһына ҡарашығыҙ нисек?**

- Әгәр традицион медицинанан баш тартмағанда, халыҡ медицинаһы - ярҙам ғына. Табиптарҙың ҡайһы бер осраҡтарҙа үҙҙәре үк халыҡ медицинаһын тәҡдим итеүе сер түгел. Сөнки халыҡ медицинаһы ярҙамында организмды нығытырға мөмкин, әммә барыбер ҙә был эште табип кәңәше менән эшләргә кәрәк. Шул ваҡытта ғына ул файҙа килтерәсәк.

➔ **Табип һөнәре һеҙҙең өсөн нимә ул?**

- Ул - минең йәшәү рәүешем. Мин ошо тормошто һайлағанмын һәм бына инде 18 йыл уның менән йәшәйем. Табип булыуы өсөн иң мөһиме - кеше хәлен аңлай белеү. Уларҙы аңлау, уларға тейешле ярҙам күрһәтеү өсөн тәү сиратта үҙеңде, эшеңде яратырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта табип - ул башҡалар тиңләшергә тырышҡан, сәләмәт тормош алып барған, кейемендә лә, тормошонда ла өлгө эталоны булырға тейеш. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙең коллективта берәү ҙә тәмәке тартмай, сәләмәт тормош алып бара. Был коллективты ғына түгел, пациенттарҙы ла тәртиптә тора. Әйтеп китеүемсә, медпрофилактика бүлегендә хеҙмәткәрҙәр өсөн фитнес менән шөғөлләнеүҙе ойошторҙоҡ, үҙебеҙҙә лә, дауаханалар-ара ла, ҡаланың башҡа социаль учреждениеларының ҡатнашлығында ла төрлө спорт уйындары буйынса спартакиадалар үткәрәбеҙ. Сөнки сәләмәт тормош рәүеше - беҙҙең өсөн беренсе урында тора.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

*✓ Мөхәббәт - ул илаһи тартылыу көсө. Әгәр ҙә ул йөрәккә юл тапһа, йөрәкте Аллаһы Тәғәлә менән тоташтыра. Мөхәббәте булмаған йөрәк - йөрәк түгел, шул уҡ ваҡытта мөхәббәт һәр бер йөрәккә килмәй.*



ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ

**"Киске Өфө" гәзитендә былтыр йыландар, уларҙың ҡылыҡ-холоҡтары тураһында һөйләшеп алғайныҡ. Әле шул теманы тағы дауам иткем килә. Яҙ - йыландың йоҡонан уяныу осоро. Был миҙгелде һәр йән эйәһе көтөп ала, яҙғы ҡояшта тыныслыҡ табырға, йәшәргә ниәтләнә.**

# ТАҒЫ ЛА ЙЫЛАНДАР ХАҠЫНДА



Йылан япраҡтарға уранып, ағас тамыры ҡыуышында, таш аҫтында, өңөлгән яр тишегендә ышыҡланып ҡышлай. Яҙғы ҡояш йылыта башлау менән улар ҙа уяна, улар был мәлгә ябыҡҡан, йонсоған, ас була. Астың асыуы яман тигәндәй, бик уҫал улар был мәлдә, үҙҙәре төртөлгән һәр йән эйәһенә ташланырға әҙерҙәр. 15-20 көн үтеүгә улар хәлләнә, шәберәк хәрәкәтләнәләр. Тәрән соҡорҙа мыжғыйҙар, әйтерһең дә, дегет ҡайнай. Ул мәлдә улар күҙенә салынмауың, ситтән үтеп китеүең хәйерле.

Ҡаты үләнле, ҡорһаҡ аҫты тиреһен йыртырҙай урындағы йыландар, һуҙылып, ҡойроҡ осон тешләп, үлән һабаҡтары өҫтөнән тәгәрмәс кеүек йә һыулы ергә, йә туйҙарына тәгәрәйҙәр. Уларҙы тәгәрләк йылан тип йөрөтәләр. Күрһәң, янтайып ҡалырға кәрәк - килеп бәрелһә, сағա, ағыуын күп ебәрә. Туй осоро бөткәс, һәр йылан үҙ төйәгенә йүнәлә. Инә йыландар йәйге селләлә бәпесләй. Урмандағылары ағас ботағына һалынып тыуҙыра. Һәр бала йылан ергә төшә һәм үҙ йүнен үҙе күрә башлай, тирә-яҡҡа тарала.

Һыу буйында йәшәүсе йыландар 100-150 аҙым тирәһе түбән ағалар һәм һыу эсендә бәпесләйҙәр. Тыуған балаһы һыу ыңғайына ағып китә, үҙ юлын таба. Әгәр шулай бәпесләмәһәләр, тыуған бер балаһы йыландың үҙенә йәбешә, уны ашай. Шулай итеп йыландар үҙҙәрен дә ҡотҡара, тоҡомон да арттыра, һаҡлай. Тик уларға яҡын бармаҫҡа кәрәк, шул саҡта кешегә лә зыян итмәйҙәр.

Белорет яғынан барғанда уң яҡта Өфөгә терәлеп тигәндәй торған Йыланлытау бар. Беҙ йәш саҡта шунан үткәндә йыландарҙың күплегенә аптырай инек. Машина ул мәлдә аҙ булғас, йыландар ҙа тапалмаған инде. Әле лә Өфөгә йөрөүселәрҙән һораштырам: йә берәүҙе күрәләр, йә бөтөнләй юҡ тиҙәр. Тапала торғас, улар ҙа бөтөп бара, күрәһең. Хәҙер йәнлектәр генә түгел, йыландар ҙа һирәк күренә, аулағыраҡ ергә китеп бөткәндәр. Кешеләрҙең тәбиғәткә мөнәсәбәтенең һөҙөмтәһе инде был. Тәбиғәт мөғжизәһен һаҡлау ҙа, унан һаҡланыу ҙа үҙебеҙҙән тора.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

## ЙӨРӘК

31. Интеллектты йөрәк менән сағыштырыу. Йөрәктән айырмалы рәүештә интеллект аңлау һәләте менән бәйле, шуға күрә лә ул Аллаһы Тәғәлә ихтыярына буйһонмай. "Зирәклек - Аллаға табыныусының берҙән-бер маҡсаты", тигән бәйғәмбәр.

32. Тәхетте йөрәк менән сағыштырыу. "Аллаһы Тәғәләгә ышаныусы кешенең йөрәге рәхимлек тәхете", тигән бәйғәмбәр.

33. Өс төрлө йөрәк була:

-шаһит йөрәк, йәғни Аллаһы Тәғәләгә илтеүсе ҡапҡаларҙың барлығына шаһит йөрәк;

-саф йөрәк, йәғни икеләнеүҙәрҙән азат, Аллаһы Тәғәләнең үҙендә йәшәүсе йөрәк;

-үкенеүсе йөрәк, йәғни үҙ гонаһын аңлап, Хоҙайға өндәшеүсе йөрәк. Үкенеүсе йөрәк - ул ғазаптар келәте.

34. Йөрәктең ете рухи кимәле бар:

- Күкрәк. Ул йөрәкте нәфсенән айырып һаҡлап тора. Күҙ ҡараһы өсөн күҙ ағы нисек кәрәк булһа, йөрәк өсөн күкрәк тә шул тиклем кәрәк. Йөрәккә төбәлгән һәр төрлө емерткес көстәр иң тәүҙә күкрәккә килеп һуғыла. Күкрәк өсөн - йөрәк, быуа өсөн - һыу. Йөрәк - тамыр йәки принцип, ә күкрәк - ботаҡ йәки һөҙөмтә.

- Йөрәк үҙе. Күҙ һуҡыр түгел, күкрәк аҫтындағы йөрәк һуҡыр.

- Йөрәк - Мөхәббәттең ижад урыны.

- Йөрәк - күреү урыны. Йөрәк күргән нәмәһендә яңылышмай.

- Йөрәк - Аллаһы Тәғәләгә мөхәббәт урыны. Ундай йөрәктә башҡаларға ҡарата мөхәббәт йәшәмәй.

- Йөрәктең үҙәге. Ул - ихласлыҡ, зирәклек сығанағы, Илаһи серҙәр һандығы. Йөрәктең үҙәгенә хатта фәрештәләр ҙә үтеп инә алмай.

- Йөрәктең Илаһиәт үҙәге. Ул - Аллаһы Тәғәлә урыны.

35. Йөрәккә мөнәсәбәте булған төш күреүҙәр. Әгәр ҙә кеше төшөндә көмөш күрһә, был - дөрөҫлөк, алтын - ихласлыҡ, ынйы - Аллаһы Тәғәләнең бөйөктәрҙән берәү генә булыуы, рубин - Илаһи зирәклек һәм ысын мөхәббәт, гәрәбә - йондоҙҙарҙы таныу, кристалл - матди донъя зирәклеге һәм шиғри оҫталыҡ, зөбәржәт - сафлыҡ, аҡыҡ - ҡыйыулыҡ символы һ.б. Күп осраҡта рубин, сапфир һәм аҡыҡ йөрәкте символлаштыра.

36. Йөрәкте таҙартыу. Таҙарынған һәм камиллашҡан йөрәктә Илаһилыҡтың барлыҡ билдә-ләре сағыла. Тик камиллашҡан, таҙарынған йө-рәк кенә тән ағзаһы булған йөрәктән рухи йөрәккә әүерелә. Йөрәк күҙе ябай күҙ менән күрмәгәнде күрә, йөрәк ҡолағы тынлыҡты ишетә, йөрәк танауы еҫһеҙҙе лә тоя. Йөрәкте таҙартыу уның күреү, ишетеү һәм һиҙеү ағзаларын таҙартыуҙы аңлата.

Йөрәкте таҙартыуҙың төрлө юлдары бар. Ҡайһы берәүҙәр нәфсеһе теләгәндең киреһен үтәп, үҙҙәренең холҡон үҙгәртеп ҡараны. Әммә холоҡтоң бер генә кире яғын үҙгәртеү өсөн дә тотош ғүмер талап ителә. Әгәр ҙә кеше саҡ ҡына онотолһа, нәфсе барыһын киренән ҡайтара. "Нәфсе - ул аждаһа, кем уны, үлгән, ти һуң?" тигән Руми. Ә суфыйҙар үҙ йөрәген матди донъянан, үҙ-үҙенән китеп кенә таҙарта алған. Кеше тик осраҡлы уй-фекерҙәрҙән ҡотолоп ҡына нәфсенән һәм Иблис мөхитенән сыға ала.

## РУХ

**Кешенең йөрәге - берҙәмлек һәм күп төрлөлөк араһындағы тигеҙлек ул. Әгәр ҙә унда теләктәр яугиры - нәфсе хакимлыҡ итһә, йөрәк ҡыйрала һәм тотҡонға эләгә. Әгәр ҙә инде мөхәббәт ғәскәре нәфсене ҡыуып сығара алһа, рух тантана итә. Рух бер нисә сифатҡа эйә:**

1. Рух - мөхәббәт урыны. Дуҫлыҡ өс баҫҡыстан тора: теләк - тән билгеһе, изгелек яратыу - йөрәк билгеһе һәм мөхәббәт - рух билгеһе. Теләк - нәфсенән, изгелек яратыу - йөрәктән, мөхәббәт рухтан ярала. Нәфсе - теләктән, йөрәк - изгелек яратыуҙан, ә рух мөхәббәттән азат түгел. Мөхәббәт - ул ғашиҡтар төйәге, ә ғашиҡтар - ғазаптар төйәге.

2. Рух билгеһе булған мөхәббәт өс төргә бүленә:

а) Ысын мөхәббәт - Аллаһы Тәғәләнең барлығын һәм берҙән-бер булыуын аңлаған һәм таныған дың мөхәббәте;

б) Иҫерек мөхәббәт - һөйөүҙән башын һәм тыныслығын юғалтҡан, теләк менән янған мөхәббәт. Шарап интеллектты еңһә - нәфсе иҫерә, яҡынлыҡ һиҙгерлекте еңһә - йөрәк иҫерә, эскерһеҙлек яҡынлыҡты еңһә - рух иҫерә;

в) Тормошта булмаған мөхәббәт - үҙ нәфсеһен еңгән, Аллаһы Тәғәләгә һыйынған, шул уҡ ваҡытта ике донъяла ла татылмаған һөйөү. Ике донъя ла ундайҙарға мөхәббәт вәғәҙәләй, әммә ул икеһендә лә был тойғоно татымай.

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Алтынсы сер: мөхәббәттең ыңғай көсө

Хәл-торош нисек кенә үҙгәрмәһен, тыныс булып ҡалығыҙ һәм яратығыҙ. Яратыу - ул бөтөн нәмәне еңеп сығыр көс. Әгәр кемдер һеҙгә ҡарата ғәҙел түгел икән, ундай кешене ғәфү итергә өйрәнегеҙ, сөнки ғәфү итә белеү - яратыуҙың айырылғыһыҙ өлөшө. Бындай хәл-торош тормошоғоҙға һабаҡ булараҡ килеп ингәнлеге менән килешегеҙ. Ошо тәжрибәне нисек йырып сығыуығыҙ ысын яратыуҙың асылын аңлайһығыҙмы, юҡмы икәнлегенә дәлил. Әгәр ғәфү итә алаһығыҙ икән, яҡшы. "Һөйөү дәресен" уңышлы үтәгеҙ - тимәк, яңы үрҙәр, именлек, байлыҡ, тыныслыҡ һәм үҙ-үҙегеҙҙе табаһығыҙ. Үҙегеҙ менән булған бөтөн нәмәне лә яратырға өйрәнегеҙ, сөнки тәжрибәгеҙ мөхәббәтте аңлауҙа үҫеү мөмкинлеге бирәсәк. Мөмкин тиклем йышыраҡ үҙ-үҙегеҙгә: "Мин яратыуҙы аңларға өйрәнәм", - тип ҡабатлағыҙ. Был тормошоғоҙҙо йөҙ тапҡырға байыраҡ итәсәк.

Мөхәббәттән мәхрүм күптәр күңелдәрендә күрә алмаусанлыҡ, көнләшеү туплап, башҡаларҙы тәнҡитләп һәм ғәйепләп йәшәй. Улар - негатив кешеләр. Башҡаларҙы түбәнһетеп, уларҙы йүнһеҙ, файҙаһыҙ кеше итеп күрһәтергә тырышалар һәм күптәр уларҙан ситләшә йәки бөтөнләй араларын өҙә. Негатив кешеләр мөхәббәттәре менән бүлешергә, кешенең эшен, һәләтен танырға теләмәйҙәр һәм маҡтау һүҙҙәрен әйтмәйҙәр, сөнки улар, нисек кенә емергес булмаһын, һәр саҡ үүҙҙәре уйлағанды һөйләргә тейеш, тип уйлайҙар. Үҙҙәренең һүҙ һөжүмен улар "консруктив тәнҡит", "ғәҙел мөнәсәбәттәр", "объектив баһа" тип атай. Уларҙың иң ҙур һәләте - башҡаларҙың йомшаҡ яҡтарын табып, шуға бармаҡ менән төртөп күрһәтеү. Матур һүҙҙәр менән мөрәжәғәт иткәндә үҫемлектәрҙең матур итеп үҫеүе һәм оҙаҡ итеп сәскә атыуы билдәле. Негатив һүҙ ишеткәндәре, киреһенсә, һулый йәки бөтөнләй ҡорой. Әгәр үҫемлектәргә шундай йоғонто яһала икән, икенсе кешегә ниндәй йоғонто яһауығыҙ хаҡында уйлағыҙ инде. Мөхәббәттең ыңғай Көсө алдағы тормош уңыштарығыҙҙы билдәләй. Бының өсөн һөҙөмтәгә өлгәшергә өйрәнергә кәрәк. Быны өс юл менән эшләп була: эште үҙеңә башҡарырға, эште башҡаларға ҡушырға йәки команданы йәлеп итергә һәм бер-береңә ярҙамлашырға. Беренсе ысул иң киң таралғаны, әммә бик сикле, сөнки һеҙҙе ошо эште башҡарыуға китәсәк ваҡыт һәм энергия күләме тотоп тора. Әгәр бөйөк шәхестәрҙең биографияһы менән танышһағыҙ, уларҙың башҡа кешеләрҙең тырышлығы ярҙамында камиллашып һәм үҫеп, юғары ҡаҙаныштар яулауына шаһит булырһығыҙ. Икенсе төрлө әйткәндә, улар йә ярҙам алып, йә ярҙам тәҡдим итеп, эш башҡарған.

Ярҙам күрһәтеү - уңыштың бик аҙ билдәле сере. Һеҙ, башҡаларға ярҙам итеп, үҙегеҙҙең эшегеҙҙең осона сығаһығыҙ. Әгәр етәксе, менеджер йәки хужа икәнһегеҙ, ҡул аҫтында эшләүселәргә ярҙам итеп, үҙегеҙҙең уңышҡа өлгәшәһегеҙ. Әгәр уҡытыусы икәнһегеҙ, уңышығыҙ уҡыусыларығыҙға юғары һөҙөмтәләргә өлгәшергә ярҙам итеүгә туранан-тура бәйле. Уңыш студенттарҙы уҡытыусыларға, үҙҙәренә түгел, ә талиптарға кәрәк нәмәне биргән өсөн килә. Әгәр беҙ башҡаларға ярҙам итергә өйрәнһәк, үҙебеҙҙең бөтөн мөнәсәбәттәрҙе нығыта аласаҡбыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**



## 30 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.05 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 01.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 1-я и 2-я серии. Детективный сериал(12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Аромат шиповника". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "На дальней заставе". 1-3 серии. Драматический сериал (12+).
23.55 "Честный детектив" (16+).
00.55 "Дуэль разведок. Россия - США". Фильм 3-й. "Иные. Сильные телом" (12+).
02.30 "Неотложка". Драматический сериал (12+).
03.25 "Пусть всегда буду я. Лев Ошанин".
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Учим башкирский язык"**
**10.15 "Городок АЮЯ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 17.45, 02.30 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Сейчас или никогда". Сериал (12+).**
**18.00 "Автограф" (12+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**23.00 "Неверлэнд". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.45 Ф.Буляков. "40 свечей у женщин" (12+).**

## 31 МАЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.20 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.20 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 02.25, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.30 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 3-я и 4-я серии (12+)
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Структура момента" (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Аромат шиповника". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "На дальней заставе". 4-6 серии (12+).
23.55 "Вести.doc" (16+).
01.40 "Химия нашего тела. Сахар", "Приключения тела. Испытание голодом". Док. фильмы (12+).
03.15 "Неотложка". Драматический сериал (12+).
04.15 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 15.45 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Без координат" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Фанташ" (0+).**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**16.45 "Сейчас или никогда". Сериал (12+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Маленький Николя". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 М.Мусифуллин. "Ночь, как вся жизнь" (12+).**

## 1 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 02.50, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.55 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Давай поженимся!" (16+).
19.30 "Практика". Сериал (12+).
20.30 "Время".
21.00 Футбол. Товарищеский матч. Сборная России - сборная Чехии. Прямой эфир из Австрии.
23.00 "Практика". 5-я и 6-я серии (12+).
24.00 "Вечерний Ургант" (16+).
00.35 Ночные новости.
00.50 "Политика" (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Аромат шиповника". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "На дальней заставе". 7-я и 8-я серии (12+).
22.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.40 "Заставы в океане. Возвращение", "Угрозы современного мира". Атомный краш-тест", "Угрозы современного мира. Атомная альтернатива" (12+).
02.50 "Неотложка". Драматический сериал (12+).
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Без координат" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Вот это кадр!" Концерт телеканала "Тамыр", посвященный Году российского кино.**
**16.45 "Сейчас или никогда". Сериал (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 Я счастлив, что моя мать жива". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Т.Каюмов. "Наследство" (12+).**

## 2 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 01.30 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.10, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 7-я и 8-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "На ночь глядя" (16+).
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Аромат шиповника". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "На дальней заставе". 9-я и 10-я серии. Драматический сериал (12+).
22.55 "Поединок" (12+).
00.40 "Офицеры", "Тайны Первой мировой войны: Великая война. Фронт русский. Фронт французский" (12+).
02.40 "Неотложка". Драматический сериал (12+).
03.40 "Комната смеха" (12+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Дети-герои" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Без координат" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Борсаҡ" (6+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.45 "История признания" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Сейчас или никогда". Сериал (12+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Малый бизнес" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Отпетые мошенники". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Интервью" (12+).**
**01.30 И.Юмагулов "Нэркэс" (12+).**

## 3 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.00 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Шансон года". Гала-концерт (16+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 "Мерилин Монро. Последний сеанс". Док. фильм (16+).
02.05 "Самозванцы". Комедия (16+).
05.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Аромат шиповника". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Юморина" (16+).
23.00 "Императрица и два маэстро". Концерт Ирины Аллегровой.
01.30 "Вальс-Бостон". Худ. фильм (12+).
03.35 "Сергей Герасимов. Богатырская симфония" (12+).
04.30 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Борсаҡ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Без координат" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Красная кнопка" (16+).**
**12.45 "Телелавка" (12+).**
**13.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**13.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Сулпылар" (6+).**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**15.45 "Смутное время. Инесса Арманд" (12+).**
**16.45 "Время башкирское" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**20.30 "ДОСААФ: Испытано на себе" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Очень опасная штучка". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Интервью" (12+).**
**01.30 Ф.Буляков. "Забытая молитва" (12+).**

## 4 ИЮНЯ
## СУББОТА,
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Плохой хороший человек". Худ. фильм.
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак". Кулинарное шоу (12+).
10.55 "Барбара Брыльска. "Мужчины не имеют шанса" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Теория заговора" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Ширли-мырли". Комедия (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.10 "Нас не догонят!" Праздничный концерт.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "МаксимМаксим" (16+).
00.10 "Форсаж-4". Боевик (16+).
02.10 "Гром и молния". Худ. фильм (16+).
04.00 "Модный приговор".
0500 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.10 "Город принял". Худ. фильм (12+).
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Денис Майданов" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.35 "Все сокровища мира". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Все сокровища мира". Продолжение сериала (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Городская рапсодия". 4 серии. Драматический сериал (12+).
00.55 "Поздняя любовь". Мелодрама (12+).
03.00 "Марш Турецкого-2". Сериал (12+).
04.40 "Комната смеха".

### БСТ

**07.30, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Со склонов Кокурико" (12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 Концерт детского народного театра танца "Браво" (0+).**
**19.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Дэвид Блейн: Реальность или магия".**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Легенды спорта" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Патруль времени". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости недели (на башк. яз.).**
**02.00 Н.Птушкина. "Плачу вперед".**

## 5 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.35, 06.10 "Барышня-крестьянка". Худ. фильм.
06.00 Новости.
07.50 "Армейский магазин".
08.20 "Смешарики. Пин-код".
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Следуй за мной".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Открытие Китая".
12.50 "Гости по воскресеньям".
13.45 "Ералаш".
14.05 "Дети Дон Кихота". Драма.
15.40 "Романовы" (12+).
17.45 "Достояние республики".
19.25 "Воскресное "Время".
21.00 Футбол. Товарищеский матч. Сборная России - Сборная Сербии. Прямой эфир из Монако.
23.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр.
00.10 "Ультиматум Борна". Боевик (16+).
02.15 "Соседи на тропе войны". Худ. фильм (18+).
04.00 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.20 "Очень верная жена". Худ. фильм (12+).
07.00 "Мульт утро".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.55 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
12.20 К Международному Дню защиты детей. Фестиваль детской художественной гимнастики "Алина".
14.00 "Вести".
14.20 "Сводная сестра". 4 серии. Драматический сериал (12+).
18.00 "Мой чужой ребенок". Мелодрама (16+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
00.55 "Охраняемые лица". Криминальный сериал (16+).
02.55 "Семь тайн Третьяковской галереи". Док. фильм.
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Лев Макс". Мультфильм (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай бакса" (12+).**
**09.30 "Легенды спорта" (12+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Автограф" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 Новости.**
**16.45 "Историческая среда" (12+).**
**17.15 "ДОСААФ: Испытано на себе" (12+).**
**17.30 "Бизнес-обзор" (12+).**
**17.45 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**18.00 "История признания" (12+).**
**18.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**18.30 "Космолузер". Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Дэвид Блейн: Реальность или магия".**
**20.30 "Байыҡ-2016" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (0+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Санта из Майами". Худ. фильм (18+).**
**02.45 Р.Киплинг. "Мы с тобой одной крови" (12+).**

✓ Балтырған һутын сей һәм эренле яраларҙы дауалау өсөн файҙаланалар. Хатта псориаз да бындай дауа алдында бирешә. Шулай уҡ был үлән менән астманы ла дауалайҙар. Тамырҙарын бауыр һәм һары ауырыуҙары булғанда ҡулланалар.



ЙӘШЕЛ ДАУАХАНА

**Бөгөн балтырғандың 42 төрө билдәле булһа ла, бары тик айырым төрҙәре генә ашарға яраҡлы, сөнки ул, дөйөм алғанда, ағыулы үсемлектәргә инә. Балтырған дымлы һәм яңы тупраҡты үҙ итә. Шуға ла таулы урындарҙа үҫә, бейеклеге бер метрға етә, бик һирәк 2,5 метр булыуы ла мөмкин. Был үсемлек июндән октябргә тиклем сәскә ата. Емештәре июль-сентябрҙә өлгөрә.**

# БАЛТЫРҒАН

Дауаланыуҙа япраҡтары һәм тамыры ҡулланыла. Япраҡтарын сәскә атҡан осоронда йыйып, күләгәле урында киптерәләр, тамырын - вегетация осоро тамамланғас, көҙөн ҡаҙып алалар. Япрағын йыйғанда, тире янмаһын өсөн, ҡулға бирсәткә, оҙон еңле әйбер кейеү мотлаҡ. Уларҙы йыуып, өлөштәргә бүләләр һәм яҡшы елләгән урында киптерәләр. Был процесс айға һуҙыла һәм сеймалды, тигеҙ кипһен өсөн, даими әйләндереп, болғап торорға кәрәк. Кипкәндән һуң уны тәбиғи материалдан тегелгән тоҡтарға тултырып һаҡлайҙар. Һаҡлау ваҡыты - кәм тигәндә ике йыл. Үлән менән дауаланыусылар балтырғандың орлоҡтарын да файҙалана. Уларҙы ла, йыйғас, йоҡа ғына итеп йәйеп, даими болғап тороп киптерәләр, кипкән орлоҡтарҙы ҡағыҙ пакеттарҙа һаҡлайҙар.

Дауалау сифаттары: Халыҡ медицинаһында балтырған киң ҡулланыла. Уның составында ҙур күләмдә алколоидтар, шулай уҡ ыҫмала, фурокумарин, флавоноидтар, глютамин, каротин, марганец, еҙ, тимер кеүек микроэлементтар бар. Фитомедицина үҫемлектең тамырҙарын һәм орлоҡтарын уларҙа эфир майҙары, аскорбин кислотаһы, каротин булғаны өсөн ҡуллана. Балтырған һутын сей һәм эренле яраларҙы дауалау өсөн файҙаланалар. Хатта псориаз да бындай дауа алдында бирешә. Шулай уҡ был үлән менән астманы ла дауалайҙар. Тамырҙарын бауыр һәм һары ауырыуҙары булғанда ҡулланалар. Ғалимдар үҫемлектең ират енси гормондарын барлыҡҡа килтереүгә ярҙам итеүен билдәләй. Шулай уҡ ул бәшмәк сиренән дә дауа.

Үҫемлек спазмолитик, тынысландырыусы сифаттарға эйә, шуға күрә нервылар тартышыуы, нервы өйәнәге, невротик ҡаҡшау, эпилепсия өйәнәге ваҡытында ҡулланыла. Ул шулай уҡ ҡан туҡтатыусы һәм үт ҡыуыусы булараҡ та билдәле.

Традицион булмаған медицина балтырған төнәтмәһен теш ауыртҡанда, лимфа биҙҙәре ялҡынһынғанда, диарея ваҡытында, гастроэнтерит һәм метеоризм ваҡытында, ҡысынма, ҡатын-ҡыҙҙар сирҙәре, шештәр һәм лимфаденит булғанда ҡулланырға ҡуша. Шифалы үҫемлектең сәскәләре быуындар тайғанда һәм быуындар елһенгәндә ҡулланыла.

Тамыры һәм орлоҡтары үт ҡыуыу һәм үт юлында таш булғанда, шулай уҡ бөйөрҙәр ялҡынһынғанда файҙаланыла. Емештәре депрессив хәл-торошта, нервылар ҡаҡшағанда ҡулланыла. Япраҡтарының һәм тамырҙарының төнәтмәһе ашҡаҙан-эсәк трактын һәм матдәләр алмашыныуын дауалағанда яҡшы һөҙөмтә бирә.

**Ашҡаҙан-эсәк трактын дауалағанда.** 30 грамм киптерелгән балтырғанды 200 грамм ҡайнар һыу менән бешекләгәс, уны 1 сәғәт төнәтеп ултыртырға, һарҡытып алғандан һуң, ашар алдынан 15 минут элек 50 грамм төнәтмә эсергә. Дауаланыу курсы - бер аҙна.

**Үт ҡыуығында таш булғанда.** Өс балғалаҡ кипкән балтырған тамырына бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һүрән утта 5 минут ҡайнатырға. Һарҡытып алғас, ашарҙан алда 20 грамм төнәтмәне көнөнә өс тапҡыр эсергә.

**Ашҡаҙан ауыртҡанда.** Ике балғалаҡ кипкән тамыр алып, уға ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм ярты сәғәт төнәтергә. Һарҡытып, 50 грамм төнәтмәне ашарҙан 15-20 минут алда көнөнә 4 тапҡыр эсергә.

**Енси функциялар түбән булғанда.** 70 грамм киптерелгән һәм ваҡланған тамырҙы 1 литр һыу ҡойоп, һүрән утта 10 минут ҡайнатырға. Һарҡытылған төнәтмәне тәүлек буйына тигеҙ өлөштәргә бүлеп эсергә.

**Ҡатын-ҡыҙҙарҙың шәһүәт әүҙемлеген үҫтереү.** Балтырғандың спиртлы төнәтмәһен ике өлөш алып, уға бер өлөш кориандр төнәтмәһе, бер өлөш ҡомалаҡ ҡушырға. Ҡатнашмаға яртылаш һыу һалып, көнөнә ике тапҡыр, ашау-ашамау мөһим түгел, ике аш ҡалағы эсергә.

**Теш һыҙлағанда.** Бер балғалаҡ ваҡланған тамырға бер стакан спирт ҡойоп, кәм тигәндә 4 сәғәт торорға. Һарҡытҡандан һуң ике ҡалаҡ төнәтмәне бер стакан һыуға һалып болғап, ауыҙҙы сайҡатырға. Теш һыҙлауын баҫыр өсөн үҫемлектең япраҡтарын да файҙаланырға мөмкин. 10 грамм кипкән япраҡҡа 200 грамм спирт ҡойоп, ике аҙна ҡараңғы урында төнәтергә. Һуңынан һарҡытып, ауыртҡын теште сайҡатыу өсөн алынған бер стакан йылымыс һыуға 2-3 ҡалаҡ ҡушырға.

**Ревматизмды дауалау.** Был осраҡта балтырғандың япраҡтары ҡулланыла. Уларҙы ҡайнар һыу менән бешекләп, ауыртҡан урынға туҡымаға төрөп һалалар.

**Невроз, эпилепсия, ҡорошҡаҡты дауалау.** 20 грамм кипкән тамырға ярты литр һыу һалып, уның күләме 1/3 өлөш ҡалғанға тиклем ҡайнатырға. Һарҡытҡандан һуң, көнөнә 20 грамлап, 4-6 тапҡыр эсергә.

**Тире ауырыуҙарын дауалау.** 50 грамм кипкән үләнде 400 грамм ҡайнар һыу менән бешекләп, ике сәғәт торорға. Һуңынан төнәтмәне һарҡытып, тиренең боҙолған урындарына компресс итеп һалырға. Фурункулез, эренле яралар булғанда ярҙам итә.

**Ҡулланыу тыйыла:** балтырған, әйтеүебеҙсә, ағыулы үҫемлек. Тирегә ике минут дауамында балтырған тейгән урын ҡайһы берҙә беренсе дәрәжә бешеүгә килтерергә мөмкин. Уның көпшәләрен ашағандан һуң, галлюцинациялар башланыуы ихтимал. Бик йыш балтырған төнәтмәләрен эсеүселәрҙең ҡан баҫымы үҙгәреүе, енси теләк кәмеүе күҙәтелә. Был үҫемлек нигеҙендә эшләнгән препараттарҙы гастрит менән яфаланыусыларға ҡулланыу тыйыла. Спиртлы төнәтмәләрен алкоголизмдан дауаланыусыларға бирергә ярамай.

Белгестәр рецептарҙа күрһәтелгән миҡдарҙарҙы теүәл үтәргә ҡуша, сөнки артыҡ ҡулланыу ағыулыныуға килтереүе мөмкин. Ағыуланыуҙың симптомдары - өшөү һәм баш әйләнеү, көслө ҡысыныу. Балтырған һуты осраҡлы ғына тәнегеҙгә эләкһә, зыянлаған урынды тиҙ генә йыуырға һәм уны синтомицин майы һөртөп бәйләп ҡуйырға кәрәк. Тире ҡысыуын бөтөрөү өсөн бер нәмә лә ҡушылмаған ҡуйы сәй менән һөртөгөҙ.

Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: балтырған препараттары менән дауаланыуҙы башлар алдынан мотлаҡ табип менән кәңәшләшегеҙ!

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

## ИСЛАМ - ХИКМӘТ ДИНЕ

Бер ваҡыт үҙенең дуҫ-иштәре менән әңгәмә ҡороп ултырғанда Ғүмәр ибн Әл-Хаттаб: "Мөмкинлегегеҙ булһа, Аллаһтан һеҙ нимә һорар инегеҙ? - тип ҡыҙыҡһына. "Ошо бүлмә тулы аҡса булһын ине лә, мин уны Аллаһ юлына тотона алһам ине", - тиҙәр берәүҙәр."Ошо бүлмә алтын менән тулып, уны Аллаһ юлына тотоноу мөмкинлеге табылһын ине", - тиҙәр икенселәр. "Мин үҙем әле бына беҙ ултырған бүлмә үҙем белгән, үҙем һөйләгән Әбү Ғөбәйҙә, Муғаз ибн Джәбәл, Хузайфа Әл-Йәмәни кеүек аҡылы камил, холҡо күркәм кешеләр менән тулы булып, уларҙың Аллаһ хаҡында хаҡ һүҙ һөйләп, бәндәләрҙең холҡон төҙәтеү, уларға тәрбиә биреү эшендә хеҙмәт итеп йөрөүҙәрен теләр инем", - ти Ғүмәр. Шулай ул аҡыллы, намыҫлы, иманда көслө, игелектә тырыш дуҫтар менән ғүмер итеүҙе бөтә хазиналарҙан артығыраҡ күреүен иҫкәртә. Ҡөрьән дә бит өйрәтә: "Эй, Мөхәммәт! Аллаһ юлына өндәп йөрөгәндә мәжүсиҙәр араһында ла хикмәтле һәм яҡшы һүҙ, иң яҡшы юлдар менән нәсихәт һәм бәхәс алып бар".

**"Ән-Нәхл" сүрәһе, 125-се аят.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Май-июнь (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (23) дүшәмбе | 3:20 | 4:50 | 13:30 | 20:07 | 21:37 | 23:07 |
| 31 (24) шишәмбе | 3:19 | 4:49 | 13:30 | 20:09 | 21:39 | 23:09 |
| 1 (25) шаршамбы | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 20:10 | 21:40 | 23:10 |
| 2 (26) кесе йома | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 20:11 | 21:41 | 23:11 |
| 3 (27) йома | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 4 (28) шәмбе | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:13 | 21:43 | 23:13 |
| 5 (29) йәкшәмбе | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:15 | 21:45 | 23:15 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Май айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Белорет районы** Ҡаҙыш ауылынан Әминә Абуталипова, Инйәр ауылынан Әлфирә Мөхәмәткилдина, Рәйфә Низамова, Ҡаһарман ауылынан Фәнзиә Хәйруллина, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Гүзәл Монасипова, **Хәйбулла районы** Байғусҡар ауылынан Мөнирә Моратова, **Күгәрсен районы** Үрге Биҡҡужа ауылынан Сәриә Айҙарбәкова, Новохвалынский ауылынан Гөлсөм Суҡбаева, Бикбулат ауылынан Гөлнәзирә Кинйәбаева, Мораҡ ауылынан Альмира Суҡбаева, Рүзилә Янсина, **Ғафури районы** Сәйетбаба ауылынан Рәзифә Юлбарисова, **Ауырғазы районы** Үтәймулла ауылынан Рәмилә Ғибәҙуллина, **Әбйәлил районы** Салауат ауылынан Мәрхәбә Ноғоманова, Атауҙы ауылынан Маһинур Замалетдинова, **Учалы ҡалаһынан** Илгиз Моратшин, Римма Усманова, Учалы районы Танысау ауылынан Ғәҙилә Мөслимова, Бәләкәй Ҡаҙаҡкол ауылынан Вил Лутов, **Өфө ҡалаһынан** Әлфиә Зәбдинова, Зәкинә Хисамова, Мәхтүмә Яхина, Зәлифә Юнысова, **Салауат районы** Мөрсәлим ауылынан Миңзәлә Ҡорбанғәлиева, **Стәрлетамаҡ районы** Мырҙаш ауылынан Нурия Миңлеғужина, Шишмә районы Түбәнге Хәжәт ауылынан Ғәлийән Төхфәтуллин, **Белорет ҡалаһынан** Вәдүт Йомағужинды ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм иңиң матур теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ! Һаусәләмәт, оҙон ғүмерле булығыҙ, тормош ваҡлыҡтарына бирешмәй, һәр атҡан таңға ҡыуанып йәшәгеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

* * *

Ошо көндәрҙә **Ғәлиулла Ғәрифулла улы ХӘЛИЛОВ**тың оло байрамы - **75 йәшлек юбилейы**. Абзыйыбыҙ Ишембай районы Һайран ауылында 1941 йылдың йәмле май айында тыуа. Бер ай тулып та өлгөрмәй, ҡәһәрле һуғыш башлана, атаһы Ғәрифулла һуғышҡа китә һәм әйләнеп ҡайтмай. Шуға ла уға "атай" тигән һүҙҙе әйтеп, атай иркәһен тойорға тура килмәй. Өләсәйебеҙ Миңъямал ауыр йылдарҙа ла балаларын ас-яланғас итмәҫкә тырыша. Һуғыш бөткәс, икенсе тапҡыр тормошҡа сығып, тағы ла өс баланы үҙ тәрбиәһенә ала.



Ошондай ауырлыҡтар күреүенә ҡарамаҫтан, абзыйыбыҙҙың күңеле саф, бик игелекле. Ҡул эшенә маһир, оҫта балтасы, рәссам, йырсы ла ул. Үҙ тырышлығы менән Мәләүез ҡалаһы эргәһендә семәрләп, биҙәкләп йорт һалып инделәр. Фатирҙарын да ул яһаған шкафтар биҙәй. Туғандарына ла картиналар, йорт йыһаздары эшләп бүләк итә торған ғәҙәте бар. Һәүәҫкәр йырсы булараҡ Рәсәй ҡалалары буйлап гастролдәрҙә лә йөрөй, яңы ғына Ҡаҙан ҡалаһында башҡорт халыҡ йырын башҡарып, тамашасыларҙы таң ҡалдырып ҡайтты. Мәктәптәрҙә, китапханаларҙа балалар менән осрашыуҙар ойоштора, тарих һөйләп, йырлап, уларҙың күңелен үҫтерә, рух уята. Фәниә еңгәбеҙ менән ике бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Ҡыҙы Ләйсән, үҙенә оҡшап, матур итеп йырлай. Һөнәре лә музыкаға бәйле.

Ҡәҙерле абзыйыбыҙ! Беҙ һинең менән ысын күңелдән ғорурланабыҙ. Һиңә рәхмәттәребеҙҙе еткерәбеҙ һәм ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Ныҡлы һаулыҡ, бәхетле ғүмер, ғүмерле бәхет теләйбеҙ, балаларыңды, беҙҙе шатландырып, оҙон-оҙаҡ йәшәргә насип бул-һын.

**Иң изге теләктәр менән, Әҫкәпъямал апайының балалары.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# РУХЛАНДЫРҘЫ...

## Сибай байрамдары

**Сибай ҡалаһында XIII "Ирәндек моңдары - 2016" Төбәк-ара башҡорт йырын башҡарыусылар конкурсы үтте. Өс көн буйы барған был сара сиктәрендә шулай уҡ "Ирәндек батыры-2016" спорт фестивале, Милли кейем көнө ойошторолдо.**






Теүәл ике тиҫтә йыл элек Сибай ҡалаһы хакимиәте тәҡдиме менән барлыҡҡа килгән "Ирәндек моңдары" бәйгеһендә быйыл да ҡатнашырға теләк белдереүселәр күп булды. Бәйгелә 88 кеше ҡатнашты, уларҙың 11-е - профессиональ, 30-ы үҙешмәкәр йырсылар, 47-е - балалар. Башҡорт халҡының бай йыр мираҫын һаҡлау, йырҙарҙы юғары профессиональ кимәлдә башҡарыусылар араһында яңы исемдәр асыу, һәләтле йәштәргә ярҙам итеү маҡсатынан үткәрелгән бәйге географик йәһәттән дә киңерәк тарала бара. Был юлы республика райондары һәм ҡалаларынан тыш, Силәбе, Ырымбур, Свердловск өлкәләре башҡорттары ла байрамдан ситтә ҡалманы.

Конкурсҡа ситтән ҡунаҡтар ҙа саҡырылғайны. Этнограф, Венгрия фәндәр академияһы ғалимы Давид Кара Шомфаи сәхнәнән башҡортса һөйләп, ҡурай уйнап, өҙләп, "Илсе Ғайса"ны башҡарып хайран итте. Башҡорт халыҡ ижадын ул күптән өйрәнә, республикаға дүртенсе тапҡыр килеүе. Иң ҡыҙығы, уларҙың халҡында бер йыр башҡорттоң "Сибай"ына ауаздаш икән. Ғалим менән бергә килгән йырсы Марта Шебештьен уны ҡурайсы Раушан Ниязғоловҡа ҡушылып башҡарҙы. "Сибай"ҙы Ғаяз Ғәйетбаев ишеттерҙе. Тамашасылар ҡунаҡтарҙың йырында башҡорт йырҙарына хас һағыш һәм моң ятыуына хайран ҡалды. Марта Шебештьен атаһының Башҡортостанды яратыуы, башҡорт йырҙары менән ҡыҙыҡһыныуын да әйтте. "Башҡорт йырҙарын, көйҙәрен тыңлаған һайын улар миңә шул тиклем таныш булып тойола. Һәр хәлдә, мин уларҙы бер ҡасан да тыныс ҡына тыңлай алмайым, улар минең күңелемдең иң нескә ҡылдарына тейеп, хистәр ҡойоно уйната", - ти ул.

Был бәйгенең шундай үҙенсәлеге бар - уға ҡыҫҡа ғына ваҡытта әҙерләнеп булмай. Сөнки халыҡ йырын һәр кем еренә еткереп башҡара алмай. Халыҡ алдына сығып йырлай алырлыҡ кимәлгә етер өсөн йырсы уның бар үҙенсәлеген, тәү сиратта, моңдо йөрәге менән тойорға өйрәнергә тейеш. Бәйгелә "Урал", "Сибай", "Буранбай", "Ильяс" кеүек боронғо йырҙарҙы башҡара белеү мотлаҡ шарт иҫәпләнеүе лә юҡҡа түгел, был йырсыларға талапты тағы ла арттыра, уларҙы үҫтерә. Баһалама ағзалары белдереүенсә, быйыл "Суҡан батыр", "Ҡаранай батыр", "Ҡарат" кеүек һирәк башҡарылған йырҙар ҙа тәҡдим ителгән.

Бәйгенең төп бүләге - Гран-при данлы Буранбай сәсән вариҫы Иҙел Аралбаевҡа тапшырылды. Сибай ҡалаһы хакимиәте башлығы Хәлит Сөләймәнов уға 100 мең һумлыҡ сертификат тапшырҙы. 16 йәшкә тиклемге төркөмдә беренсе урынды Хәйбулла районынан Роберт Исламов менән Баймаҡтан Вилдан Ҡотоев, профессиональ йырсылар араһынан Өфөнән Дамир Тайыпов менән Сибайҙан Нух Ҡотоев яуланы.

"Ирәндек батыры" фестивале үткәреү шулай уҡ Сибайҙар өсөн матур бер йолаға әүерелде. Йәш быуынды халыҡ традициялары нигеҙендә генә рухлы итеп тәрбиәләп була, тигәнгә күптән инанған уны ойоштороусылар - Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы, Сибай ҡалаһы хакимиәте. Быйыл ул өсөнсө тапҡыр үтте һәм үҙенең майҙанына Учалы, Белорет, Сибай ҡалаларынан, Бөрйән, Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла, Йылайыр, Ейәнсура, Мәсетле, Учалы райондарынан 63 кешене йыйҙы. Улар йүгереүҙә, пневматик мылтыҡтан атыуҙа көс һынашты, милли көрәш тә сәмле барҙы. Еңеүселәр 16-18 һәм 19 йәштән өлкәндәр төркөмөндә айырым билдәләнде. "Ирәндек батыры" исеменә БДУ-ның Сибай институтынан Зөфәр Шөғөрөв менән Сибай педагогия колледжынан Баязит Исхаҡов лайыҡ булды. Бәйгенең абруйын арттырып, Баймаҡ районы хакимиәте етәксеһе Илшат Ситдиҡов менән Сибай ҡалаһы хакимиәте башлығы Хәлит Сөләймәнов егеттәргә арғымаҡ бүләк итте.

Милли кейем көнө "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе үҙәге етәксеһе Асия Ғәйнуллина башланғысы менән ойошторолдо. Милли кейемгә иғтибар арттырыу, биҙәүестәргә заманса төҫ биреү, уларҙы дөрөҫ эшләргә өйрәтеү маҡсатынан үткәрелде ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был бәйгеләрҙең иң ҙур әһәмиәте шундалыр: улар үҙ ҡорона йәш быуынды тупланы, уларҙың һәләттәренә лайыҡлы баһаһын бирҙе, шуның менән уларҙың күңелен үҫтерҙе. Йәштәр үҙ халҡын, үҙ мәҙәниәтен яратһын, рухлы булып үҫһен тиһәк, уларҙы халҡыбыҙҙың йолалары нигеҙендә тәрбиәләүҙән дә дөрөҫөрәк ысул юҡтыр, ысынлап та. Ошо байрамдар уятҡан дәрт һәм дарман тамашасылар күңелендә лә оҙаҡ һаҡланыр әле.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# КҮП ҺӨЙЛӘҮҘӘН...

## тун тегелмәй

- Иҫке туның ташлама - ул бит яңыһын һаҡлай.
- Ас эт һөйәк кимерә, бур харам ашап һимерә.
- Йолҡҡолауҙан йөн тетелмәй, күп һөйләүҙән тун тегелмәй.
- Олоғайыу - тәжрибә тупланған тормош һабаҡтары мәктәбе ул.
- Шаҡайып тороуҙан бүрәнәгә әйләнеүең яҡшыраҡ.
- Һәр туп иткән таш, һәр сыңлаған моң түгел.
- Ыңғырашыуҙан - сир, тик тороуҙан эш бөтмәй.
- Ҡатын-ҡыҙ аҙһа - өйгә ҡаза, ир-ат аҙһа - илгә яза.
- Мал йәнленән мал һорама, йәнен физа ҡылыр.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДӨРӨҪЛӨК...

## алдаҡсының күҙен тишә

Үҙ илем - алтын бишек, сит илдең төбө тишек.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡурҡаҡтарға власть кәрәк, власһыҙ уларға йәшәү ҡурҡыныс.

**(Станислав Лец).**

Йәшәү менән үлем йәнәш кенә йөрөй, әммә бер-береһе тураһында белмәйҙәр.

**(Эмиль Кроткий).**

Һәр кем үҙ тормошонда осратырға тейешле кешеһен осрата.

**(Натан Эйдельман).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:" Бер ваҡыт Будда Ананда исемле хеҙмәтсеһен эйәртеп иртә таңдан саф һауала йөрөргә сыға. Уның эргәһенә бер кеше килеп:"Алла бармы?"- тип һорай. Будда бер секунд тирәһе уның күҙҙәренә ҡарап тора ла: "Юҡ, Алла юҡ һәм бер ваҡытта ла булмаған. Был уйҙы башыңдан сығарып ташла", - ти. Кеше аптырауға ҡалып, баҫҡан урынында ҡатып ҡала. Будда ары китә. Төш яҡынлашып килгәндә Будда эргәһенә тағы бер кеше килә һәм: "Алла бармы?" - тип һорай. "Алла бар, булған һәм буласаҡ. Эҙлә, табырһың" , - ти Будда. Будданың бер көн эсендәге ике төрлө яуабына тамам аптыраған хеҙмәтсеһе унан был хаҡта һорарға йыйынғанда ғына өсөнсө кеше килә һәм: " Алла бармы?"- тип һорай. Будда был саҡта ағас янында ултырып, ҡояш байығанын һәм аҡ болоттарҙы күҙәтә. Ул "Алла бармы?" тип һораған кешене үҙенең эргәһенә ултырырға ымлай, үҙе күҙҙәрен йома. Кеше Будданы тыңлап, уның эргәһенә ултыра. Улар байтаҡ ваҡыт өнһөҙ ултыралар. Ҡояш байый, ҡараңғы төшә башлай. Кеше урынынан тороп, Будданың аяҡтарына ҡағыла һәм:"Яуабың өсөн рәхмәт һиңә", - тип китеп бара.**

**Ошонда Ананда Буддаға шулай ти: "Минең һорауыма яуап бирмәһәң, мин бөгөн йоҡлай алмаясаҡмын. Бер көндө бер үк һорауға һин өс төрлө яуап бирәһең. Эш нимәлә?" Будда шулай ти: "Беренсе һорау биреүсе - дини кеше. Ул Алланың барлығына ышана һәм ул миңә был һорауына яуап алырға түгел, ә Алланың барлығын раҫлатырға килде. Ул ғалим, ул Изге китапты яҡшы белә. Уға тетрәнеү кәрәк ине, мин уны тетрәндерҙем. Икенсе кеше атеист һәм ул Аллаға ышанмай. Ул шулай уҡ ғалим, башы тулы идея, тик тәүге кешенең ҡапма-ҡаршыһы. Ул миндә үҙенең ышанмауына хуплау табырға теләне. Хуплау тапманы һәм шулай уҡ тетрәнде. Өсөнсө кеше ысын мәғәнәһендә эҙләнеүсе. Ул яуап эҙләмәй, ул бар нәмәне үҙендә һынап ҡарарға теләй. Ул нимәләр асырға теләне һәм мин уға яуап бирмәнем, ә минең эргәгә ултырып торорға тәҡдим иттем. Һәм ул эҙләгәнен тапты..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 931/05